ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 август (урағай) 2021

№34 (972)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тағы ла ут-ялҡын тураһында**



3

**Туған телеңде өйрән!**



6

**Белемле лә, шаян да, уҫал да ул,**

йәки Хирург халҡы хаҡында бер фәлсәфә



8-9

**Йылан ите ашаған...**



12-13

**Һайлауҙар** 14-15

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалғанығыҙ өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ә хәҙер 2022 йылдың беренсе яртыһы тураһында ваҡытынан алда хәстәрлек күреп, июль-август айҙарында "Киске Өфө"гә 6 айға - 692 һум 94 тингә, 3 айға - 346 һум 47 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!***

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ЯНА... ЯНА...

**Бөгөн республикала урманҡырҙар яна. Һуңғы айҙа был хәбәр теле-радионы һәм бөтөн интернетты тултырҙы. Һәм ошо хәл халыҡты төрлө төркөмдәргә бүлеп күҙ алдына баҫтырҙы ла. Утты һүндереүселәр ҙә, ул утты тоҡандырыусылар ҙа, шул янғын тирәһендә фото һәм видеоға төшөү өсөн йөрөүселәр ҙә табылды. Ҡалайтаһың. Ысынбарлыҡ шулай.**



Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса министрлыҡтың 14 августҡа ҡарата мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда көсөргәнешле хәл-торош тыуған, 25 урында ут сыҡҡан, янғын дөйөм 3 524,55 га майҙанды ялмаған. Ут бигерәк тә Бөрйән, Йылайыр, Хәйбулла, Ейәнсура һәм Белорет райондарында ҡотора.

Ут - уйын эш түгел. Йәй уртаһында ҡайҙалыр ут сығыу оло хәүеф тыуҙыра. Бигерәк тә янғынға яҡын ултырған ауыл халҡының кисерештәрен әйтеп тә, аңлатып та бөтөп булмаç. Осоп килгән бер осҡон бөтөн мөлкәтте, йорт-ҡураны күҙ асып йомған арала көлгә әйләндерергә мөмкин. Ә инде ялҡын теле эсендә ҡалған урманды, йәшеллекте, ерлектәрен ташлап китергә мәжбүр булған барлыҡ тереклекте, төтөн һулап йәшәүгә дусар ителгән ауылдарҙы ла иҫәпкә алғанда... Бөгөнгө заман техникаһы һәм технологиялары менән был проблема һанаулы ғына көндәрҙә хәл ителергә тейештер һымаҡ ине лә бит...

Урман янғындары һуңғы йылдар ғына касафаты түгел. Йәшен йә әҙәмдәр һаҡһыҙлығы менән урмандар борон-борондан да янды. Хатта белгестәр әйтеүенсә, тәбиғи яңырыуҙар өсөн тәбиғәттә янғындар булып торорға тейеш тә. Әле интернет һәм башҡа бәйләнештәр булмаған совет осоронда ҡырҙа янғын сығып китһә, шунда уҡ район өҫтөндә кукурузник самолеттар пәйҙә була, ауылдарға янғындың картаһы төшөрөлгән листовкалар ташлап үтә һәм ирегеттәр бер-ике тракторға тейәлеп барып һүндереп тә килә ине. Янғын һүндереү самолеттары булды. Шулар янғын майҙанын һыу менән ҡойондороп үтте. Бер ниндәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы, ирекмәндәр йәки донъянан ярҙам һорап, аҡса йыйып ятҡан хәлде иҫләмәйем. Һеҙ хәтерләйһегеҙме шундайҙы?

Янғын зонаһында йәшәгәндәр, ирекмән булып барып ҡайтҡандар һәм урман хужалығында оҙаҡ йылдар эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан белгес менән дә һөйләштем был сетерекле хәлдәр хаҡында. Ситтән ҡарап ҡына анализ яһап булмай, хатта айыҡ аҡыллыға аңлашылып торғанда ла, фекерҙәр төрлө була ала. Әммә бер урында был кешеләрҙең уйы тап килә: әлеге янғындарҙың барыһы ла тәбиғи түгел. Урманда йәшәгән һәм эшләгәндәрҙең әйтеүенсә, йәшендән сыҡҡан янғын башҡа төрлө. Тәбиғи янғын бер урында тоҡана ла, ел ыңғайына хәрәкәт итеп ары китә. Һәм был ут, ғәҙәттә, тау башы, бейек ағаслы урындар кеүек йәшен атыуға хас булған билдәлерәк урындарҙа башлана. Ә әлеге янғындар ҡайҙа теләй, шунда сыға, ваҡ сауҡа эсендә лә, дала уртаһында ла һәм бит улар туҡтамай, берәү шырпы һыҙып ырғытып тик барған кеүек. Был тәңгәлдә енәйәт эше ҡуҙғатылып, ентекле тикшереүҙәр алып барылырға тейештер, тигән фекерҙә халыҡ.

Янғын осрағында ирекмәндәрҙең хеҙмәте хуп, әлбиттә, әммә был бит тота килеп һәр кем башҡара ала торған эш түгел. Барып төшөп, бер-ике сәғәттә алынған инструкция һәм көрәк-таяҡ менән йәй уртаһындағы урман утын һүндереп маташыу - ул кешеләрҙе ыҙалатыу, уларҙың ғүмерен, сәләмәтлеген хәүеф аҫтына ҡуйыу ғына. Ҡайҙа беҙҙең маҡталған, данланған, күргәҙмәләргә сығарылған техника, авиация, тотош министрлыҡтары булған урман хужалығы, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре, янғын һүндереүселәр, хәрбиҙәр?

Ә инде ниндәйҙер ваҡиға һәм илгә килгән бәләләр өҫтөндә үҙ файҙаһын йүнләргә яратыусыларға был хәл ҡулай ғына булды. Улар һәр аҙымдарын видеоға төшөрөп, хәбәрҙәрен һөйләп, янғын урынына барып, бер аҙ ҡоромға буялып йөрөп ҡайтыу өсөн бер-ике көндәрен йәлләмәне. Янғын һүндеме-һүнмәнеме - уларға ул мөһим түгел, ә лайктар йыйылыуы мөһим. Ярай, уныһы ла кәрәктер, бөгөнгө интернет донъяһы бит шуға ҡоролған...

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## ИМАНҒА ҠАЙТАЙЫҠ!

***Тәүбәләргә килтермәксе беҙҙе -***
***Һынауҙарҙың оҙон сылбыры...***
***Тажзәхмәте килеп шаңҡытҡайны,***
***Зарыҡтырҙы яумай ямғыры.***
***Ғәйеп эҙләп тирә-йүнгә баҡтыҡ:***
***Хөсөт, ғәйбәт алға ынтылды.***
***Күпме рәнйеш ямғырҙары яуҙы,***
***Бинахаҡҡа биттәр йыртылды...***
***Һинең, минең, уның ғәйебе ул***
***Ошо хәлгә килеп тарыуҙар.***
***Асыу - алдан, аҡыл арттан булып,***
***Юл-юҫыҡһыҙ китеп барыуҙар.***
***Мәсет ҡалҡыттыҡ та, буш тотабыҙ,***
***Дин - имамдар эше, тиәбеҙ.***
***Иман-әхлаҡ беҙҙе ташлап киткәс,***
***Ғәмһеҙлекте күккә сөйәбеҙ.***
***Алла тигеҙләй ул, ти ололар -***
***Тигеҙләр бер байын-ярлыһын.***
***Өлөш менән тыуа һәр бер бәндә -***
***Нисек ошо ерҙәр тар булһын?***
***Тәүбәбеҙгә ҡайтмай ҡотолоу юҡ -***
***Йөҙ борайыҡ әле иманға.***
***Интернетта кеше әрләп ятыу***
***Ғәҙәт булып китте диванда...***
***Үҙебеҙҙән һорау алайыҡтар***
***(Һоралғансы бер мәл ҡәберҙә).***
***Кем беҙ? Ниндәй? Ниңә Ергә тыуҙым? -***
***Бик һуң булмаç борон. Хәҙер, ә?***
***Кешелеклек менән миһырбанды***
***Тултырайыҡ әле күңелгә.***
***Беҙҙең ошо хәлгә тарыуыбыҙ***
***Бушты-юҡҡа ғына түгел дә!***
***Уйланайыҡ, мейе сырыштырып,***
***Ҡалҡан булһын иман барынан.***
***Ә әлегә... Беҙҙең гонаһтарҙан***
***Урман яна, ерҙәр ярыла...***

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

12+

✓ *Кеше хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан эшләй, дәүләткә килемдән һалым һәм иғәнә түләй. Һөҙөмтәлә дәүләттән ана шундай "сәйлек" тиндәр ала, ә уларҙың пенсияларына законлы индексация 2016 йылдан алып башҡарылмай.*



ИҢ МАТУР ҺҮҘ

# РУХ

**Башҡорт телендә бик матур һүҙ бар - рух! Һуңғы ваҡыттарҙа йыш ишетелә ул. Рухлы кеше, рухи байлыҡ, рухи ҡиммәттәр, рухи ныҡлыҡ, рухи күтәренкелек, рухи яҡынлыҡ…**

Рух һүҙенең һүҙлектәге "кешенең эске уй-тойғоһо" тигән аңлатмаһы бик үк уның мәғәнәһен биреп бөтмәгән дә кеүек, миңенсә. Был атаманы бик көслө итеп күрәм һәм шуға ышанам.

Рух менән бәйле һүҙҙәрҙе ишеткәндә, бигерәк тә рухи байлыҡ, ҡиммәттәр тураһында һүҙ барһа, уны беҙ йыш ҡына дин, дини йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр менән бәйле, тип уйлайбыҙ. Һәм был - бик дөрөҫ, тигән фекергә киләм.

Рухилыҡты үҙ-үҙең, эргәңдәге кешеләр, тирә-яҡ мөхит, тәбиғәт менән килешеп, гармонияла йәшәү, тип аңлайым. Беҙҙең динебеҙ нигеҙендә лә ошо хәҡиҡәт ята. "Рухлы кеше" тигәндә күҙ алдына юғары үҫешкән, аҡыллы, ғәҙел, милләтенә, халҡына, мәҙәниәтенә, тарихына тоғро, киләсәк быуын алдында яуаплылыҡ тойғоһо йөрөткән шәхес килеп баҫа. "Рухи ныҡлыҡ" тигәндә ихтыяр көсөн, яҡтыға ынтылышҡа, изге, юғары маҡсаттарға тоғролоҡто төҫмөрләргә мөмкин.

Рухлы кеше булған кеүек, рухһыҙы ла бар арабыҙҙа, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Рухһыҙ тигәндә иң беренсе күҙ алдына битарафтар килеп баҫа. Ә битараф кеше - иң ҡурҡынысы. Тап уларҙың өндәшмәй ҡалыуы, бар нәмәгә эйәк ҡағып, баш эйеп ултырыуы арҡаһында күпме бәләләргә юл ҡуйыла. Бер аҡыл эйәһенең һүҙҙәре лә бар бит:"Дуҫтарыңдан ҡурҡма - улар бер мәл һиңә хыянат ҡына ҡылырға мөмкин; дошмандарыңдан да ҡурҡма - улар бер мәл һине үлтереүе ихтимал һәм һин был хаҡта үҙең дә беләһең, шул хәлгә юл ҡуймау сараһын күрәһең; битарафтарҙан ҡурҡ - донъялағы бар яуызлыҡ-насарлыҡтар уларҙың өнһөҙ ризалығы менән атҡарыла".

Эйе, рухы, ихтыяры булмаған кешенән бер ниндәй кешелеклелек сифаттарын эҙләп тормаһаң да була. Ундайҙар кешене генә түгел, ә үҙен дә хөрмәт итмәй. Ул бөтә нәмәгә "бер көн принцибы" менән ҡарай, ундайҙарҙа ҡулланыусы мөнәсәбәте ныҡ үҫешә. Ул ижад итеү, төҙөү, етештереү, киләсәк быуын өсөн эшләмәй, ә мөмкин тиклем алып ҡалырға, ҡулланырға тырыша. Ситтән ҡарағанда рухһыҙҙар бәхетле булып күренергә лә мөмкин. Ә ысынында иһә ул үҙенең рухи яҡтан көсһөҙлөгөн танып, һәр ваҡыт бәхетһеҙлек кисереп йәшәй.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

БЫНАҒАЙЫШ!

**Ниһайәт, биш-алты йыл буйы яҙа, һөйләй, талап итә торғас, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға… юҡ, индексация түгел, ә ошо талапҡа бик үҙенсәлекле яуап алынды - уларға өҫтәмә түләргә ҡарар ителде. Ошо ҡарарға ярашлы, август пенсияһы был категория халҡына 296 һум да 58 тингә артасаҡ.**

# ЭШЛӘМӘҺӘҢ, ЯҠШЫРАҠМЫ?



Сағыштырыу өсөн: быйыл 1 ғинуарҙан эшләмәгән пенсионерҙарға, мәҫәлән, 1000 һум өҫтәлде. Шул да булдымы ғәҙеллек? Хәҙер уйлап ҡарайһың инде: эшләп, үҙеңә лә, йәмғиәткә лә файҙалы булып йәшәргә тырышыу почеттамы беҙҙә, әллә эшләмәйенсә лә лайыҡлы өҫтәмә алып ҡына ятырғамы? Өлкән быуындың эшкә тырмашып ятыуы хөкүмәт даирәләрендә лә әллә ни хуплауға лайыҡ түгел, ахырыһы. Был уларҙың иң аҙ эш хаҡына эшләп йөрөргә мәжбүр булыуында ла асыҡ күренә бит.

Закон буйынса ла, әхлаҡ, ғәҙеллек ҡанундары буйынса ла тейешлеһен ала алмағас, был категория пенсионерҙар мәсьәләне үҙҙәренсә "хәл итә" башланы: күптәре "күләгәгә" күсте һәм эш хаҡын конвертта ала хәҙер. Башҡа төрлө юлдарын табыу ҙа уларҙы килемгә һалымдан ҡотҡарҙы: баҡсаһында үҫтергәнде һатырға сығырһынмы, ҡуртымға торлаҡ тотһонмо, ниндәйҙер хеҙмәттәр күрһәтһенме - дәүләт биреп еткермәгәнде шундай юлдар менән булһа ла ҡапларға, индексациялау ғәҙелһеҙлеген үҙҙәренсә тигеҙләргә тырыша, тик еңел бирелмәй был эш һөйөүсән пенсионерға: көс, нервылар сарыф итергә, иртәле-кисле тынғы белмәй эшләргә тура килә. Ә инде бындай "законһыҙ" тип аталған килеме асыҡлана ҡалһа, бындай хәлдә 120 000 һум күләмендә штраф, мәжбүри эш һәм хатта 2 йылға иркенән мәхрүм итеү язаһы ҡаралған.

Ләкин башҡа сараһы юҡ пенсионерҙың, сөнки көс-ҡеүәте ташып барғандан йөрөмәй бит ул ҡартайған көнөндә, ә дәүләттең камил булмаған социаль сәйәсәте арҡаһында шундай хәлгә тарығанлыҡтан эшләргә мәжбүр. Торлаҡ-коммуналь түләүҙәр өсөн генә лә бит хәҙер пенсияның яртыһы китеп тора, ә хаҡтар артҡандан-арта бара; аҙыҡ-түлек хаҡтары хаҡында әйтеп торорға ла кәрәкмәй, етмәһә, быйылғы ҡоролоҡ менән бәйле артабан нисек булырын да белгән юҡ әле. Пенсияның ҡалған өлөшөнә лә урын әҙер: дарыуҙарға, түләүле клиникалар кассаһына китеп тора ул, сөнки муниципаль поликлиникаларҙа юғары квалификациялы махсуслашҡан табиптар етешмәй, сират, вирус йоҡтороу хәүефе һәм башҡалар.

"Был эшһөйәр пенсионерҙарҙан асыҡтан-асыҡ көлөү һәм мыҫҡыл итеү. Ниндәйҙер ғәҙеллек булырға тейештер бит! Исмаһам, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙан Пенсия фондына 22 процент иғәнәне кәметегеҙ йә бөтөнләй алып ташлағыҙ!" - тип яҙҙы Рәсәйҙең Плеханов исемендәге иҡтисад университеты доценты Людмила Швец (АиФ, №30). Ысынлап та, 296 һум бер тапҡыр магазинға инеп сығырға ла етерлек түгел. Ҡайҙан соҡоп сығарғандар һуң был сумманы? Өҫтәмә, асыҡланыуынса, өс пенсия коэффициентын ҡушыуҙан (бер балл хаҡы 98 һум 86 тин тора) хасил булған. Ләкин иң көлкөһө һәм ҡыҙғанысы шунда: был өҫтәмә һәр пенсионерға тәтемәүе лә бар икән! Беренсенән, тип аңлата быны белгестәр, үткән йылда 3 балл туплау өсөн айлыҡ эш хаҡың 30 меңдән күберәк булырға тейеш, ә инде унан түбәнерәк икән, ни бары 1 йә 2 балл ғына эләгәсәк.

Ә эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙға, ҡағиҙә булараҡ, бик аҙ түләнә, уларҙың күпселеге 15 меңгә эшләп йөрөргә мәжбүр. Тиндәрҙе "һығыуҙың" икенсе сере шунда: балл хаҡы ағымдағы йәки унан алдағы йылға ҡарап түгел, ә пенсияға сыҡҡан йылғы хаҡ буйынса иҫәпләнә. Мәҫәлән, кемдер берәү пенсияға 2015 йылда сыҡҡан икән, коэффициент та шул йылғы - 71 һум 41 тингә ярашлы иҫәпләнәсәк. Был осраҡта ошо кешегә 3 балл хаҡы ни бары 214 һум тирәһе тәшкил итә. Бындай баш ҡатырғыс хисаплауҙы нормаль кеше аңы менән төшөнөүе ҡыйын, әлбиттә, әммә шул балл һәм һандар артына йәшеренгән хәйләнең асылы бер генә - нисек тә ҡыҫыу, экономиялау. Тимәк, хәҙер кеше оҙағыраҡ эшләгән һайын, өҫтәмәне... әҙерәк алырға тейеш булып сыға. Замана парадокстарының берәһеме был?

Кеше хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан эшләй, дәүләткә килемдән һалым һәм иғәнә түләй. Һөҙөмтәлә дәүләттән ана шундай "сәйлек" тиндәр ала, ә уларҙың пенсияларына законлы индексация 2016 йылдан алып башҡарылмай. Бөгөнгө пенсия моделен ҡайтанан ҡарау өсөн парламент составында үҙгәрештәр кәрәк, тиҙәр ҙә ул. Был иһә 17-19 сентябрҙә үтәсәк Думаға һайлауҙарҙа нисек тауыш биреүебеҙгә бәйле булыуын күҙҙә тота инде...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*Закон буйынса ла, әхлаҡ, ғәҙеллек ҡанундары буйынса ла тейешлеһен ала алмағас, был категория пенсионерҙар мәсьәләне үҙҙәренсә "хәл итә" башланы: күптәре "күләгәгә" күсте һәм эш хаҡын конвертта ала хәҙер. Башҡа төрлө юлдарын табыу ҙа уларҙы килемгә һалымдан ҡотҡарҙы: баҡсаһында үҫтергәнде һатырға сығырһынмы, ҡуртымға торлаҡ тотһонмо, ниндәйҙер хеҙмәттәр күрһәтһенме - дәүләт биреп еткермәгәнде шундай юлдар менән булһа ла ҡапларға, индексациялау ғәҙелһеҙлеген үҙҙәренсә тигеҙләргә тырыша, тик еңел бирелмәй был эш һөйөүсән пенсионерға: көс, нервылар сарыф итергә, иртәле-кисле тынғы белмәй эшләргә тура килә.*

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда, 20 августағы мәғлүмәттәр буйынса, бер тәүлектә 293 сирле асыҡланған. Республикала бөтәһе 53 753 кеше COVID-19 йоҡтороу осрағы теркәлгән. Уҙған тәүлектә 12 кеше коронавирус инфекцияһы ҡорбаны булған. Пандемия башланғандан алып Башҡортостанда 964 кеше ошо мәкерле сирҙән донъя ҡуйған. Дауахананан тыш пневмония менән 138 кеше ауырыған. Коронавирустан вакцинаның тәүге компонентын 1 091 300 кеше алған, 898 516 кеше иһә вакцинацияны тулыһынса тамамлаған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2022 йылдың йәйендә "Изге Анна" карабының ҡалдыҡтарын эҙләү өсөн Төньяҡ ҡотопҡа экспедицияға йыйына. Аксаков исемендәге мемориаль йорт-музейы филиалы мөдире Михаил Чванов республика етәксеһенә ошондай тәҡдим менән мөрәжәғәт иткән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ҡотопсо, яҡташыбыҙ Валериан Альбанов "Изге Анна" шхунаһында экспедицияла булған. 2022 йылда уның 140 йыллыҡ юбилейы билдәләнә.

✓Йылына 6 процент менән льготалы ғаилә ипотекаһы 2023 йылдың аҙағына тиклем оҙайтыла. Был хаҡта Рәсәй Премьер-министры Михаил Мишустин хәбәр итте. Льготалы кредитлау программаһында ике һәм унан күберәк балаларҙың ата-әсәһе, шулай уҡ беренсе сабыйы тыуғандар файҙалана һәм уларға йылына 6 процент менән торлаҡ һатып алыу мөмкинлеге бирелә. Кредитты фатир һатып алыу, шәхси йорт һалыу өсөн тотонорға була.

✓Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин прививка яһатҡан рәсәйҙәр араһында аҡса уйнатыу тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. ТАСС мәғлүмәттәре буйынса, бүләк - 100 мең һум. Бер мең еңеүсе билдәләнә. "Был сара Вакцина яһатҡандарҙың берҙәм реестры нигеҙендә 2021 йылдың 1 сентябренән 1 декабренә тиклем уҙғарыла", - тиелә Хөкүмәт белдереүендә.

✓Үткән аҙнала "Аҡбуҙат" ипподромында "Терра Башҡортостан" ат-спорт турнирының етенсе этабы уҙҙы. Был юлы ярышта Дүртөйлө, Салауат, Хәйбулла, Шишмә, Иглин райондары вәкилдәре осрашты. Ике хәл иткес сабыш йомғаҡтары буйынса Хәйбулла һыбайлыһы Айгиз Тазетдинов еңеүсе булды. Киләһе, һигеҙенсе, этап 28 августа ойошторола.

*✓ "Бер ағас мейестә лә янмаҫ, ике ағас далала ла һүнмәҫ" тигән мәҡәлдәрҙең мәғәнәһенә төшөнәйек. Әлеге мәлдә ут - беҙгә дошман, уға көсәйергә, шашынырға сәбәп ҡылмайыҡ, үҙебеҙ ойошоп көсәйәйек.*



КӨНАУАЗ

# ТАҒЫ ЛА УТ-ЯЛҠЫН ТУРАҺЫНДА

**Ошо көндәрҙә төрлө райондарға янғын һүндерешергә саҡырыуҙар, утты контролдә тотошорға ярҙам һорап ауаз һалыуҙар берегеҙҙе лә битараф ҡалдырмайҙыр. Көндәрҙең үтә лә эҫе тороуы, ел көсәйеүе һәм башҡа беҙгә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында янғын төрлө тарафтарға таралыуҙы дауам итә.**



Социаль селтәрҙәге төркөмдәрҙә республиканың төрлө райондарында йәшәүсе таныштар менән дә халыҡты миктәткән янғындар тураһында фекер алышабыҙ. Бер ир-егеттең яҙған фекеренә туҡталырға булдым. Ошонда бер аҙ сер бар кеүек: "Ныҡ ҡоро бит быйыл. Үлән дары кеүек яна ла китә. Урмандарҙа халык күп, ашай-эсә-тарта. Күп кәрәкмәй янғын сығарырға. Элек мал күп ине, ҡоро үлән ҡалмай, мал ашап бөтөрә ине. Хәҙер үлән ҡурай бейеклек. Шуға янғындар бик күп. Йылдан-йыл күберәк буласаҡ улар Рәсәйҙә..."

Бөрйәндә тыуып-үҫеп, яҙҙан көҙгә тиклем урман эштәрендә эшләп үҫкән быуын вәкиле булараҡ, тәүҙә был фекерҙе бик үк ҡабул итмәнем. Яҙ урманда утын әҙерләгәндә, йә булмаһа, колхоз малына меңәрләгән пар миндек бәйләгәндә, сыбыҡ-сабыҡ-сатыр яндыра инек тә! Беҙ үҫкәндә һәр ғаилә, хатта яңғыҙ әбей-һәбей ҙә, кәзә көтөп булһа ла малһыҙ торманы. Июлдең яртыһынан август аҙаҡтарына тиклем Бөрйән халҡы бесән әҙерләү менән мәшғүл ине. Ауыл урамдары тып-тын ҡалып, аты-техникаһы булған бар ғәм - ҡайһыһы ҡуна ятып, ҡайһыһы көнөнә йөрөп эшләп, урманда булыр ине. Баҙал буйҙарында, алыҫтағы Мәсем тауҙарында, төнгөләккә айыуҙан һаҡланып ҙур-ҙур усаҡтар яғып ятып йоҡлар инек ҡыуышта. Иртәнге һыуһынға бесән сабырға киткәндә лә ут яғып, төшкөләккә ит бешерергә ҡаҙан аҫып ҡуйып кителә ине... Нисек тә янғын сығарып йөрөмәнеләр ҙә баһа бесәнселәр! Һаҡланыу сараларын күргәнбеҙҙер, тәбиғәттә йәшәгәндә һәр нәмәлә сама белгәнбеҙҙер, күрәһең... Хеҙмәтсән халыҡтың мал-тыуар өсөн йәнен фиҙа ҡылып бесән әҙерләүенә күрә, Аллаһ Тәғәләнең Үҙенең ҡурсалауы шул булғандыр, бәлки? Хатта ныҡ ҡоро килгән 1975 йылда ла урмандарҙа янғын сығыу осрағын хәтерләмәйемсе. Тимәк, яланҡырҙарҙа мал көткәндә усаҡ яғып, урмандарҙы кипкән үлән, сатыр-соторҙан, кибеп ятҡан ағастарҙан таҙартып йәшәгәнбеҙ ҙә баһа быға тиклем!

Шулай ҙа үрҙәге фекерҙең төбөндә тағы бер кинәйә бар: ситтән килгән, урманды тик ял итеү урыны тип кенә ҡарап, ашап-эсеп-тартып йөрөгән кешеләр менән шул ерлектә йәшәгән, еренә һаҡсыл ҡараған кеше араһында айырма ҙур шул! "Ут төшкән ерендә яныр", ти. Бына шундай ҡулланыусы маҡсаты менән генә килгән-киткәндәрҙең артынан тоҡана инде ул янғын. Һуңғы ваҡытта махсус үрт һалыусылар тураһында имеш-мимештәр күбәйеүе лә һиҫкәндерә. "Яҡшы кеше йөрөгән ерен маҡтап йөрөр, яман кеше йөрөгән ерен үртәп йөрөр", "Бөтөшө яман ҡамышты һыу эсендә ут алыр, йөрөшө яман егетте ил эсендә яу алыр" тигән әйтемдәр ҙә ҡалдырған беҙҙең халыҡ... Был осраҡ та тигенгә түгел, тыуған еребеҙгә, тәбиғәтебеҙгә, булмышыбыҙға битарафлығыбыҙ, ғәмһеҙлегебеҙ өсөн язалыр бындай ҡазалар. Һуғыш осорҙарында ла бындай янғындар булмаған, әллә ысынлап та һуғышһыҙ яулайҙар түгелме беҙҙе, йәмәғәт, ир-улдарыбыҙ ҡырҙа, сит ерҙәрҙә вахтала саҡта?

Ысынлап та, Бөрйәнебеҙҙең һуңғы йылдарҙа үтә лә саманан ашып киткән туристар ағымына, уларҙың урманды, йылға буйҙарын тәләфләүенә ҡаршы торорлоҡ көсө лә, тәжрибәһе юҡ бит. Ошо хәлгә бәйле бер миҫал. 2007-2008 йылдарҙа Грецияла йәшәп, ошондай уҡ фажиғәгә тарыған ил тураһында яҙмалар алып барғайным. Йәй буйы ут эсендә йәшәгән был илгә ҡарата шундай йәлләү тойғоһо барлыҡҡа килгәйне үҙемдә - нисек инде, бөтөн яҡтан 9 диңгеҙ менән уратып алынған ил янғындарҙан бушамай? Яуап шул уҡ: туристарҙан бушамай был ил. Баяғы "ашап-эсеп-тартып" тигән әҙәмдәрҙән.

"Кем итәгенә ут төшһә, шуныҡы яна" тигәндәй, беҙгә лә шундай көн килде, ахры. Ял көндәре еттеме, машиналы халыҡ урманға ял итергә ашыға. Усағын һүндерһә лә, ҡый-шаҡырын - быяла-пластик-целлофан-консерваларын ҡалдырып китә, донъяны сүпкә батырыуҙа үҙенең өлөшөн индерә.

*Донъя ул бер баҡ икән,*
*Йән эйәһе шул баҡта*
*Донъя быуынын һанаған,*
*Ҡайһы быуын аҡлаған,*
*Ҡайһы уны таплаған...*

Урал батырҙың беҙгә төбәп ҡалдырған киҫәтеүен тотмай, байманлыҡта йәшәп, Ер-Әсәнең үҙенең дә тере һәм йәнле икәнен оноткан быуын беҙ инде ул! Ерҙе туйындырған һыу сығанаҡтарын бысратыу, ағастарын ҡырып, эсәр һыуыбыҙҙан яҙыу - үҙебеҙгә тәғәйен урын-еребеҙҙең ҡәҙерен, баһаһын онотторор ошо гонаһлы эштәр ҡылған өсөн бергәләп ғәҙел яза күрәбеҙ. Күҙ менән ҡаш араһында ҡупҡан ел-дауыл ғәрәсәтенә лә, янғындарға, ҡурҡыныс сир-зәхмәтенә лә, һыуһыҙлыҡ-ҡоролоҡ менән һынауҙарҙарына ла дусар булдыҡ. Ошо золомдар күреүҙә бер-берендә ғәйепләү, башҡанан сәбәп эҙләп, үҙ-ара битәрләшеү нисек баҫып алды интернет селтәрҙәрен! Был инде тағы ла олораҡ гонаһ, сөнки быныһы телүй кимәлендә донъяны бысратыу, энергетик хәлебеҙҙе, рухи халәтебеҙҙе ватыуемереү, кешелектең аңын юҡҡа сығарыуға өлгәшеү. "Ҡауҙан ут яныр, дауҙан йорт яныр", ти мәҡәл. Әммә бындай ваҡиғаларҙан һуң ҡырын эш ҡылыусыларға барыбер язаһы төшмәй ҡалмаҫ, "Ҡыйыҡ ағас та төҙ яна", ти тағы бер мәҡәл. Гонаһтар өсөн аласаҡ тамуҡ уты тураһында түгелме ни был иҫкәртеүҙең мәғәнәһе?

Ә әлегә был ҡазаларҙың эҙемтәһен ошо ерлектә ғүмер кисергән халыҡ тигеҙ күтәрә: янғанды ямап булмай. Янғынды сығарыуы анһат, һүндереүе ҡыйын. Күпме көс, ваҡыт сарыф ителә "яр аҫтынан сыҡҡан яу"ға ҡаршы! Иҫкә төшөрәйек: май айында уҡ ҡоролоҡҡа ҡаршы дин әһелдәре, ағинәйҙәр инициативаһы менән Аллаһ Тәғәләнең рәхмәтенә ирешеү ниәтенән ҡорбан салдырыуҙар, доға ҡылыу, теләк әйтеүҙәр башҡарылды. Шул сәбәпле шифалы ямғырҙары ваҡытында яуып, еләк-емеше лә унды, бал ҡорттары ла табышһыҙ ҡалманы. Ә халыҡ тәүбәһен тиҙ онотто. Ҡыйын саҡта Аллаһ Тәғәләне иҫкә төшөрәбеҙ ҙә ул, бәлә-ҡаза үтһә, тағы байманлыҡҡа сумып, иман төшөнсәләрен онотабыҙ. Кәйеф-сафа ҡороу үтә лә саманан ашып китә бит хәҙерге заманда. Ниндәй генә байрамдар юҡ, тик байрам итеү ҙә, ял итеү өсөн генә йәшәйбеҙ кеүек. Янғындар күпләп таралыу ошо сәбәпле иҫкәртеү, һынау ғына бит һуң!

"Яңғыҙ торонбаш ялынһаң да янмаҫ", "Бер ағас мейестә лә янмаҫ, ике ағас далала ла һүнмәҫ" тигән мәҡәлдәрҙең мәғәнәһенә төшөнәйек. Әлеге мәлдә ут - беҙгә дошман, уға көсәйергә, шашынырға сәбәп ҡылмайыҡ, яңғыҙ торонбаш хәленә ҡалдырайыҡ, үҙебеҙ ойошоп көсәйәйек. Күмәкләгән - яу ҡайтарған! Бергәләшеп был афәтте йырып сығыр өсөн, тупланайыҡ, ойошайыҡ, йәмәғәт! Әммә барыбыҙ өсөн дә кешелек йәмғиәтендә үҙебеҙҙе башҡалар менән яраштырыр һәм шул нигеҙҙә донъяны бер самала көйләп тотор төп шарт - тәүҙә **үҙеңдән башҡаға яҡшылыҡ ҡылыу.** Фәҡәт ошо идея менән генә тарҡаулыҡтан арынып берләшер бер милләт эсендәге вәкилдәр, ә унан һуң донъяуи халыҡтар. Шунан һуң ғына яуап көнөндә яҡты булыр йөҙөбөҙ. "Һәр кемдең тотҡан йүнәлеше бар. Изге эш менән бер-берегеҙҙе уҙырға тырышығыҙ. Ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа, Аллаһы һеҙҙең барығыҙҙы ла ҡаршыһына килтерер" (Әл-Бәҡара сүрәһе, 148-се аят).

Был ниәтте тормошҡа ашырыр юл бер генә. Шуны беҙгә васыят иткән Урал атабыҙ:

*Күккә лә осор - яҡшылыҡ,*
*Һыуға ла батмаҫ - яҡшылыҡ,*
*Утта ла янмаҫ - яҡшылыҡ,*
*Телдән дә төшмәҫ - яҡшылыҡ.*

Урал батырҙың ошо ерҙең ҡотон, бәрәкәтен һаҡлау тураһында һәр беребеҙгә төбәп ҡалдырған мөрәжәғәтен иҫебеҙҙән, аңыбыҙҙан юйырға хаҡыбыҙ юҡ икәнен төшөнәйек:

*Уландарым, һеҙгә әйтәм:*
*Мин әрсегән ерҙәрҙә*
*Кешегә байман табығыҙ;*
*Яуҙа булһа, баш булып,*
*Кешегә ил ҡорoғоҙ;*
*Данлы батыр булығыҙ!*

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓16 августа киске сәғәт 6 тирәһендә 1-се ҡала клиник дауаханаһы бала табыу бүлексәһенең дөйөм палатаһында ҡот осҡос хәл теркәлгән. 29 йәшлек ҡатын бала тапҡандан һуң палаталағы күршеһенең яңы тыуған сабыйын тәҙрәнән ырғытҡан. Бала вафат булған. Тәфтишселәр әлеге осраҡ буйынса енәйәт эше ҡуҙғатҡан. Прокуратура эш барышын һәм тикшереү һөҙөмтәләрен контролгә алған.

✓Башҡортостанда барған ауыл хужалығы иҫәбен алыу кампанияһы ваҡытында 800-ҙән ашыу ауыл хужалығы ойошмаларын, 4 мең крәҫтиән-фермер хужалығы һәм шәхси эшҡыуар, 2,4 мең баҡса ширҡәте һәм 677 мең шәхси хужалыҡтан һорау алынасаҡ. Бының һөҙөмтәһендә ауыл хужалығында эшләгән халыҡ иҫәбе, ер участкалары һәм уларҙы ҡулланыу, ауыл хужалығы культуралары һәм күп йыллыҡ үҫемлектәр сәселгән майҙандар тураһында мәғлүмәттәр тупланасаҡ. Шулай уҡ мал башы ла иҫәпкә алынасаҡ.

✓Быйыл марттан Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарары буйынса юридик һәм шәхси эшҡыуарҙарға аҡсалата ярҙам күрһәтелә. Ул эш хаҡы түләү, эш урынын булдырыу, хеҙмәткәрҙе әҙерләү өсөн сарыф ителгән сығымдарҙы ҡаплауҙы күҙ уңында тота. Программа буйынса бер эш урынын булдырыуға дәүләт 57 мең 460 һум күләмендә компенсация түләй. Түләүҙәр өс этапта бара. Беренсеһен эш биреүсе тәүге айҙа алһа, икенсеһен - өс ай үткәс, өсөнсөһөн ярты йылдан һуң. Һәр түләүҙең күләме - 19 мең һумдан ашыу.

✓Республиканың алыҫ райондарында йәшәгән 54 мең халыҡ "тәгәрмәстәрҙәге поликлиникаларҙа" тикшереү үтте. "Сәләмәтлек поездары" быйыл республиканың 166 торағында булып, 32 меңдән ашыу тикшереү үткәрҙе. Эш һөҙөмтәһе буйынса 2 509 пациент яңынан тикшереүгә ебәрелгән. "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектына ярашлы "Сәләмәтлек поездары"н ойоштороу һәр яҡтан да файҙалы булды. Республика йөрәк-ҡан тамырҙары, онкология, диабет һәм башҡа сирҙәрҙе диагностикалау өсөн яңы күсмә модулдәр алды.

✓Стопкорнавирус.рф рәсми порталында махсус интерактив карта ярҙамында сирлеләр, һауыҡҡандар һәм вафат булғандар һаны, шулай уҡ ваҡытлыса сикләүҙәр тураһында мөһим мәғлүмәт алырға мөмкин. Сервис "Милли өҫтөнлөктәр" ойошмаһы менән берлектә "Диалог" автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошма тарафынан әҙерләнде. Карта өсөн мәғлүмәтте Республикаға идара итеү үҙәге бирә, мәғлүмәттәр көн һайын яңыртыла.

✓ *"Башҡорт балы - бик яҡшы ризыҡ, - тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин. - Башҡорт балы хаҡында ишетеп кенә белмәйем, уны тәмләп тә ҡарағаным бар. Бик тәмле! Мин уны бөтәһенә лә кәңәш итәм".*



ҠЫҪҠАСА

# АУЫЛДЫ ХӘСТӘРЛӘП...

✓ **Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы "Агростартап" программаһы буйынса яңы эш башлаған фермерҙарға грант тапшырыу өсөн 200 гаризанан 50 иң яҡшы бизнес-планды һайлап алды.** Быйыл проектҡа 154 миллион һум йүнәлтелде. "Агростартап" гранты аҡсаһы "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары акселерацияһы" төбәк проекты буйынса бүленә. Уны яңы эш башлаған һәр ауыл эшҡыуары оторға мөмкин, бының өсөн грамоталы фермер хужалығы проектын күрһәтергә кәрәк. Һайлап алыу процесы асыҡ - комиссияның һәр ултырышы онлайн-режимда трансляциялана", - тип иҫкә төшөрҙөләр ведомствола. Былтыр 68 ауыл эшҡыуары 211,5 миллион һумға "Агростартап" гранттарын алды.

✓ **Проект операторы мәғлүмәттәренә ярашлы, "Янғантау" геопаркында быйыл туристар ағымы 2020 йыл менән сағыштырғанда ике тапҡырға арткан, ял көндәрендә бында биш меңгә яҡын кеше килә.** Республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры - иҡтисади үҫеш министры Рөстәм Моратов 2022 йылда "Янғантау" геопаркында өс капиталь объекттың файҙаланыуға тапшырылырға тейешлеген әйтте. Улар - "Мәсетле" геология музей комплексы, "Каруанһарай" этнография комплексы, "Салауат ере" тарихи-мәҙәни комплексы. 2021-2025 йылдарҙа "Янғантау" геопаркында шәхси инвестиция проекттары сиктәрендә 18 объект төҙөү планлаштырыла. Урынлашыу урындары, юл буйы сервисы һәм дөйөм туҡланыуҙан тыш, һунарсылыҡ һәм бағыр хужалыҡтары, транспорт прокаты, шул иҫәптән ат экипаждары һәм велодилижанстар пункты, күнел асыу паркы, аквапарк, экстремаль туризм үҙәге буласаҡ. "Янғантау" - Башҡортостанда беренсе, Рәсәйҙә ЮНЕСКО селтәренә ингән беренсе геопарк, 2017 йылда ойошторолған.

✓ **Башҡортостандың Тәбиғәт парктары дирекцияһы етәкселеге көндәрҙең аномаль эҫе тороуына һәм янғын хәүефенә бәйле "Ирәмәл", "Еҙем" тәбиғәт парктарына инеүҙе ваҡытлыса тыйыу тураһында ҡарар ҡабул итте.** 18 августа көсөнә ингән бойороҡ 5 сентябргә тиклем ғәмәлдә була. Тейешле документ 17 августа Башҡортостан Республикаһының Махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре дирекцияһы сайтында баҫылды. "Паркка килеүселәр алдан алған билеттары менән файҙаланырға йәки тотонған аҡсаһын тулы күләмдә ҡайтарырға мөмкин, - тип билдәләнеләр дирекцияла. - Был тыйыу парктар биләмәһендә йәшәгән кешеләргә ҡағылмай. Урындағы халыҡ ҡышҡылыҡҡа малдарына бесән әҙерләү менән шөғөлләнә ала". Һауа шарттары яҡшырһа һәм янғын хәүефенә бәйле хәл тотороҡланһа, тәбиғәт парктары етәкселеге тыйыуҙы ваҡытынан алда ғәмәлдән сығарыуы ихтимал.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТАҒЫ БЕР САҒЫУ ВАҠИҒА



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Берләшкән көрәш донъяһы президенты Ненад Лалович һәм йәштәр араһында спорт көрәше буйынса Донъя беренселегенең абруйлы ҡунаҡтары менән осрашты.**

"Ниһайәт, илебеҙҙә ошо сағыу спорт ваҡиғаһын уҙғарыуҙы көтөп алдыҡ, - тине Радий Хәбиров. - Ике йыл көрәш буйынса донъя чемпионаты үткәрелмәне. Юниорҙар араһында Беренселек иһә Рәсәйҙә тәүгә ойоштоpола. Уны үткәреү урыны итеп Башҡортостандың һайланыуы - беҙҙең өсөн оло хөрмәт һәм ҙур яуаплылыҡ. Донъяның 55 иленән 1 мең атлетты ҡаршы алырға оҙаҡ һәм ныҡлы әҙерләндек". Башҡортостан Башлығы республикала спорт көрәшенә ҙур иғтибар бирелеүен хәбәр итте - 62 мәктәптә 3,5 меңдән ашыу бала ошо спорт төрө менән шөғөлләнә. 2024 йылда 200 мәктәптә көрәш секцияларын асыу ниәте бар. "Беҙ күп төҙөйбеҙ: Өфөлә Гимнастика үҙәге, футбол майҙаны төҙөлөшөн тамамлап киләбеҙ, Спорт көрәше үҙәген төҙөү эшенә тотонабыҙ, Волейбол үҙәге проектын әҙерләнек, Фехтование һарайын планлаштырабыҙ. Ошондай спорт объекттары - атлеттарыбыҙҙың еңеүенә хөрмәт билдәһе, - тине Радий Хәбиров. - Быйыл ике боҙ стадионы төҙөйбеҙ, ә 2024 йылға 16 район үҙәгендә бассейндар асабыҙ. Был ҡоролмалар бик мөһим, сөнки Башҡортостан халҡында сәләмәт йәшәү рәүешенә, физкультура һәм спорт менән шөғөлләнеүгә ихтыяж ҙур".

Берләшкән көрәш донъяһы президенты, Халыҡ-ара олимпия комитетының допинг буйынса комитеты етәксеһе Ненад Лалович Өфөлә Донъя беренселеген ойоштороуға юғары баһа бирҙе. Шулай уҡ Берләшкән көрәш донъяһы вице-президенты, Рәсәйҙең Спорт көрәше федерацияһы президенты Михаил Мамиашвили ҙа Өфөлә юниорҙар араһында Донъя беренселегенең үҙенсәлекле булыуына иғтибар итте. " Башҡортостанда совет заманынан уҡ ҡеүәтле көрәш мәктәбе йәшәп килә. Билдәле тренер Владимир Борман байтаҡ чемпиондар һәм призёрҙар тәрбиәләне. Хәҙер республика етәксеһе Радий Хәбировтың мәктәптәрҙә спорт көрәшен индереү менән шөғөлләнеүе оло әһәмиәткә эйә", - тине Михаил Мамиашвили.

# СТУДЕНТТАР ӨСӨН ҠАЛАСЫҠ



**Башҡортостанда донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең студенттар кампусын төҙөү тураһында ҡәтғи ҡарар ҡабул ителде. Был турала РФ Премьер-министры Михаил Мишустин етәкселегендәге Рәсәй Хөкүмәте ултырышында билдәле булды, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров.**

"Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең әлеге ҡарары һуңғы ун йыллыҡта Башҡортостан Республикаһы юғары мәктәбенең һәм фәненең мөһим ҡаҙаныштарының береһе булып тора. Башҡортостандың донъя кимәлендәге студенттар кампусы була. Ошо тиҫтә миллиард һум аҡса студент ятаҡтарына ғына йүнәлтелмәй. Улар - студенттар һәм уҡытыусылар өсөн фәнни лабораториялар, шулай уҡ спорт, мәҙәниәт учреждениелары ла. Быларҙың барыһы ла ҡала үҙәгендә тип әйтерлек. Илебеҙ Президентына ярҙам күрһәткәне өсөн айырыуса ҙур рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

Михаил Мишустин тотош илдә университет кампустары селтәрен булдырыу хаҡында һөйләне. Президент ҡушыуы буйынса программаны тормошҡа ашырыу Фән һәм технологиялар йылында башлана. Төбәктәрҙән килгән 30 ғаризанан бөгөнгә иң яҡшы һигеҙе һайлап алынған, улар иҫәбендә Башҡортостан да бар. Улар быйыл уҡ бойомға ашыра башларға әҙер. "Былар - милли күләмдәге һәм ысын мәғәнәһендә донъя кимәлендәге кампус проекттары. Улар Рәсәй Федерацияһы биләмәләрен үҫтереүгә өҫтәмә стимул бирергә тейеш. Бизнес вәкилдәре менән берлектә яңы инфраструктура ғына төҙөп ҡалмайбыҙ. Кампустар бөтә Рәсәйҙән һәм сит илдәрҙән һәләтле йәштәрҙе йәлеп итеү нөктәләре булыр", - тине Михаил Мишустин.

"Башинформ" хәбәр иткәнсә, Рәсәй президенты Владимир Путин республика етәксеһе менән осрашыуҙа студенттар кампусын төҙөүгә федераль финанслау мәсьәләһендә республикаға ярҙам буласағын әйткәйне."Студенттар кампусы өсөн урынды оҙаҡ һайланыҡ. Өфө уртаһында, яҡында ғына тиерлек, өс юғары уҡыу йорто урынлашҡан ерҙә 17 гектар ер таптыҡ, ошо кампусты проектлауға 275 миллион һум аҡса бүлергә хәл иттек. Йәғни беҙ кампусты проектлай башланыҡ", - тине осрашыуҙа Радий Хәбиров.

# УМАРТАСЫЛАРҒА ЯРҘАМ



**Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы урмандарҙы пестицидтар менән эшкәртеү арҡаһында бал ҡорттарының күпләп һәләк булыуы сәбәпле умартасыларға килтерелгән зыянды йыл аҙағына тиклем ҡапларға ниәтләй.**

Аграр ведомствоның матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ҡортсолар, күрелгән зыян күләмен атарға иртәрәк булһа ла, компенсацияға дәғүә итә ала. Әле иҫәпләү эштәре бара. Шулай ҙа сумма ярайһы арыу булмаҫы. Әлбиттә, ул зыянды тулыһынса ҡаплай алмаһа ла умартасыларға юғалтылғанды ҡайтанан тергеҙеү мөмкинлеге бирәсәк. Шул уҡ ваҡытта умартасы тейешле документтар әҙерләп тә субсидия алырға мөмкин. Ҡорттарҙың ҡырылыу факты буйынса умарталыҡта комиссия тикшереүе акты, ҡорттарҙың пестицидтар менән ағыуланыуы хаҡында лаборатор тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре кәрәк.

Компенсация алыуҙың башҡа төрлө шарттары ла бар. Мәҫәлән, компенсация алғас, умартасы биш йыл буйына ҡортсолоҡ менән шөғөлләнергә тейеш. "Беҙ зыянды документтар нигеҙендә баһалау тураһында республика хөкүмәте ҡарарының проектын эшкә ҡуштыҡ һәм зыянды ҡаплау юлдарын әҙерләйбеҙ. Министрлыҡ ауыл хужалығы етештереүселәре күргән зыянды ғына ҡаплай ала, ә беҙҙә умартасыларҙың күпселеге - шәхси ярҙамсы хужалыҡтар һәм физик шәхестәр. Былтырғыға ҡарағанда быйыл бал күберәк тә әле, шуға ла уларға хаҡтарҙы төшөрмәйенсә, үҙ продукцияларын һатырға ярҙам итеү. Өҫтәүенә, уларҙың былтырғы бал запасы ла һаҡланған. Был компенсация түләүгә ҡарағанда ла мөһимерәк бурыс. Ил Президенты Владимир Владимирович Путинға беҙҙең башҡорт балына биргән һәйбәт баһаһы өсөн бик ҙур рәхмәт әйткем килә. Беҙҙең бал тәбиғи, уға бер ниндәй ҙә өҫтәмәләр ҡушылмаған" ,- тине "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына биргән интервьюһында хөкүмәт премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.

"Башҡорт балы - бик яҡшы ризыҡ, - тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин 6 августа республиканың Әбйәлил районына эш сәфәре барышында "Цемикс" заводы эшселәре һәм Башҡортостандың төҙөлөш тармағы вәкилдәре менән осрашыуында. - Башҡорт балы хаҡында ишетеп кенә белмәйем, уны тәмләп тә ҡарағаным бар. Бик тәмле! Мин уны бөтәһенә лә кәңәш итәм. Башҡортостан илдә бал етештереү күләме буйынса икенсе урында, ләкин беренсе урында барған Приморье крайынан бер ҙә ҡалышмай. Былтыр йыл аҙағында Рәсәй умартасыларына ярҙам күрһәтеү тураһында закон ҡабул ителде".

Шуны ла иҫкә төшөрөп үтәйек: май аҙағында алты муниципаль район - Ейәнсура, Йылайыр, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Мәләүез һәм Хәйбулла райондарында урмандарҙы ебәк күбәләгенә ҡаршы эшкәрткәндән һуң төрлө иҫәпләүҙәр буйынса 3 меңдән 8 меңгә тиклем ҡорт күсе һәләк булған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында 18 августан "Мотоцикл" операцияһының башланыуы тураһында иғлан ителде. "Быйыл ете айҙа мототранспорт водителдәре ҡатнашлығында 41 юл фажиғәһе теркәлгән, ике кешенең ғүмере өҙөлгән, 48-е төрлө йәрәхәттәр алған. Мотоцикл водителдәре ғәйебе менән 15 авария булған", - тип хәбәр иттеләр Өфө Дәүләт автоинспекцияһынан.

✓Өфө блогеры, Омскиҙа казарма емерелгәндә ике аяҡһыҙ ҡалған Рөстәм Нәбиев икенсе тапҡыр Эльбрус тауына күтәрелде. Был юлы ул 5 621 метр бейеклектә яуланы. "Кулдарымда 11 сәғәт буйы тиерлек күтәрелдем, ете көн йыуынманым. Хәҙер мин - ҡулдарында Эльбрустың ике түбәһенә лә менеп еткән донъяла берҙән-бер кеше!" - тине Нәбиев.

✓Затондағы Азатлыҡ урамының бер өлөшөндә хәрәкәт ябылды. Был сикләү ике айға яҡын - 4 октябргә тиклем дауам итәсәк. Ремонт эштәре Искужин урамынан алып Талькова урамының 40-сы торлаҡ йортона боролошҡа тиклем алып барыласаҡ. "Әҙерлек эштәре алып барылғанда, юлдың иҫке ҡатламын алып тигеҙләү, шулай уҡ аҫҡы һәм өҫкө ҡаттарға асфальт түшәү барышында төп юлдың яртыһы ябыласаҡ",- тиҙәр мэрияла.

✓Өфө-Дим юлындағы капиталь ремонтҡа бәйле, 17, 20, 24, 31 августа, 1 һәм 3 сентябрҙә ҡала яны поездары графигына үҙгәреш индерелә. Өфөгә тиклемгә ҡайһы бер ҡала яны поездары Дим станцияһына тиклем ҡыҫҡартылған маршрутта үтә, ә кире йүнәлештә поезд шулай уҡ Дим станцияһынан китәсәк, ә ҡайһы бер поездарҙың йүнәлеше бөтөнләй туктатыласаҡ йә йөрөү ваҡыты үҙгәртеләсәк.

✓Башгидрометүҙәк республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы менән берлектә Башҡортостанда йәшәүселәрҙе аномаль эҫелек тураһында иҫкәртте. Синоптиктар фаразынса, 19-22 августа республикала һауа температураһының +39 градусҡа етеүе көтөлә. "Эҫе һауа торошо кеше өсөн бик хәүефле. Эҫе ҡабыу, организмдың һыуһыҙланыуы, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренең ҡиҫкенләшеүе ихтимал", - тип иҫкә төшөрҙә ҡотҡарыусылар.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# БЕЛЕМ КӨНӨ ЕТӘ

**Беренсе сентябрь - Белем көнө, балаларҙың йәйге каникулдарҙан һуң һағынышып тыуған мәктәптәренә ашҡынып килеүе генә түгел, ул - ололарҙың уҡыусыларҙы белем тауын үрләргә ашыҡҡанда хәүеф-хәтәрҙән ҡурсалау тураһындағы хәстәрлеге лә. Ауыл ерҙәрендә был бик һиҙелмәһә лә, транспорт хәрәкәте мыжғып торған ҡала өсөн белем биреү учреждениелары эргәһендә юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү зарурлығы бик мөһим. Йыл һайын ошо ваҡытта коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре белем усаҡтары эргәһендәге юлдарҙағы билдәләрҙе яңырта.**

Был аҙнала ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә ошо мәсьәләнең көн ҡаҙағына сығарылыуы ла бер нигеҙһеҙ түгел, сөнки йылдың 7 айында баш ҡалала балалар ҡатнашлығында 119 юл-транспорт ваҡиғаһы булған һәм унда 126 бала зыян күргән. Бөгөн баш ҡалала 128 мәктәп бар, уларҙың 85-е юлға сыға йәки юл сатына яҡын урынлашҡан, шуға күрә юлдарға билдәләр һалыу, юл билдәләрен, светофорҙар ҡуйыу, юл ситтәрен кәртәләү мөһим. Өфө ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, әлеге ваҡытта 114 юл билдәһе алмаштырылған йәки тейешле тәртипкә килтерелгән, шулай уҡ 34 дубль-билдә ҡуйылған. 27 августа тиклем өс балалар баҡсаһы һәм бер дөйөм белем биреү учреждениеһы эргәһендәге юл ситенә 600 метр ҡойма ҡуйыу тамамланасаҡ. Юл эргәһендә булған 84 мәктәп тә йәйәүлеләр өсөн ҡуйылған ҡоймалар менән ҡулланасаҡ. 327 йәйәүлеләр үткәүелендә юл билдәләре һалынған йәки яңыртылған, ремонт эштәре башҡарылған, ике мәктәп эргәһендә, әлегә юлдарҙа ремонт эштәре барыу һөҙөмтәһендә, был эш аткарылмаған. Рөстәм Хәмитов билдәләүенсә, йәйәүлеләр үткәүелдәренең насар яҡтыртылыуы юл-транспорт ваҡиғаларының төп сәбәбе булып тора.

Оператив кәңәшмәлә баш ҡала райондары башлыҡтарының үҙҙәре яуаплы булған территорияның социаль-иҡтисади үҫеше тураһындағы сығышы инде ғәҙәткә әйләнде. Был юлы Орджоникидзе районы хакимиәте башлығы Марат Ғәлиуллин телмәр тотто. Райондың үҙенсәлеге шунда - бында 200-ҙән ашыу предприятие урынлашҡан, шуларҙың 24-е - эре сәнәғәт, нигеҙҙә, нефть химияһы комплексы предприятиелары. Район ҡала бюджетына һалымдарҙың 47,2 процентын индерә. Территорияла төҙөлөш һәм төҙөкләндереү эштәре лә йылдам бара. Дүрт йыл "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" федераль программаһын тормошҡа ашырыу барышында бында дөйөм оҙонлоғо 73 километр булған 42 урам ремонтланған, быйыл Юбилей һәм Кислородлы урамдары ремонтлана. Төрлө төҙөкләндереү программалары буйынса 97 ихата төҙөкләндерелгән һ.б. Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығы алдынан да бик күп төҙөлөш эштәре планлаштырылған һәм алып барыла. Торлаҡ һәм социаль биналар ҡалҡып сыға. Мәғарифҡа, мәҙәниәткә, спортҡа етди иғтибар бирелә. Баш ҡаланың һаулыҡ һаҡлау дәүләт учреждениеларының 10-һы Орджоникидзе районында урынлашҡан, әлеге ваҡытта тажзәхмәт менән сирләүселәр өсөн 470 койка-урын булдырылған, 10-сы Ҡала клиник дауаханаһы базаһында ковид-госпиталь эшләй.

Тәләйбеҙме-юҡмы, әммә районҙарҙың үҫеше тураһында һөйләгәндә лә тажзәхмәт темаһын урап үтеп булмай, сөнки халыҡ сәләмәт булғанда һәм уға ваҡытында тейешле ярҙам күрһәтелгәндә генә эш тә, уның һөҙөмтәләре лә була. Ҡала хакимиәтенең Халыҡ сәләмәтлеген һаҡлау бүлеге начальнигы Рәдиф Сабиров билдәләүенсә, мэрия хеҙмәткәрҙәренең 86 проценты вакцинацияланған, муниципаль һәм унитар, бюджет һәм ҡаҙна предприятиеларында был күрһәткес 80 проценттан күберәк. Эре предприятиеларҙың 61,8 процент хеҙмәткәре прививка эшләткән. Өфөлә предприятиелар коронавирус инфекцияһынан вакцинация тураһында белешмәһеҙ эшкә алмайҙар, тип тә хәбәр итте Рәдиф Сабиров. Уның һүҙҙәренсә, был сара хеҙмәт коллективтары сир йоҡтороуҙан һаҡлауға йүнәлтелгән.

Әйткәндәй, баш ҡалала "Сәләмәт Өфө" акцияһы дауам итә. Уның барышында "Торатау" конгресс-холында вакцинация эшләткәндәр араһында Башҡортостан шифаханаларына путевкалар уйнатыла. Уның икенсе этабы үткән аҙнала "Вся Уфа" телеканалы эфирында үтһә, өсөнсөһө 28 августа буласаҡ.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БУШЛАЙ ДАРЫУ КЕМГӘ?



**Башҡортостанға Федераль ҡаҙнанан льготаға эйә булғандар өсөн бушлай дарыуҙарға, медицина изделиеларына һәм дөрөҫ туҡланыу өсөн аҡса йүнәлтелә.**

Төбәктәргә ошо маҡсатҡа бөтәһе 1,6 миллиард һум бүленгән. Башҡортостанға иһә 34,1 миллион һум бирелә. Аҡса льготаға эйә булғандарҙы бушлай дарыуҙар менән тәьмин итеүгә йүнәлтелә. Бындай социаль хеҙмәт инвалидтарға, шул иҫәптән Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға, инвалид балаларға, чернобылселәргә күрһәтелә. Һәр кем өсөн дарыуҙар һәм медицина изделиелары шәхсән билдәләнә. Бынан алда Хөкүмәт льготаһы булғандарға дарыуҙар һәм медицина изделиелары һатып алыу өсөн сумманы индексацияланы. Хәҙер сумма айына бер кешегә - 929,8 һум. Ҡарар өҫтәмә финанслау талап итте. 2021 йылда федераль бюджетта льготаға эйә булғандар өсөн бушлай дарыуҙарға 38,7 миллиард һум ҡаралған.

ҠЫҪҠАСА

# ҺӘЛӘТЛЕ БАЛАЛАР ЛИЦЕЙЫ

✓ **Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса Өфө ҡала хакимиәте һәләтле балалар өсөн математика лицейын урынлаштырыу буйынса бер нисә вариантты ҡараны.** Был уҡыу йортона талаптар юғары - уның эргәһендә парк зонаһы булырға, ә тирә-яғында үҫешкән инфраструктура, мәҫәлән, спорт ҡоролмалары, уҡыусылар һәм уҡытыусылар йәшәгән биналар һ.б. булырға тейеш. Өфөгә математика лицейы бик кәрәк, сөнки баш ҡалала яҡшы педагогик кадрҙар бар һәм улар йыл һайын төрлө кимәлдәге олимпиадалар еңеүселәрен әҙерләй. Республика Башлығының идеяһы тормошҡа ашһа, балаларының киләсәген бөгөндән уйлаған ата-әсәләргә ҙур ҡыуаныс буласаҡ. Муниципалитет бөгөнгә төҙөлөш өсөн өс майҙансыҡ тапҡан, ғәмәлдәге документацияға бер аҙ үҙгәрештәр индерелгәс, варианттар халыҡҡа фекер алышыуға сығарыласаҡ.

✓ **Өфө ҡала хакимиәтендә хакимиәт башлығы урынбаҫары Г. Ялсыҡаева етәкселегендә "Йәш һөнәрмәндәр (WorldSkills Russia)" IX Милли чемпионатына әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса ойошторолған кәңәшмәлә сараны үткәреү урыны тип Рубежная урамындағы Йәш һөнәрмәндәр паркы билдәләнде.** WorldSkills Russia финалы - һөнәри белем биреү учреждениеларының 16 йәштән 25 йәшкә тиклемге студенттары һәм 16 йәшкә тиклем WorldSkills Russia Juniors йүнәлеше вәкилдәре араһында WorldSkills стандарттарына ярашлы үткәрелгән иң ҙур ярыш. Чемпионаттар йыл һайын уҙғарыла. Быйыл ул 25-29 августа Өфөлә үтә. Ярыштар 7 блокка (төҙөлөш һәм төҙөлөш технологиялары, мәғлүмәт һәм коммуникация технологиялары, ижад һәм дизайн, производство һәм инженер технологиялары, хеҙмәтләндереү өлкәһе, транспорт һәм логистика, мәғариф) ингән 105 компетенция буйынса ойошторола. Йәш һөнәрмәндәр паркынан тыш бәйге баш ҡаланың төрлө өлөшөндә урынлашҡан тағы алты өҫтәмә урында үтәсәк. Барлығы 3200 кеше - илдең төрлө төбәгенән киләсәк уҡыусылар, студенттар һәм уларҙы оҙатып йөрөүсе эксперттарҙың килеүе көтөлә. Сараны асыу һәм ябыу тантанаһы "Торатау" конгресс-холының амфитеатрында уҙасаҡ.

✓ **Был ваҡиғаны Зинино, Нуғай һәм Иглин районының ҡайһы бер ауылдары халҡы күптән көтә ине.** Биләмәгә инеү өсөн берҙән-бер юл булып көйләнгән тимер юл үткәүеле булған Нуғай шоссеһы тора һәм унда автотранспорт хәрәкәте лә йылдан-йыл ҡатмарлаша бара. Белгестәр билдәләүенсә, унан тәүлегенә 25 меңдән ашыу автомобиль үтә. Иртәнге һәм киске "пик" сәғәттәрендә тимер юлын аша сығыу өсөн бер сәғәткә тиклем көтөргә кәрәк. Түҙемһеҙҙәрҙең тыйыуҙарға төкөрөп биреп алға елдереүе һөҙөмтәһендә был участкала үлемесле юл-транспорт ваҡиғалары ла йыш күҙәтелә. Ниһайәт, быйыл йәй башланыу менән "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проектына ярашлы, Нуғай шоссеһында юл сиселеше төҙөлөшө башланды. Уны "Уралмостострой" акционерҙар йәмғиәте аткарасаҡ. Яңы юл әлеге тимер юл аша сығыу урынынан 200 метр ситтәрәк һәм дүрт һыҙатлы буласаҡ (һәр йүнәлештә икешәр һыҙат). Дөйөм оҙонлоғо - 106 метрҙан ашыуыраҡ. Әле төҙөүселәр терәүҙәр өсөн нигеҙ эшләй башлаған. Барлығы 56 терәү кәрәк булһа, әле уларҙың 16-һы ҡуйылған. Төҙөлөштөң 2023 йылдың өсөнсө кварталында тамамланыуы күҙаллана.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ревматизм

❖ Һыҙланыуҙарҙы ылыҫлы ванналар баҫа. Уны әҙерләү өсөн 3 ус тулы ылыҫҡа 2 литр һыу ҡойорға, 15 минут ҡайнатырға һәм йылы ваннаға ҡойорға. Был ваннаның эҫәлеген яйлап ҡына 45 градусҡа тиклем күтәрә барып, 20 минут ятырға. Һыҙланыуҙар бөткәнсе ошо рәүешле дауаланырға кәрәк, төнгә ҡарай эшләп, йоҡларға ятһаң бигерәк яҡшы.

### Гайморит

❖ Был ауырыуҙы үгәй инә үләне япрағынан әҙерләнгән төнәтмә менән дауаларға була. 1 ҡалаҡ ваҡланған япраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне йылы көйөнсә танау эсенә һурырға. Ә үгәй инә үләне япрағының һутын танауға тамыҙырға. Шулай уҡ сөскөрөү өсөн үҫемлектең тамырының онтағын еҫкәргә була.

### Подагра

❖ Был ауырыуҙы дауалау өсөн халыҡ имселәре цикорийҙы ҡулланған. Цикорий үләненән төнәтмә яһағандар. Бының өсөн 1 балғалаҡ ваҡланған цикорий үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр берәр сирек стакан эсергә. Әйтергә кәрәк, был дауа подагранан ғына түгел, йөрәк эшмәкәрлеген дә яҡшыртыуы менән файҙалы.

### Цистит

❖ Был сирҙе миләш ҡайыры бешкән һыу яҡшы дауалай. Уны әҙерләү өсөн 100 грамм ваҡланған миләш ҡайырына 1 литр һыу ҡойорға һәм утҡа ҡуйып 10 минут ҡайнатырға, шунан һыуынғансы төнәтеп һөҙөргә. Килеп сыҡҡан дауаны көн дауамында сәй урынына эсергә. Был рәүешле дауаланыуҙың икенсе көнөнә үк хәл яҡшыра барыуын тойорһоғоҙ.

### Сөйәл

❖ Календуланың яңы өҙөлгән сәскәһен ҡулда бер аҙ иҙеп, сөйәлгә ҡапларға һәм лейкопластырь менән йәбештереп ҡуйырға. Быны төнгә ҡарай эшләргә һәм иртәнсәк кенә алырға.

❖ Өс ҡалаҡ киптерелгән әремгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас ябырға һәм 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Әрем төнәтмәһе менән сөйәлде көн һайын бер нисә тапҡыр сылатырға.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.

✓ *Халыҡ араһында ҡыҙыҡһыныу бар, улар һөйләшебеҙҙең башҡорт теленең бер диалекты икәнлеген асыҡ аңлай. Күренекле ғалимдарҙың да аңлатыу эштәре алып барыуы, шәжәрәләребеҙҙе төҙөргә ярҙам итеүе - ыңғай күренеш.*



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Ваҡ әйберҙәрҙең йөҙөн тигеҙләү, семәрле тотҡалар һәм башҡа деталдәр эшләү, орнамент (ҡуҙыр, семәй) һалыу өсөн бысаҡ һәм бәләкәй ҡасауҙар ҡулайлы булған. Төҙ һәм йоҡа бысаҡтарҙан тыш ярым түңәрәк йөҙлө, йәки һабына ҡыйшайтыбыраҡ беркетелгән бысаҡтар ҙа ҡулланғандар. Шулай уҡ ағас һапҡа беркетелгән салғы һынығын да инструмент булараҡ ҡуллана алғандар. Һәр оҫта үҙенә уңайлы өңгөстө үҙе уйлап табып эшләп алған төҫлө.



*Өңгөстәр. РЭМ фондынан. XX быуат башы.*

Ағас әйберҙе семәрләү өсөн тотонолған башҡа төр инструменттар араһында тимерсыбыҡ сикләгесле ағас циркуль (ҡаҙаҡ ҡуйып та эшләгәндәр), бырау, сүкеш ярҙамында биҙәк һуғыу өсөн мөһөрҙәрҙе әйтеп китергә була. Әйберҙә тамға йәки башҡа билдәне көйҙөрөп төшөрөү өсөн махсус ҡорал - өткөс ҡулланылған.

Ағас әйберҙәр ассортименты уғата төрлө булған. Ағас эшкәртеү торошона ҡағылмаған бер генә хужалыҡ йәки көнкүреш өлкәһе лә булмаған. Был китапта һүҙ йорт көнкүрешенә бәйле әйберҙәр тураһында барасаҡ. Шуны ла әйтергә кәрәк, бөтә нәмәгә лә орнамент төшөрөп тә эшләнмәгән. Әммә улар үҙҙәренән үҙҙәре традицион сәнғәт мәҙәниәтенең үҙенсәлеген сағылдыра.

Традицион хужалыҡ тармаҡтары араһында баштан уҡ урман зонаһына бәйле булғаны бар. Был умартасылыҡ. Ағас эшкәртеү һәм умартасылыҡ тығыҙ бәйләнештә үҫешкән. Солоҡсо бағау һәм ҡасау менән ҡоралланған. Кәрәкле яҫылыҡтағы ағас олононан ул солоҡ эшләгән. Ағасҡа менеү өсөн махсус ҡорал - табалдырыҡ ҡулланғандар. Бал махсус тар ғына һауытҡа - батманға йыйылған. Солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән кеше йыш осраҡта һауыттарҙы соҡоп яһау оҫтаһы ла булған.

Батмандар тураһында "Ағас һауыт-һаба" бүлегендә тулыраҡ мәғлүмәт биреләсәк. Батман - боронғо һауыт, ауырлыҡ үлсәме. Балды батмандар менән һанау ғәҙәте яһаҡ тәғәйенләгәндә һәм йыйғанда уҡ ҡулланылған. Батша йортона ла балды батмандарҙа алып барғандар. Оҫталарҙың батмандарҙы семәрләп биҙәргә ынтылышы ла осраҡлы түгел.

Умартасылыҡта ҡулланылған боронғо әйберҙәр араһында күс айырған саҡта инә ҡортто урынлаштырған ҡап - ситлек тураһында айырым телгә алып үтеү кәрәк. Бәлки, был ҡулайлама умарталы ҡортсолоҡ барлыҡҡа килгәс уйлап табылғандыр. Ни булһа ла, был ситлектәр бик үҙенсәлекле булған. Уларҙың ҡайһы берҙәре шылдырып япмалы ауыҙлы, ботаҡты өңөп эшләгәндән һуң ҡайһыларына тотҡа ялғағандар. Цилиндр һымаҡ, эсе ҡыуыш, диаметры буйынса бер төрлө (3-4 см) һырлы тотҡалы ситлектәр бигерәк ҡыҙыҡлы.



*Инә ҡорт өсөн ситлектәр. Археология һәм этнография музейы (Өфө). Т.К. Сурина фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

МӘҒАРИФ

# ТУҒАН ТЕЛЕНДЕ ӨЙРӘН!



**Өфөлә республика педагогтарының мәғариф буйынса август кәңәшмәһе булып үтте, тип хәбәр иткәйнек инде. Быйылғы сара "Мәғлүмәти дәүерҙә балаларҙы һәм йәштәрҙе тәрбиәләү һәм социаллəштереү" темаһы аҫтында үтте.**

Башҡа проблемалар менән бер рәттән, бөгөнгө мәғариф киңлегендә ата-әсәләр һәм уҡыусылар өсөн туған телде өйрәнеү йәһәтенән дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү мәсьәләһе лә көнүҙәк булып ҡала. Һис шикһеҙ, туған телде өйрәнеүҙе һайлау фәҡәт ирекле нигеҙҙә башҡарыла. Бында күп нәмә ата-әсәләр менән дөрөҫ эшләй белеүҙән, кешеләрҙең мәғлүмәтлелегенән тора. Нисек кенә булмаһын, һәр туған телде өйрәнеүҙең төп маҡсаты - ошо бөйөк мираҫты ғаиләлә һаҡлап ҡалыу, йәш быуынға тапшырыу, ҡәҙимге һөйләште онотмау.

Әйткәндәй, күптән түгел Өфөлә тыуған яҡты өйрәнеүселәр форумы үткәйне. Унда Рәсәй Фәндәр академияһының Телдәрҙе өйрәнеү институты белгесе, лингвист, филология фәндәре докторы Юлия Норманская сығыш яһаны. Ул башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын Lingvodoc платформаһында цифрлаштырыу йәһәтенән масштаблы эш башларға тәҡдим итте. Республика етәкселеге Мәскәү ғалимдарының был башланғысын хупланы һәм әлеге ваҡытта проектты тормошҡа ашырыу буйынса эштәр башланды ла: әүҙемселәр, телһөйәрҙәр телмәр өлгөләрен, әкиәттәрҙе, риүәйәттәрҙе, ҡобайырҙарҙы, мөнәжәттәрҙе ебәрә, программа белгестәре уларҙы эшкәртә һәм киләсәктә электрон уҡытыу программаһы булдырыласаҡ. Ул саҡта ғәмәлдәге әҙәби нормаларҙы ғына өйрәнеү түгел, ә нәҫелең, яҡындарың, ырыуҙаштарың һөйләшкән телде өйрәнеү мөмкинлеге лә барлыҡҡа киләсәк.

Һис шикһеҙ, был эште урындағы халыҡтың һәм тел уҡытыусыларының ярҙамынан башҡа атҡарып булмаясаҡ. Был тәңгәлдә эшләгән, телде һанлаштырыу, уҡытыу программаларын төҙөгән ғалимдарға ла яҡлау кәрәк, сөнки һүҙ, ғөмүмән, туған телдәрҙе һаҡлау һәм яҡлау, үҫтереү хаҡында бара, шул иҫәптән башҡорт телен һәм уның диалекттарын да.

***Ошо йәһәттән уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһендә Тәтешле районы хакимиәтенең мәғариф бүлеге етәксеһе, Гәрәй ырыуы башҡорто Әҙеһәм Фәрүәзетдинов түбәндәге фекерен белдерҙе:*** Мин Тәтешле районының Иҫке Аҡбулат ауылында тыуып үҫтем, Гәрәй ырыуы башҡортомон. Ғүмер буйы мәғариф өлкәһендә эшләнем. Беҙҙең Тәтешле районы халҡы төньяҡ-көнбайыш башҡорттары төркөмөнә ҡарай. Һуңғы йылдарҙа тарихыбыҙға, диалектыбыҙға иғтибар бермә-бер артты, быны беҙ бик шатланып ҡабул иттек. Был өлкәлә алып барылған сараларҙа ла теләп ҡатнашабыҙ.

Райондың Гәрәй ырыуы башҡорттары берләшмәһенә лә етәкселек итәм. Күптән түгел Ҡалтасы районында ҙур йыйын уҙғарылды. Ғөмүмән, ошондай саралар күп милләттәштәребеҙгә уларҙың төньяҡ-көнбайыш башҡорттары төркөмөнә ҡарауын, урындағы диалектта һөйләшеүен аңлата, кешеләр тарихи ысынбарлыҡты асыҡлап, нәҫел ептәре менән ҡыҙыҡһына башлай. Халыҡ араһында ҡыҙыҡһыныу бар, улар һөйләшебеҙҙең башҡорт теленең бер диалекты икәнлеген асыҡ аңлай. Өфөнән килгән күренекле ғалимдарҙың да аңлатыу эштәре алып барыуы, шәжәрәләребеҙҙе төҙөргә ярҙам итеүе - ыңғай күренеш. Кешеләрҙә милләтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килде - был бик шәп. Мәктәптәрҙә башҡорт теленә өҫтәмә рәүештә урындағы диалект буйынса махсус әсбаптарҙан дәрестәр алып барыла. Былтыр бишенсе класс өсөн булһа, быйыл алтынсылар ҙа ошондай әсбаптар менән ҡуллана аласаҡ. Әйтергә кәрәк, балаларға был дәрестәр бик оҡшай, улар теләп өйрәнә, сөнки үҙҙәре аралашҡан әсә телен өйрәнәләр.

Мин үҙем дә шатланам, сөнки телебеҙҙең, һөйләшебеҙҙең баһаһы бермә-бер күтәрелде. Мәктәптәрҙә балалар шәжәрәләр төҙөй, был да күптәргә кем һәм ҡайҙан, ниндәй нәҫелдән икәнлеген аңларға ярҙам итте. Мәҫәлән, беҙҙең район биләмәһендә Иван Грозный заманында ситтән күсеп килгән халыҡ та бар, әммә беҙ тарихи дөрөҫлөктө билдәләнек: ата-бабаларыбыҙ был ерҙәрҙе күпкә алдараҡ үҙләштергән, улар аҫаба ерҙәрендә йәшәгән ерле башҡорт ырыуҙары вәкилдәре булған. Данлыҡлы Иҫән хан, "Беҙ урман башҡорттары" тигән Ғәли Соҡоройобоҙ - ғорурлығыбыҙ... - тине Әҙеһәм Фәрүәзетдинов.

БЕР ҮК ТЕМАҒА

# ҺӨҘӨМТӘЛӘР ҠЫУАНДЫРАМЫ?

**Бөгөн ата-әсәләр генә түгел, барыһы ла уҡыу йылының иң төп һөҙөмтәләре - мәктәпте тамамлаусыларҙың артабанғы яҙмышы, уҡыу йорттарында уҡыуын дауам итеүе тураһында ҡыҙыҡһына. Ошо темаға БР мәғариф һәм фән министры Айбулат ХАЖИН мәғлүмәт бирҙе.**

Министр билдәләүенсә, 2021 йылдың 31 майынан Башҡортостан Республикаһында Берҙәм дәүләт имтихандарының төп осоро булып үтте һәм унда 17 170 кеше (2020 йылда - 17 902) ҡатнашты, шуларҙың 16 104-е - мәктәпте быйыл тамамлаусылар. 2021 йылда иң юғары 100 балға 104 уҡыусы эйә булды, барлығы 109 йөҙ баллы һөҙөмтә алынды. Шуларҙың бишәүһе БДИ-ны ике фәндән дә 100 балға тапшырыуға өлгәште. Ағымдағы уҡыу йылында Башҡортостанда БДИ-ны 81 һәм унан юғарыраҡ балға тапшырыусылар иҫәбе лә артты.

**Быйыл республика колледждарында** 22 662 бюджет урыны булдырылды, был былтырғынан 368-гә күберәк. 2021-2022 уҡыу йылына абитуриенттар 68 һөнәр һәм 121 урта һөнәри белгес төрҙәре буйынса ҡабул ителә.13 авгуҫтағы мәғлүмәттәр буйынса бөтәһе 57 мең ғариза бирелгән. Абитуриенттар былтырғы кеүек үк, күберәк нефть һәм газ сәнәғәте өсөн техник белгестәр, шулай уҡ мәғлүмәт, хоҡуҡ һәм медицина йүнәлешендәге колледждарҙы һайлаған. Был уҡыу йорттарына иң ҙур конкурс күҙәтелгән: белгестәр йүнәлешенә бер урынға - 28,5 кеше, һөнәрҙәр һайлау буйынса 16 кеше дәғүәләшкән.

**Башҡортостан Республикаһында юғары белем биреүсе** 9 дәүләт вузы, Рәсәй дәүләт вуздарының 6 филиалы, дәүләттеке булмаған 2-шәр вуз һәм филиал эшләй. 2020-2021 уҡыу йылында уҡыусы студенттар һаны 97,2 мең кеше тәшкил итте, шул иҫәптән 49,4 меңе - көндөҙгө бүлектә. Дәүләт юғары уҡыу йорттарында 86,8 мең кеше уҡыны. 2020 йылда Башҡортостан вуздарының бюджет урындарына ҡабул ителгән абитуриенттарҙың уртаса БДИ һөҙөмтәһе - 70,6 балл булды.

Башҡортостан 2020 йылда бюджет урындарына ҡабул итеү сифаты буйынса ТОП-15 төбәк араһында - 11-се, түләүле ҡабул итеү сифаты буйынса 9-сы урында.

Бөгөнгө көнгә республика юғары уҡыу йорттарына 145 688 ғариза бирелгән, конкурс - бер урынға 11 кеше булды. Абитуриенттар айырыуса дауалау эшмәкәрлеге, педиатрия, нефть-газ өлкәһе, ғәмәли информатика, мәғлүмәти хәүефһеҙлек, химия технологияһы, төҙөлөш йүнәлештәрен күберәк һайланы. Республика вуздарына бөтәһе 2009 студент ҡабул ителде. Бирелгән ғаризалар буйынса был былтырғынан 16 процентҡа күберәк.

Республикала былтырҙан Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса 100 балл йыйған уҡыусылар әҙерләгән дөйөм белем биреү учреждениелары уҡытыусыларына премия булдырылды. Премияның күләме - 50 мең һум. Был юлы был премия 90 уҡытыусыға бирелә. Бынан тыш, быйыл Башҡортостанда Берҙәм дәүләт имтихандарында йөҙ балл туплап, республиканың юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингәндәргә республика Башлығының 150 мең һумлыҡ премияһы булдырылды. Бөгөнгә ошондай 36 уҡыусы Башҡортостан вуздарына уҡырға инеү өсөн ғариза биргән. Әйткәндәй, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын тамамлаған Гөлназ Ишемғужина Мәскәү вуздары урынына Башҡорт дәүләт медицина университетына өҫтөнлөк биргән.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

29

# Шифа

21-27 август (урағай) 2021 йыл

№34 (972)

МЕДИЦИНА ХӘБӘРҘӘРЕ

## МӘҒЛҮМӘТ БУЛМАҒАС...



**Өфөлә Йәмәғәт ярҙамы республика штабында Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау системаһынан Халыҡ программаһына тәҡдимдәр индереү буйынса эксперт советының ултырышы үтте.**

Унда һаулыҡ һаҡлау системаһын модернизациялау, камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәр индерелде, медицина-санитария ярҙамын күрһәтеү буйынса мәсьәлә күтәрелде. Фельдшер-акушерлыҡ пункттары, врач амбулаториялары, участка, үҙәк район дауаханалары эшмәкәрлеге, уларҙы финанслау, медицина ярҙамын яҡшыртыуға йүнәлтелгән маҡсаттар, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге федераль законды камиллаштырыуға иғтибар бүленде. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин билдәләүенсә, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары ябылмаясаҡ, медицина ярҙамын камиллаштырыу, ҡайһы бер сығымдарҙы ҡыҫҡартыу планлаштырыла. Лабораторияларҙы, ашығыс ярҙам хеҙмәтен үҙәкләштереү, дарыу реформаһы мәсьәләләре лә күтәрелде.

Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Эльвира Айытҡолова ике мәсьәләгә иғтибарҙы йүнәлтте. Уның береһе - медицина ярҙамын күрһәтеү буйынса халыҡҡа мәғлүмәт биреү. Билдәле булыуынса, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге мөрәжәғәттәр бик күп. Уның сәбәбе башлыса халыҡтың тейешле мәғлүмәткә эйә булмауына бәйле булыуы ихтимал. Мәҫәлән, әгәр медицина учреждениеһын үҙгәртеү тураһында һүҙ бара икән, был хаҡта мәғлүмәт халыҡҡа ваҡытында еткерелергә тейеш. Ни өсөн теге йәки был административ ҡарарҙар ҡабул ителеүен улар белергә тейеш. Йыш ҡына аңлап етмәү сәбәпле граждандар бик үк дөрөҫ булмаған һығымтаға килә.

Икенсе мөһим мәсьәлә - ауыл ерендә дарыу препараттары алыу. Бөгөн дарыуханалар етешмәй. Район хакимиәттәре дарыухана өсөн льготалы шарттарҙа биналар тәҡдим итә, әлбиттә. Әммә коммерция нигеҙендәге аптекалар үҙҙәренең сығымын ҡаплау тураһында уйлай ҙа, баш тарта. Шуға күрә был мәсьәләне республика кимәлендә хәл итеү мөһим.

## ВАКЦИНАНЫҢ ЗЫЯНЫ ЮҠ!



**Медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры Нәүфәл Заһиҙуллин, коронавирусҡа ҡаршы вакцина организмда мутация барлыҡҡа килтереүе ихтимал, тигән хәүефте таратты.**

"Башҡортостан" ДТРК-һына интервьюла аңлатыуынса, организмда даими рәүештә мутация булып тора икән. Вирустар ҙа ген структураларын билдәле рәүештә үҙгәртә ала, был нормаль процесс, әммә вакцинация ваҡытында ДНК бер нисек тә маҡсатлы үҙгәртелә алмай.

Профессорҙың һүҙҙәре буйынса, вакцинаның йоғонтоһо күпме ваҡытҡа тиклем һуҙылырын әйтеүе ауыр. Ҡағиҙә булараҡ, миҙгел ауырыуҙарынан вакцина бер йылға етә. Коронавирустан вакцина күп компонентлы прививка составына индерелеп, йыл һайын киҙеүҙән вакцинациялау ваҡытында яһалыуы ихтимал. Рәсәйҙәргә тәҡдим ителгән өс вакцина араһынан иң ныҡ тикшерелгәне -"Спутник V". Нәүфәл Заһиҙуллин әйтеүенсә, ул үҙе лә прививка эшләтергә ниәтләй һәм ата-әсәһенә лә тәҡдим иткән. БДМУ клиникаһында пациенттарҙың хәл-торошон тикшереп, табиптар был вакцинанан ауыр өҙлөгөүҙәр, атап әйткәндә тромбоздар, күрмәй. Доктор илдә вакцинациялау кимәлен 60 процентҡа еткереү мөһим тип билдерә. Миҫал итеп ул Израилде атай. Унда һәр кешене вакцинациялау сирҙең кинәт кәмеүенә килтергән.

## ДАУАМЛЫ ДАУА



**Ковидтан һуң һәр кем реабилитация үтергә тейеш, ти эксперттар һәм врачтар.**

"Беҙ COVID-19 менән икенсе йыл көрәшәбеҙ, пациенттарҙы аяҡҡа баҫтырабыҙ, әммә уның ауыр эҙемтәләре булған осраҡтар ҙа күп. 1 июлдән башланған диспансеризацияның яңы системаһы бындай категорияға ҡараған кешеләргә айырым иғтибар булырға тейешлеге тураһында һөйләй. Ковидтан һуң диспансеризация ике этапта үтәсәк һәм тейешле дауа, реабилитация билдәләнәсәк. Сирҙе ауыр үткәргән пациенттарҙы санаторий-курортта дауаланырға ебәреү мөһим. Был йәһәттән льготниктар категорияһын йәшенә һәм һөнәренә ҡарап билдәләү мөһим. Уларҙың һәр береһенә дауалауҙың айырым алымын тәғәйенләргә кәрәк. Әгәр ҙә бөтәһе лә үҙенең һаулығына иғтибар бүлһә, сир эҙемтәһе аҙыраҡ булыр. Мин дә коронавирус инфекцияһы менән ауырыным һәм тын алыу гимнастикаһы менән реабилитация үтәм. Ыңғай һөҙөмтәләре бар", - ти Башҡортостандың атҡаҙанған врачы, БР Дәүләт Йыйылышы депутаты Римма Үтәшева.

Был мәсьәләнең актуаллеге пандемия ваҡытында бер нисә тапҡыр күтәрелде. Врач Денис Проценко билдәләүенсә, Рәсәй Президенты реабилитация программаһын булдырыру хаҡында иғлан итте, уға 100 миллиард һум аҡса бүленәсәк. Шуға күрә закон сығарыусылар һәм финансистар өсөн техник эштәрҙе формалаштырыу мөһим.

## ИҪКӘРТЕҮ ӨСӨН...



**Өфө ҡала округы хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш хеҙмәткәре Сара Әхтәмова баш ҡала халҡын диспансеризациялау һәм профилактик тикшереү мәсьәләләре тураһында бәйән итте.**

Мәғлүм булыуынса, диспансеризация хроник сирҙәрҙе асыҡлау маҡсатында үткәрелә. Тикшереү үтеү өсөн берҙәм справка тултырыу, телефон аша яҙылыу "табипҡа" ҡушымтаһы йәки Берҙәм дәүләт хеҙмәте порталында, поликлиникаларҙың теркәү хеҙмәтендә (регистратура), "ҡыҙыу бәйләнеш" (8 (347) 216-10-81) аша яҙылырға мөмкин. 2019 йылдан алып, федераль законға ярашлы, эшләп йөрөүсе хеҙмәткәрҙәр өс йылға бер тапҡыр 1 көн, пенсионерҙар һәм пенсия алдында торғандар ике көн эштән азат ителә. Йыл башынан алып Башҡортостанда тикшереү үтергә тейешле категорияның 45 проценты, шуларҙың яртыһы - эшләп йөрөүселәр - диспансеризация үткән. Өфөлә был күрһәткес шулай уҡ 45 процент, йәғни 143 316 кеше. Шуларҙың 10872-һендә ҡан әйләнеше, ашҡаҙан-эсәк тракты, тын алыу юлдары системалары ауырыуҙары булыуы асыҡланған. Йыл башынан алып коронавирус инфекцияһы менән ауырыған пациенттарҙы ентекле тикшереү башланған. Уның һөҙөмтәләре буйынса сәләмәтлек төркөмдәре туплана, махсус медицина ярҙамы һәм реабилитация ихтыяжы мәсьәләләре хәл ителә.

## ЭҘЕМТӘЛӘРЕ БАЙТАҠ



**Коронавирус менән ауырығандарҙың интеллект кимәле түбәнәйеүе ихтимал тип белдерә Британия ғалимдары.**

Фәнни тикшеренеүҙәрҙә 80 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан, шуның 12 меңе коронавирус менән ауырыған. Яһалма үпкә вентиляцияһына тоташтырылған пациенттарҙың мәғлүмәтте эшкәртеү һәләте кәмеүе асыҡланған. Бының хатта инсульт эҙемтәһенә ҡарағанда ла юғарыраҡ булыуы билдәләнә.

Коронавирус менән ауырығандар хәтере юғалыуы, баш "томанланып" тороуы, логик күнекмәләрҙе ауыр сисеүе хаҡында белдерә. Быға тиклем психиатрия һәм психология өлкәһендәге эксперттар COVID-19 менән ауырығандарҙың мәғлүмәтте ҡабул итеү һәләте кәмейәсәге хаҡында әйткәйне. Әммә был нормаль күренеш, сөнки бөтә вирустан һуң да хәтер насарая, иғтибар кәмей. Эксперттар әйтеүенсә, мәғлүмәтте эшкәртеү һәләте бер айҙан һуң кире ҡайта, әлбиттә, был процесс һәр кемдеке үҙенсә үтә.

Юғары категориялы врач-терапевт Алексей Водовозов әйтеүенсә, күптәрҙә ковидтан һуңғы синдром барлыҡҡа килеүе ихтимал. Хәлһеҙлек, күкрәк ситлегендә ауыртыу, тын алып еткермәү, баш, быуын һәм мускул ауыртыуы, йоҡоһоҙлоҡ, депрессия кеүек уның билдәләре 4 аҙнаға һәм ғүмер ахырынаса дауам итергә мөмкин.

Психолог Олег Глазунов әйтеүенсә, вирус нервы системаһына кире йоғонто яһай. Уның эҙемтәләренә еҫте, тәмде тоймау, сәс ҡойолоу, тире ауырыуҙары, теш төшөү һәм башҡа төрлө хроник сирҙәр инә.

АҒИНӘЙҘЕҢ ӘЙТКӘНЕ



## ЯҠШЫ УЙЛЫ БУЛҺАҢ...

### оҙаҡ йәшәрһең

Һаулыҡты ҡартайғансы һаҡлау, оҙағыраҡ йәшәү хаҡында уйланмаған кеше бик һирәктер был донъяла. Хатта ошо ҡартайыу механизмдарын өйрәнгән тотош фән дә бар. Оло йәштә лә хәрәкәтсәнлеген, зирәклеген юғалтмаған инәй-бабайҙар менән осрашһаҡ, уларҙың оҙаҡ йәшәү сере менән ҡыҙыҡһынмай ҡалмайбыҙ, әлбиттә. Туҡһандан үтеүенең сәбәбен берәүҙәр йәш саҡта тик үлән менән туҡланып, ауыр эштә сынығыуына бәйләһә, икенселәре сәләмәт тормош алып барыуынан, өсөнсөләре нәҫел-нәсәбенән күрә. Мәләүез районы Һарыш ауылында йәшәгән 93 йәшлек Тәнзилә инәй Кәримованың да оҙон ғүмерлелегенең үҙ сере бар.

- Көңөлдә тик яҡшы уйҙар ғына йөрөтөргә кәрәк. Үпкәләүҙәрҙән, көнсөллөктән, асыуҙан һаҡланыу мөһим. Йәнде лә, тәнде лә ҡартайта торған нәмә улар. Яратҡан шөғөл булыу ҙа кешене ауыр тойғоларҙан, кисерештәрҙән һаҡлай. Йәш үтеү менән ҡыҙыҡһыныуҙар үҙгәреүе мөмкин, әммә нисә йәштә булһа ла, кешенең ҡулына яратып алған эше булырға тейеш, - ти ул.

Бынан тыш, Тәнзилә Ғөбәйҙулла ҡыҙы йәнле аралашыуҙың кеше тормошонда ҙур роль уйнауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Үҫтергән балаларындың изгелекле мөнәсәбәте, татыулыҡ та ыңғай кисерештәр биреүен, күңел төшөнкөлөгөнә ҡаршы торорға ярҙам итеүен билдәләне.

- Шулай ҙа иң мөһиме - хәрәкәт, - ти ул эшен туҡтатмай ғына. Беҙ барғанда ишек алдында үҫкән әремдән һепертке бәйләп, тупһаһын һепереп йөрөй ине. - Күп йөрөргә тура килһә, бер ҙә зарланырға ярамай. Атлау, йәйәү йөрөү йөрәкте, ҡан тамырҙарын нығыта, шуға күрә һәр ваҡыт хәрәкәт итергә тырышығыҙ. Һаулыҡты йәштән һаҡларға кәрәк. Кешегә ғүмер Хаҡ Тәғәләнән бүләк итеп бирелә, шуға күрә уны һаҡлау һәр кемдең бурысы булырға тейеш. Күҙ ҙә, ҡолаҡ та, йөрәк тә, аяҡ-ҡулдар ҙа ҡартайғас бигерәк тә кәрәк. Кеше көнлө булып ултырмаҫ өсөн уларҙың сәләмәтлеген хәстәрләгеҙ. Дауа - аяҡ аҫтында.

Оло быуын вәкиленең һәр һүҙендә хаҡлыҡ бар ине. Ауырып дауаланғанға ҡарағанда, сирҙе иҫкәртеү һәм ҡылығынды, уйҙарынды, тормошҡа, кешеләргә мөнәсәбәтеңде үҙгәртеү күпкә отошлораҡ шул.

Лена АБДРАХМАНОВА.

✓ ***Шундай мәлдә хирургтың юғалып ҡалмауына хайран ҡалғайным. Күҙ асып йомған арала бармағын бөкө итеп яраны томалай һалып, унан йәһәт кенә тегеп, ҡанын туҡтатҡас, беҙ, ярҙам итеүсе хирургтар, иркен итеп тын алып ҡуйҙыҡ.***

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# БЕЛЕМЛЕ ЛӘ, ОҪТА ЛА, ШАЯН ДА, УҪАЛ ДА УЛ,

## йәки Хирург халҡы хаҡында бер фәлсәфә

**Медицина институтына уҡырға ингән күп студенттар (айырыуса, ир-ат халҡы) хирург булырға хыялланыусан. Ошо һөнәр кешеләре хаҡында фекерләп алырға ине уйым.**

Юғары уҡыу йортонда уҡыған дәүерҙә кеше анатомияһын, хирургияның һәр төрлө тармаҡтарын өйрәнеүгә айырыуса әһәмиәт бирә студенттар. Күп кенә сирҙәрҙе скальпель ярҙамында ғына киҫеп алып ташлап, әҙәм балаһының һаулығын тәҙәтеп ебәрергә ҡыҙыҡмаған студент юҡтыр. Юғары курстарҙа берәй кафедраның уҡытыусыһы һинең тырышлығыңды шәйләп ҡалып, үҙе менән төнгә дежурҙарға алып йөрөй башлаһа инде, был һың. Дөйөм ятағыңа ҡайтып, тынысланып йоҡларға ятаһың. Һуңғы осорҙа бына шул хаҡта йышыраҡ уйланам әле: пациентына, шәфҡәт туташына йә ассистентҡа шаян һүҙҙәр ташлай-ташлай, әммә үҙе шыбыр тиргә батып, операция яһап торған сал сәсле хирург ағайҙар ҙа ана шулай тыныс ҡына йоҡлаймы икән?.. Ә бит улар ғүмер буйы әлеге ябай "һуҡыр эсәк"кә ҡарағанда күп мәртәбәләргә ҡатмарлыраҡ бихисап төр сирҙәр менән көрәшә! Студент мәлдәрендә, әлегә үҙең табип булып эшләй башламағанда, бындай уйҙар башҡа килеп тә урамай ул. Табип дипломы алып, дауаханала үҙаллы эшләй, пациенттарыңдың һаулығы, уларҙың ғүмере өсөн яуаплылыҡ тоя башлағас ҡына әлеге хирург ағайҙарҙың хәленә инә башлайһың. Фәлән хирургтың иллеһе йә-хәрәкәте, һәр эше әҙәм балаһының һаулығы, ә бәғзе ваҡыт уның ғүмере менән бәйле. Башта әйтмешләй, "сирҙе скальпель менән генә киҫеп алып ташлау" - студент күҙлегенән сығып ҡарағанда тойолған хыял ғына ул. Киҫкәндән һуң кеше организмында йүнәлеү процесы ифрат та ҡатмарлы булыуы хаҡында ла онотмаҫҡа кәрәк. Шул уҡ ваҡытта һәр организмдың үҙенсәлектәре лә төрлөсә. Операциянан һуң бәғзе берәү тиҙ генә йүнәлеп китә икән - хирург дан һәм шөһрәткә күмелә, әммә ауырыу операциянан һуң мандып китә алмай, хатта үлемгә лә тарый икән, ул шул уҡ хирург өсөн дә оло фажиғә. Ошо хаҡта һәммә хирург бик яҡшы белә һәм бер ҡасан да онотмай. Әрмелә мина, снаряд һымаҡ "боевой заряд"тарҙы зарарһыҙландыра торған "сапер" тигән бер һөнәр төрө бар. "Сапер үҙ ғүмерендә бер генә мәртәбә яңылыша", тигән әйтем йөрөй. Бәғзе ваҡыт аҡ халаттағы ошо кешеләрҙең эшен ана шул сапер һөнәре менән сағыштырыуҙар тигенгә түгел... Хирург халҡы өйҙә, хатта ҡунаҡта ултырғанда ла үҙенең тегә йәки был ауырыуының хәле хаҡында уйланыусан. Ял көндәре лә дауаханаға килеп, пациенттарының хәлен белешеп, дауалауға коррекция яһап, шәфҡәт туташына күрһәтмәләр биреп китә улар.

Табиптар, әлбиттә, уҡыу йортонда алған белеме менән генә сикләнеп ҡалмай, һәр саҡ үҙенең һөнәре буйынса артабан камиллашырға тейеш. Медицина институтында, шулай уҡ төрлө ҙур госпиталь базаларында ойошторолған уҡыу процесы тәжрибәле уҡытыусылар тарафынан юлға һалынған.



Хирургия буйынса сираттағы уҡыуға барғанымда танышҡан Төньяҡ ракета полигонының баш госпиталендә хирургия бүлеге мөдире булып эшләгән медицина полковнигы Полунин әле булһа иҫемдә. Уның менән бергә төнгә дежурлыҡ иткәндә ашығыс ярҙам машинаһы менән бер капитанды алып килгәйнеләр. Түшенә бысаҡ ҡаҙалған. Наркоз биреп, "йөрәк сумкаһын" асҡас та, йөрәгенән түбәгә ҡәҙәр ҡан саптырып киткәне әле булһа күҙ алдымда. Секундтар ҙур роль уйнаған шундай мәлдә лә әлеге хирургтың юғалып ҡалмауына хайран ҡалғайным. Күҙ асып йомған арала бармағын бөкө итеп яраны томалай һалып, унан йәһәт кенә тегеп, ҡанын туҡтатҡас, беҙ, ярҙам итеүсе хирургтар, иркен итеп тын алып ҡуйҙыҡ. Сал сәсле Александр Васильевичҡа ҡарата ихтирамыбыҙ бермә-бер артты. Әлеге офицер йүнәлеп сығып китте...

Шул уҡ госпиталдәге икенсе бер осраҡ та хәтеремдә. Йорт төҙөп йөрөгән хәрби төҙөүсе, рядовой Михаилды табипҡа алып килделәр. Бетон стенаға ҡаҙау ҡаға торған пистолеты яңылыш атылап китеп, бер күҙен яралаған икән. Күҙ табибы уны ҡарағас, яраһын тегеп, үҙенең бүлегендә дауаларға ҡалдырҙы. Бер нисә көндән һалдатыбыҙ баш ауыртыуына зарлана башлағас, уға рентген яһанылар, һәм... һалдаттың баш мейеһенең ҡап уртаһында әлеге ҡорос ҡаҙау (дюбель) ятҡанлығы асыҡланды. Күҙен үтә тишеп сығып, мейе ҡумтаһына ингән булған икән. Госпиталдең нейрохирургия бүлеге начальнигы - подполковник Федоров, егеттең баш һөйәген асып, әлеге ҡаҙауҙы алып ташланы. Һалдатты, әлбиттә, артабанғы хәрби хеҙмәттән азат иттеләр, өйөнә йүнәлеп, ата-әсәһе янына имен-һау ҡайтып китте ул... Хеҙмәттәше яңылыш ҡына автоматтан атып яралаған һалдаттың әллә нисә урындан өҙгөләнгән эсәктәрен ялғап, уның һауығыуына сәбәпсе булған Болтыков исемле майор ҙа хәтеремдә. Өсөнсө тиҫтәһен әле генә аша атлап үткән, әммә сәстәре ап-аҡ булған был хирург-коллегамдың көлә-шаяра операциялар яһаған мәлдәрен йыш ҡына иҫләйем.

Һанай башлаһаң, кемдер әйтмешләй, осо-ҡырыйы юҡ инде бындай хәлдәрҙең, улар менән хирург халҡы ифрат йыш осрашып тора. Тик бөтә осраҡтар ҙа ана шулай яҡшы ғына тамамлана тип уйлау, әлбиттә, ҙур хата булыр. "Травма, несовместимая с жизнью" тип аталған төшөнсә бар хирургияла. Йә булмаһа, "эше үткән", йәғни һуңғы стадияларҙа булған берәй яман шеште алып ташлағас та, кешене ҡотҡарып алып булмаған осраҡтар күп. Шундай саҡтарҙа, һис кенә лә ғәйебе булмауына ҡарамаҫтан, теге йәки был хирург хаҡында кеше араһында һәр төрлө насар хәбәр ҙә таралғылай. Хатта мәрхүмдең туғандары табипты судҡа биргән осраҡтар ҙа булғылай. Уныһ ҙа пациенты өсөн йөрәге һыҙланған хирургты прокурор иптәштәр саҡырткылап, тағы бер килке "тирләтеп" ала...

Хирургия бүлексәләрендә айырыуса ҡаты тәртип булыуы ла һәр кемгә мәғлүмдер. Стериллек ҡағиҙәләрен, табип тәғәйенләүҙәрен урын-еренә ет-

студент хәтерендә иң шатлыҡлы ваҡиға булып ҡаласаҡ. Өсөнсө курста уҡыған сағымда Республика клиник дауаханаһы профессоры Ибраһим Ғәйзулла улы Рәхмәтуллин (хәҙер мәрхүм инде) ябай операцияларға ассистент итеп ҡатнаштыра башлағас, мин дә үҙемде бер аҙ хирург итеп тоя башлағаным хәтеремдә. Әлбиттә, ысын хирургиянан әлегә бик күпкә алыҫ инем әле.

Әйтәйек, донъя йөҙөндә киң таралған сир - аппендицит. Дөрөҫөн әйткәндә, был - үлемесле сир, йәғни ваҡытында операция яһамаһаң, ауырыу, һис шикһеҙ, үлә. Ә инде кешенең эсен асып, эсәге араһынан бәләкәй генә (сәтәкәй бармаҡ ҙурлығы) бер нәмәне киҫеп алып ташлаһаң, аҙна-ун көндән һауығып, пациентың һинә рәхмәттәр әйтә-әйтә өйөнә ҡайтып та китә. Оҫта ҡуллы, тәжрибәле хирург янында булғанда, операция яһалған пациенттарың хаҡында һис бер нәмә уйламай-шендә йөрәгенә инфаркт, йә баш мейеһенә инсульт булыу осраҡтарына, ҡырҡ йәше лә тулмаҫтан сәстәре ағарыуына иғтибар итмәгән кеше юҡтыр, моғайын. Ә был нилектән шулай һуң?

Һәр төрлө һөнәр эйәләренең "Мин үҙемдең эшемде яратам", тип әйткәнен йыш ишетәбеҙ. Ниндәй ҙә булһа һөнәрсенең берәй эше ул теләгәнсә килеп сыҡмаһа, ул уны һүтеп, ҡабаттан эшләй ала. Ә бына хирургия һөнәренең башҡа төр кәсептәрҙән ҡырҡа айырылып торған бер үҙенсәлеге бар. "Әй, был юлы килеп сыҡманы", - тип, бар эшен емереп ташлап, ҡабаттан башлап булмай торған һөнәр бит ул. Хирургтың һәр

Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?

# АЯҠТА, ТАБАНДАРҘА...

## ғүмер оҙайлығы

**Сәс ағара, тире ҡартая, тип ҡайғырмағыҙ, ә аяғығыҙҙың көсөн һаҡлау сараларын күрегеҙ. "USA Magazine" журналында оҙон ғүмерлелектең төп билдәләре араһында тап ошо үҙенсәлеккә иғтибар бирелә.**

Әгәр ике аҙна буйы хәрәкәтләндермәһәгеҙ, аяғығыҙ көсө 10 йылға тиклем кәмей, тиелә унда. Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, ике аҙна тик ултырғандан һуң йәштәрҙең дә, ололарҙың да аяғы ныҡ көсһөҙләнгән, йәғни 20-30 йылға тиклем ҡартайыуға тура килгән. Аяҡ мускулы көсһөҙләнһә, төрлө күнегеү эшләһәгеҙ ҙә, уны тергеҙеү өсөн бик күп ваҡыт талап ителәсәк.

Аяҡ көсөн һаҡлау өсөн иң мөһиме - йәйәү йөрөү. Табандың ныҡлы булыуы ла бик мөһим, ул һаулыҡ торошонда ҙур роль уйнай. Ғөмүмән, аяҡ менән табан - хәрәкәт үҙәге. Кеше һөйәгенең һәм мускулының 50 проценты аяҡҡа тура килеүе лә был ағзаның сәләмәтлегенә етди иғтибар кәрәклеге хаҡында һөйләй. Иң ҙур быуын һәм һөйәк тә - аяҡта.

Кешенең әүҙемлеге һәм "энергияһын яндырыуы" ла тап аяҡтарға бәйле. Әгәр ҙә бәндәнең бот һөйәге сәләмәт һәм көслө булһа, ул хатта ҙур булмаған машинаны ла күтәрә алырға һәләтле.

Кәүҙәләге 50 процент нервы күҙәнәге, ҡан тамыры һәм улар буйынса әйләнгән ҡан да аяҡтарға тура килә. Шуға күрә улар сәләмәт булғанда ғына ҡан дөрөҫ әйләнә, мускул көслө булһа, йөрәк тә яҡшы эшләй.

Ҡартайыу аяҡтарҙан башлана. Йәш барған һайын аяҡ һәм мейе араһындағы инструкцияларҙың тиҙлеге һәм дөрөҫлөгө йәш саҡтағыға ҡарағанда кәмей. Бынан тыш, оло кешенең кальцийы ваҡыты менән юҡҡа сыға һәм һөйәктәр муртҡа әйләнә. Шуға күрә аяҡтарығыҙҙы хәрәкәттә тотоғоҙ, айырыуса 60 йәштән һуң күнегеүҙәр эшләү файҙалы. Аяҡ мускулын нығытып ҡына ҡартайыуҙы иҫкәртеп була. Бының өсөн бигерәк тә көн һайын 30-40 минут йәйәү йөрөү яҡшы һөҙөмтә бирә.

✓ ***Сит-ят ризыҡты беҙ ни бары 10 процент ҡына ашарға тейешбеҙ, сөнки сит-ят ризыҡ ашап, экологик тап килеү ҡанунын боҙабыҙ. Әгәр кеше ят ризыҡ ашаһа, ул үҙе йәшәгән урын шарттарына яраҡлаша алмай.***



кереп үтәүҙең пациент сәләмәтлегендә сағылыуы беребеҙ өсөн дә сер түгел. Шуға күрәлер ҙә, һәр шәфҡәт туташын йыш ҡына әрмеләге тыңлаулы һалдатҡа оҡшатам. Баймаҡ район дауаханаһында дүртенсе курстан һуң практикала булырға тура килгәйне. Шунда оҙаҡ йылдар эшләгән хирург Фәрит Әхмәт улы Яхин, Фирғәт Шаһиғәле улы Хисмәтуллин мәрхүмдәрҙең палаталарҙа обход яһағандары, персонал менән иртәнге "пятиминутка" үткәргәндәре бөгөнгөләй хәтеремдә. Төнгө дежурҙа булған медсестра, бер аҙ ғына ҡаушай төшөп, ординатор бүлмәһендә (нәҡ һалдат һымаҡ) туп-тура баҫып, доклад яһай, етди йөҙлө хирургтарҙың өҫтәмә һорауҙарына ла яуап бирә... Табиптың һәр бер күрһәтмәһенә, иҫкәрмәһенә "ярай", "эйе", тип баш ҡағып ҡына торған был йәш ҡыҙҙарҙы бәғзе ваҡыт хатта йәлләп тә китә торғайным. Ә төптәнерәк уйлап ҡараһаң, шунһыҙ эш тә алға бармаясаҡ бит! Һирәк-һаяҡ булһа ла, ниндәйҙер берәй мотлаҡ операция талап ителеп тә, үҙ хәлен аңлап етмәгән һәм хирургик дауалауҙан баш тартырға маташҡан ҡайһы бер ауырыуға ла: "Операция яһатмаһаң - үләһең бит!" - тигән һымағыраҡ ҡатыраҡ тонда уҫаллашып алырға мәжбүр була хирург...

Бына ошо етди халыҡтың ҡайсаҡ шаян булып китеүе лә күптәргә мәғлүм. Хирургтарҙың һәр төрлө йор һүҙҙәр менән ауырыуҙарға өндәшкеләп, уларҙы тиҙерәк һауығыуға көйләүҙәрен йә шәфҡәт туташына берәй үткер юмор ташлап, бер аҙ күңелен асҡылап алыуҙарын хәҙер мин үҙемсә аңлайым: операция мәлеме ул, бынан тыш ваҡытмы, йыш ҡына пациентының хәле хаҡында борсолоп, уйланып йөрөүсе быңдай табиптар ошо ысул менән иң беренсе нәүбәттә үҙҙәрен-үҙҙәре "әүрәтеп", тынысландырырға тырыша. Ситтән ҡарағанда ғәйәт тыныс кешенең кинәт кенә шаянланып китеүе бәғзе ваҡыт бер аҙ сәйер һымағыраҡ та тойола инде. Әммә бына шундай һөнәр кешеләренә мин шәхсән оло хөрмәт менән ҡарайым. Әлеге Фирғәт ағай Хисмәтуллиндың бер шаян һүҙе хәтеремдә ҡалған. Хирург-травматолог вазифаһын атҡарған был ағайҙың бүлегендә башлыса ир-ат автоһәләкәткә осрап яткылай ине. Күптәренә "Мейе һелкенеү" тигән диагноз да ҡуйыла. Шуға күрә ауырыуға "ҡәтғи постель режимы" тәғәйенләнә. Әммә шуға ҡарамаҫтан, пациенттар (күбеһе йәштәр) бәҙрәфкә тәмәке тартырға сығыусан. Шундайҙарҙы: "Нишләп урыныңдан тороп йөрөйһөң? Постель режимын боҙғаныңды тағы бер күрһәм - бестерәм!.." - тип егеттәрҙе "быжғытып" ташлай торғайны был ағай. Уның шаяртып әйткән ошо һүҙҙәре ауырыуҙарҙы ла рәнйетмәй, хатта уларға ныҡ ҡына тәьҫир иткәндәй ҙә була торғайны. Был әргә медсестралар ҙа күнегеп киткән ине инде... Үҙе дин юлында булған Хисмәтуллин ағайҙың бүлмәһенең кәштәһендә Ҡөрьән һәм башҡа дини китаптар ҙа күргеләй торғайным. Берәй операция алдынан олораҡ йәштәрҙәге ауырыуҙарға: "Ағай, "Ҡулһуалла"ны беләһеңме? Белһәң - уҡый башла. Шуны уҡыһаң - операция яҡшы килеп сыға", - тиер ине. Йәшләй генә мәрхүм булып ҡалған шул Фәрит, Фирғәт ағайҙар, Ғиззәт Зөлҡәрнәев, Әхмәр Кейекбаев һәм башҡа күп кенә табиптарҙың фотоһүрәттәре ташҡа уйылып, әлеге көндә район дауаханаһының стенаһына элеп ҡуйылған...

Районда ғына түгел, башҡа яҡын-тирәләрҙә даны таралған хирург, медицина фәндәре кандидаты Миңлеғәле Ишмөхәммәт улы Ғүмәров хаҡында айырыуса әйтеп үтмәк булам. Үҙ ғүмерендә меңәрләгән яҡташыбыҙҙың ғүмерен ҡотҡарып алып ҡалыуға сәбәпсе булған һәләтле был табип әле булһа район дауаханаһында ал-ял белмәй халыҡҡа хеҙмәт итә. Алтмыштың етеһен ҡыуып бара инде ул. Байым ауылы кешеләре (доктор ана шул ауылда тыуып үҫкән) "хирургҡа барам", тиәһе урынға, "Миндеғәлегә барам", тигәнен йыш ҡына ишеткеләй торғайным. Поликлиникаға ҡаралырға ингән ауырыуҙарға һәр саҡ мөләйем, яҡшы һүҙ табырға әҙер булған был табиптың ябай һәм матур итеп, тап-таҙа башҡортса һөйләшеп ултырғанын күреп кинәнгәнем бар:

- Ней булған, ағай?

- Әй, ҡустым, өй һалып йөрөгәндә мынау билемде биртендергәйнем...

- Ҡатыныңдан төкөртөп ҡараманыңмы?

- Юҡ, әлегә...

- Өйөңә ҡайтҡас та, еңгәйҙән төкөртөп ал, килешә ул!..

Доктор үҙе мут йылмая. Уның был шаяртыуына әле генә һыҙланып ултырған ағай ҙа көлөргә тотона... Шул арала, кинәт кенә етди төҫ алып, был табип ауырыу картаһына ниҙер яҙа ла башлай: "Ағай, һинең фәлән-фәлән сир. Бына ошо мин яҙғандарҙы үтәһәң - ауырыуың ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сығыр..." "Рәхмәт, ҡустым!.." Уның хәләл ефете лә - юғары категориялы табип-педиатр. Фәрдиә ханым (бөгөнгө көндә хаҡлы ялда) менән улар ике ул һәм бер ҡыҙ тәрбиәләп үҫтергәндәр. Улдары Азат, Азамат, ҡыҙҙары Гүзәл дә ата-әсәһе һымаҡ медицина юлын һайлаған.

Үҙемдең хеҙмәт юлым башлыса сит яҡтарҙа үтеү сәбәпле тик "элекке" табиптарҙы ғына яҡшы беләм. Әммә, ишетеүем буйынса, бөгөнгө көндә лә Баймаҡ дауаханаһында тәрән белемле, үҙҙәренең эшенә яуаплы ҡараған, халыҡҡа ла иғтибарлы булған йәш табиптар, шәфҡәт туташтары эшләй. Былтырҙан алып бөтә донъяны килеп баҫҡан тажзәхмәт сире ошо һөнәр эйәләре өсөн ҙур һынау булды ла инде. Һуғыш яланындағы яугирҙар менән сағыштырып булырлыҡ был кешеләр араһында үҙемдең курсташым Гөлнур Әҙеһәм ҡыҙы ла бар. Пациенттарына ярҙам ҡулы һонған, инфекцияның ҡап уртаһында йөрөгән был табип үҙе лә уҙған йыл бик ҡаты сирләп ала, әммә төҙәлеп сыҡҡас та, һис кисекмәҫтән, ҡабаттан һаулыҡ һаҡсылары сафына баҫа. Башҡортостан рекспубликаһының һаулыҡ һаҡлау отличнигы, бер туған ағайым - Юлай Төхфәт улын да әлеге сир урап үтмәне. Ағайым был ауырыуҙан көскә тере ҡалды. Ифрат ауыр, әммә почетлы бына шул эштәрендә һәммә табипҡа - коллегаларыма Аллаһ Тәғәләнән иман, оло сабырлыҡ, ныҡлы һаулыҡ насип итеүен һорайым.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ИЛДЕ БАҪЫП АЛҒЫҢ КИЛҺӘ...

## был илгә ят ризыҡ индер

**Лидия Несторовна Сурина - биология фәндәре кандидаты, фитотреапевт, Европаның өс конгресы һәм Прагала үткән фитотерапия буйынса II Бөтә донъя табиптар конгресы ҡатнашыусыһы, 40 йыл стажы булған үлән менән дауалаусы. Лидия Сурина урындағы үҫемлектәрҙең дауалау үҙенсәлеге тураһында бер нисә китап авторы.**

**Аҙыҡ дауа булырға тейеш, ә дарыу - аҙыҡ.** Беҙ ят ризыҡтарҙы күп ашағандан йышыраҡ ауырыйбыҙ. Ситтән индерелгән 65 процент ит - ул бик күп, шулай уҡ банан, әфлисундарҙы ла күпләп индерәбеҙ. Сит-ят ризыҡты беҙ ни бары 10 процент ҡына ашарға тейешбеҙ, сөнки сит-ят ризыҡ ашап, экологик тап килеү ҡанунын боҙабыҙ. Боланды дөйә ашаған сәнскәк менән туҡландырып булмай. Әгәр кеше сит климат мәғлүмәтен йөрөткән ят ризыҡ ашаһа, ул үҙе йәшәгән урын шарттарына яраҡлаша алмай. Был - тәбиғәттең төп ҡануны.

Мин бер саҡ Салехардта, Уренгойҙа, Надымда һәм Төмәндә үҫкән болануттың өлгөләрен алдым һәм уларҙағы витаминдар кимәлен тикшерҙем. Баҡтиһәң, унда С витамины лимонға ҡарағанда 6 тапҡырға күберәк икән. Лимонда ул 40 мг ғына. Салехардта үҫкән боланутта С витамины 20 тапҡырға күберәк - 810 мг, ә унда А витамины һәм каротин Төмәндә үҫкәндәгегә ҡарағанда 10 тапҡырға артыҡ. Йәғни үҫемлек ни тиклем төньяҡтараҡ, унда витамин запасы көньяҡтағыға ҡарағанда тиҫтәләрсә тапҡырға күберәк. Шулай булғас, төньяҡта йәшәүселәргә көньяҡ емеш-еләген ашарға яраймы? Сирҙәргә нигеҙ шулай һалына. Беҙҙең батшалар был хаҡта бик яҡшы белгән. Иван Грозный 1580 йылда: "Илде баҫып алғың килһә - ят ризыҡ индер!" - тигән. Бөгөн беҙ тап шулай эшләйбеҙ.

**Аспартам.** Бик күп аҙыҡ-түлек: төрлө колалар, һағыҙҙар һ.б. - сүп-сар. Уларға шәкәрҙән 200 тапҡырға шәрбәтерәк аспартам һалына. Кеше уларҙы ни тиклем күберәк ҡуллана, шул тиклем нығыраҡ һыуһай, тағы ла шул эсемлектәрҙе күберәк һатып ала һәм етештереүсе илдәрҙе байыта.

Аспартамдан һуң түбәндәге өҙлөгөүҙәр күҙәтелә: интеллект түбәнәйә, баш ауырта, күңел болғана, депрессия барлыҡҡа килә, ашҡаҙан ауырта, күреү һәләте насарая, кеше бер сәбәпһеҙ тулҡынлана, хәрәкәт насарлана, телмәр боҙола, быуындар ауырта, мейе серотонин бүлеп сығара һәм кеше туйғанын белмәй - артыҡ ауырлыҡ менән көрәшеү һөҙөмтә бирмәй.

**Икмәк - барыһына ла баш.** Аҡ икмәк - буш икмәк. Рустә ҡасан аҡ ҡалас ашағандар? Бары тик байрамдарҙа һәм ял көндәрендә генә. Башҡа ваҡытта көрпәле икмәк ҡулланғандар. Минең балалар баҡсаһында 260 бала. Беҙ уларға бер ай һөттә бешкән һоло ашатабыҙ - ҡурылдайҙарына ярҙам итәбеҙ, бер ай һыуҙа бешкән һоло бирәбеҙ - бауырҙы һаҡлайбыҙ, өс аҙна йод бирәбеҙ.

**Йод - интеллект дарыуы.** Атайым (әсәйем - медик, атайым - химик-урмансы) мине аллергиянан шулай дауаланы - өс аҙна һәр көн ярты стакан һөткә өс тамсы йод тамыҙып эсерҙе. Йод етешмәүе еңел аҡыллылыҡҡа һәм кретинлыҡҡа килтереүен белеп, Наполеон үҙ армияһы һалдаттарына даими рәүештә йод биргән.

**Һыулы шеш (киста).** Һыулы шешкә бер ваҡытта ла теймәгеҙ. Әгәр бысаҡ аҫтына ятһағыҙ, икенсеһе барлыҡҡа киләсәк. Кистаны онкологияны дауалаған кеүек дауалайҙар.

**Һырғанаҡ.** Әгәр бауырығыҙ менән проблема, панкреатит, холецистит бар икән, һырғанаҡ (облепиха) ашауҙы онотоғоҙ, бары тик уның япраҡтарынан эшләнгән сәй генә эсергә кәрәк.

**Кальций кәрәкмәй - кремний кәрәк!** Яҙын бесәйҙәр һәм эттәр нимә ашай? Аҡтамыр. Күптәре хатта уны ҡоҫҡансы ашай һәм шулай итеп таҙарына. Аҡтамыр - ҡиммәтле дарыу үләне. Унда кремний бар, кремний кальцийҙы тотоп тора, ә был инде артрит, артроз, полиартриттарҙан һаҡлай, ашҡаҙанды таҙарта һәм гастриттан дауалай. Уны нисек ҡулланырға? Услам аҡтамыр алып, уны кәстрүлгә һалығыҙ, 10 минут ҡайнатығыҙ һәм һөҙөгөҙ, ә һыуында аш бешерегеҙ.

Оло йәштәгеләргә кальций препараттары биреү - енәйәт, сөнки тамырҙар муртҡа әйләнә.

**Асыҡ сей яра.** Ашҡаҙандың әселеге түбән булған асыҡ сей яра ваҡытында көнөнә 1 япраҡ юл япрағын ашарға кәрәк, әселек юғары булғанда - әйер (аир) файҙалы.

**Витаминдар.** Бөгөн беҙҙә дарыуҙарҙың 65 проценты ялған. Минең табип әсәйем: "Бер ваҡытта ла өйгә синтетик дарыуҙар алып ҡайтма", - ти торғайны.

Селен сығанағы - һыуһар, һарымһаҡ, бесәй гөлө, аҡ сәскә.

**Яңы йыл шыршыһы.** Яңы йыл шыршыһын ташламағыҙ. Әгәр ағасты ҡырҡып, уның ғүмерен өҙгәнһегеҙ икән, исмаһам, файҙалы итеп ҡулланығыҙ - шыршы ыҫмалаһы ҡурылдайҙарҙы дауалай, ҡан тамырҙарын таҙарта, артриттарҙан һаҡлай.

**Памперстар һәм ҡатын-ҡыҙҙар прокладкаларының зыяны тураһында.** Памперстарҙы дошман уйлап тапҡан. Һарыҡтарҙы нисек стерилләгәндәр? Тауҙарҙа, әгәр һарыҡ көсһөҙ һәм уның нәҫел дауам итеүе кәрәкмәй икән, уның ҡаҫаһына йөнлө тоҡ кейҙергәндәр - йәй буйы ул шулай йөрөгән, тоҡомһоҙға әйләнгән һәм көҙөн уны һуйғандар. Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың прокладкаларында һәм тампондарында диоксин - универсаль ағыу бар.

**Тоҙ.** Йодаланған тоҙ - алйотлоҡ! Әгәр һеҙ йодаланған тоҙ ҡабын асһағыҙ, уны шунда уҡ ашап бөтөргә кәрәк, сөнки иртәгәһенә унда йод ҡалмай. Диңгеҙ тоҙон ҡулланығыҙ - уның составындағы 64 микроэлементтың 58-е беҙҙең менән уртаҡ.

**Һыу - мәғлүмәт йөрөтөүсе.** Доға уҡылған һыу, доға уҡылған ризыҡ энергетик параметрҙарҙы арттыра.

**Бауыр.** Экземаларҙы, барлыҡ тире ауырыуҙарын мотлаҡ бауыр аша дауаларға кәрәк. Бауырығыҙҙа проблема бар икән - йөн йомғаҡтарында йоҡлағыҙ. Улар үт ҡыуығына баҫым яһап, үтте яҡшыраҡ сығарасаҡ. Үттәге таштарҙы алдырырға түгел, ә иретергә кәрәк.

**Бармаҡ остарына массаж.** Бармаҡ остары беҙҙең меридиандарҙы бәйләп тора: сәтәкәй - йөрәк, исемһеҙ бармаҡ - эндокрин системаһы, урта бармаҡ - ҡан тамырҙары системаһы, һуҡ бармаҡ - нерв системаһы һәм йыуан эсәк, баш бармаҡ - үпкә-ҡурылдайҙар системаһы һәм мейе. Көнсығыш дауалаусылары организмдың бысраныуын бармаҡтарҙың һығылмалылығына ҡарап билдәләгән.

**Әйер.** Хатта ваннаға һалынған һаҙ әйеренең бәләкәй генә киҫәге лә кире энергетиканы алып ташлай.

**Кейемдәге төҫтәрҙең йоғонтоһо.** Ҡалҡан биҙендә проблема булһа - ҡыҙыл шарф бәйләгеҙ; ҡыуаныс етмәһә - ҡыҙғылт-һары йәки һары төҫтәге кейем ярҙам итер; тыныслыҡ кәрәкһә - зәңгәр, йәшел йәки күк төҫтәге кейем һайлағыҙ; ҡара кейем, бигерәк тә ҡара колготки киймәгеҙ - ул эндокрин системаһын боҙа; бала тапмаған ҡатын-ҡыҙҙар, салбарҙарығыҙҙы ташлағыҙ, әгәр салбарһыҙ йөрөй алмаһағыҙ, уның элмәген ҡабырғаға йәки артҡа ҡуйып тектерегеҙ. Элмәге алдан булған салбарҙар организмда ирҙәр гормонының артыҡ булыуына килтерә; иң энергетик кейем - итәге киңәйеп киткән кейем; көрән төҫтәге кейем киймәгеҙ, ул бауыр эшмәкәрлеген насарайта.

**Рәсем энергетикаһы.** Өйөгөҙҙәге һүрәттәрҙә нимә төшөрөлгәненә иғтибар итегеҙ. Һүрәттәге киңлек, тормош юлы кеүек, бер нәмәне лә ҡапларға тейеш түгел. Әгәр йылға төшөрөлһә, тағы ла яҡшыраҡ - ул барлыҡ насар нәмәне алып китә.

ИҪКӘРТЕҮ



# ТАҒЫ БЕР ВИРУС!

**Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы балалар коллективтары шарттарында кескәйҙәрҙең энтеровирус йоктороу хәүефе хаҡында иҫкәртә.**

Энтеровирус инфекцияһы - энтеровирустар тәьҫирендә барлыҡҡа килеүсе йоғошло ауырыуҙарҙың киҫкен төркөмө. Ул еңелсә биҙгәктән алып ауыр менингит хәленә тиклем барып етеүе ихтимал булған клиник төрҙәре менән билдәле. Вирус был сирҙең бик тиҙ таралыуына килтерә. Был сирҙең ниндәй төрө менән ауырыһа ла, балаңы мәктәпкә, йәйге лагерға йә балалар баҡсаһына йөрөтөргә һис тә ярамай. "Энтеровирустар тышҡы мөхиткә бик тотороҡло һәм ҡалдыҡ һыуҙар йә асыҡ һыу ятҡылыҡтарында, бассейндарҙа, көнкүреш әйберҙәрендә, аҙыҡ-түлектә (һөт, йәшелсә-емеш) оҙаҡ ваҡыт һаҡлана ала. 50 градус һәм унан юғарыраҡ температурала эшкәртеү, киптереү, ультрафиолет нурҙа ҡыҙҙырыу, 0,3 процентлы формальдегид, хлорлы (1 л иретмәгә 0,3-0,5г хлор) препараттары ярҙамында вирусты бик тиҙ зарарһыҙландырырға була",- тип белдерәләр ведомствола. Инкубация осоро уртаса 1-ҙән 10 көнгәсә тәшкил итә, иң оҙағы - 21 көн.

Был йоғошло сир менән күберәк балалар ауырый, уның сығанағы - сирле кеше йәки шул вирусты ҡуҙғытыусы. Ҡуҙғытҡыс һыу, аҙыҡ-түлек, көнкүреш-аралашыу юлдары менән йоға, шулай уҡ һауа-тамсы, туҙан аша ла бирелеүе ихтимал. Өҫкө тын юлдары һәм эсәк аша ла йоғоуы мөмкин. Йоғошло сир ҡайнатылмаған һыу һәм унан тундырылған боҙ, яҡшылап йыуылмаған емеш-еләк, йәшелсәләр, бысраҡ ҡулдар, уйынсыҡтар һәм тышҡы мөхиттәге энтеровирус менән зарараланған башҡа әйберҙәр аша йоғоуы бар.

Сир тән температураһының 38-40 градусҡа тиклем күтәрелеүе, хәлһеҙлек, баш ауыртыу, уҡшытыу, ҡоҫоу, яҡтылыҡты насар кисереү кеүек билдәләр менән башлана. Ҡайһы саҡ йүткереү, тымау күҙәтелә. Тәүге һәм икенсе көнөнә тән сабырта, ул айырыуса ҡулдарҙа, аяҡтарҙа, ауыҙ эсендә һәм уның тирәләй барлыҡҡа килә һәм 24-48 сәғәт, ә ҡайһы саҡ 8 көнгә тиклем һаҡлана һәм аҙаҡ эҙһеҙ юғала.

Сероз менингит айырыуса ҡурҡыныс. Уның билдәләре киҫкен башланып китә: биҙгәк тота, баш ауырта, ҡоҫоу, эс ауыртыу күҙәтелә. Бәләкәй балаларҙа ҡул-аяҡтар ҡалтырана, тән тартыша, йөтколок, телмәр боҙола. Был сирҙе төп иҫкәртеү саралары - гигиенаны теүәл үтәү.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ВАКЦИНА ЯРҘАМЫНДА ЕҢЕЛГӘН...

## ун өс ҡурҡыныс сир



### Сәсәк ауырыуы

Төп билдәһе - тәнгә сабыртма сыға. Сирҙән һауыға алғандар өләшләтә йәки тулыһынса һуҡырайған. Тирелә бик күп йөйҙәр ҡалған. Төрөнә ҡарап, уның менән ауырығандарҙың 90 проценты тиерлек вафат булған. Сир бер нисә мең йыл буйы кешелеккә хәүеф менән янаған. Прививка эшләтеп кенә унан тулыһынса ҡотолғандар. Урта быуатта унан йыл һайын 1,5 миллион кеше үлгән. 1796 йылда Эдвард Дженнер йоғошло сирҙе тик вакцина менән еңеү мөмкинлеген иҫбат итә алған. Совет медиктарының 1958 йылда план буйынса күпләп прививка эшләтеү тураһында тәкдименән һуң ғына сир сигенә. Сәсәк ауырыуына ҡаршы бөтә донъя көрәшә. Әйткәндәй, ул ваҡытта ла вакцина эшләтеүгә ҡаршы килеүселәр була.

### Холера йәки ваба сире

Киҫкен эсәк инфекцияһы, 20 процент осраҡта эс китә, ҡоҫтора. Ул һыу аша һәм сирле кеше менән бәйләнештә булғандан һуң йоға. Иң киң таралған һәм үлемесле боронғо сирҙәрҙең береһе. Бөтә донъя буйынса тиҫтәләгән миллион ғүмерҙе өҙгән. Рәсәйҙә 1848 йылда 1772 439 кеше ауырый, шунын 690 150-һе вафат була. Уны француз микробиологы Луи Пастер уйлап тапҡан бактериаль вакцина ярҙамында еңәләр. Ҡайһы берҙә бөгөн дә планетала ваба менән ауырыған осраҡтар теркәлә. Айырыуса ярлылыҡ өҫтөнлөк иткән илдәрҙә, стихиялы бәләҡаза ваҡытында был проблема көнүҙәк. Донъяла йыл һайын 3-тән 5 миллионға тиклем кеше ауырый, 100-ҙән ашыу кеше үлә. Сирҙе прививка ярҙамында ғына еңеп булыуы билдәле.

### Туберкулез

Был йоғошло ауырыу XX быуатҡа тиклем дауаланмай торған сир иҫәпләнгән. XIX быуатта унан Европаның һәр етенсе кешеһе вафат булған. Йыш ҡына ул үпкәне зарарлай. Уға ҡаршы вакцинаны 1921 йылда Пастер институтында уйлап табалар - ул яңы тыуған балаға һалған БЦЖ. Шулай уҡ антибиотиктар барлыҡҡа килеүе лә туберкулезды еңергә булышлыҡ итә. Үпкә сире әле булһа донъяла ҙур проблема булып тора. Хәҙер уның менән ауырыусыларҙың уртаса 87 проценты дауалана. Ғалимдар сирҙе тулыһынса юҡ итергә һәләтле яңы вакцина барлыҡҡа килеүенә өмөтләнә - әле унға яҡын яңы препарат һынау үтә.

### Чума (тағун сире)

Тағундың ике төрө бар. Бубон чумаһында лимфа төйөндәре, икенсеһендә үпкә эшлектән сыға. Тейешенсә дауаланмаған осраҡта биҙгәк тота, сепсис башлана, күп осраҡта үлемгә килтерә. "Ҡара үлем" тип аталған сирҙән 50 миллион тирәһе кеше гүр эйәһе булған.

Чуманан беренсе вакцинаны XIX быуат аҙағында ғалим Владимир Хавкин уйлап тапҡан. Препараттың тиҫтәләгән миллион дозаһы XX быуаттың 40-сы йылдарына тиклем бөтә донъяла ҡулланылған. Вакцина ауырыуҙы тулыһынса юҡ итмәһә лә, уны 2-5 тапҡырға, ә үлем осрағын 10 тапҡырға кәметкән.

### Дифтерия

Тамаҡ, ҡурылдай, тире һәм башҡа ағзаларҙы зарарлаусы киҫкен инфекция. Дифтерия таяҡсаһы бүлеп сығарған ағыулы токсин арҡаһында ауырыу яй үтә. Тын алыу юлында тығын барлыҡҡа килтереүе мөмкин. Уға ҡаршы вакцинация алымдарын Рәсәйҙә 1902 йылда врач Семен Дзержиковский уйлап таба. Иң тәүҙә ул үҙендә тәжрибә үткәрә. Күпләп прививка эшләткәндән һуң ғына ауырыу сигенә, хәҙер беҙҙең илдә АКДС, АДС һәм АДС-м вакциналары һәм уларҙың аналогтары ҡулланыла.

### Полиомиелит

Вирус эсәктәрҙе зарарлай, һирәк осраҡта ҡанға үтеп инеп, арҡа мейеһенә эләгә. Һөҙөмтәлә үлемгә дусар итә. XX быуат башында эпидемия ваҡытында Нью-Йоркта ике меңдән ашыу кеше яҡты донъя менән хушлаша. Башлыса уның менән балалар ауырый. Тәүге вакцинаны 1950 йылда ғалим Джонас Солк уйлап таба. Сеймал сифатында маймыл бөйөрө файҙаланыла. Ғалим Альберт Сабин тере вакцина уйлап сығара һәм уның штаммын СССР-ға бирә. 1959-1961 йылдарҙа халыҡ күпләп вакцинаға йәлеп ителгәс кенә ауырыу сигенә. Әлеге ваҡытта инфекция Африка һәм Азияның ҡайһы бер илдәрендә осрай.

### Ҡыҙылса

Һауа-тамсы юлы менән таралған сирҙе Measles вирусы барлыҡҡа килтерә. Уның менән башлыса балалар ауырый. Үлем яҡынса 1-20 процент тәшкил итә. Әлегә тиклем унан дауаланыу ысулы табылмаған. 1960 йылда АҠШ-та вакцина сығаралар. Ошо уҡ ваҡытта совет микробиологтары ла препарат уйлап таба. Ауырыу халыҡҡа күпләп прививка эшләгәндән һуң ғына юҡҡа сыҡты. Әлеге ваҡытта донъяла уға ҡаршы ҙур программа бойомға ашырыла. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, көн һайын Ер шарында вакцина һалдырмаған 400-ләгән бала үлә.

### Быума йүтәл

Киҫкен һауа-тамсы бактериаль инфекция тын юлын зарарлай, көслө йүткереү барлыҡҡа килә. Сәсәтмә 2 йәшкә тиклемге балалар өсөн хәүефле. Уға ҡаршы вакцина 1914 йылда АҠШ-та барлыҡҡа килә. Уның арҡаһында ауырыусылар һаны кәмей. Прививка эшләтеү Рәсәйҙә 1950 йылда ныҡ тарала. Тап шул сәбәпле бөгөн инфекцияны контролдә тоторға мөмкин. Вакцина яһатҡандар сирҙе еңелерәк үткәрә һәм бактерия йөрөтөүсе булараҡ прививка эшләтмәгәндәргә хәүефле булыуҙары ихтимал.

### Тиф

Тиф - дөйөмләштерелгән исем. Ул сир кешенең психикаһы боҙолоуы фонында биҙгәк һәм көслө ағыуланыуы менән барған инфекцион ауырыуҙарҙы берләштерә. 1768-1774 йылдарҙағы төрөк һуғышында сабыртмалы тифтан яу яланында һәләк булыусыларға ҡарағанда ла күберәк кеше үлгән. 1917-1921 йылдарҙа Рәсәйҙә 3 миллиондан ашыу кешенең ғүмерен өҙгән. 1942 йылда СССР-ҙа уға ҡаршы вакцина уйлап табыла, ә йоғошло сирҙе антибиотиктар ғына тулыһынса еңергә ярҙам итә. Тиф менән ауырыусылар әле лә Төньяҡ Африкала, Көньяҡ-көнсығыш Азияла осрай. Шуға күрә ошо илдәргә барырға йыйынған туристарға прививка эшләтеү һәм гигиена ҡағиҙәләрен үтәү талап ителә.

### Тартышыу, һын ҡатыу ауырыуы (столбняк)

Нервы системаһын зарарлаусы киҫкен йоғошло сир. Уның төп билдәһе - тартышыу, ҡорошҡаҡ тотоу. Столбняк таяҡсаһы тупраҡта "йәшәй", улар организмға яра аша эләгә. Уны планлы вакцинация менән генә иҫкәртергә мөмкин.

### Менингококк инфекцияһы

Баш һәм арҡа мейеһен зарарлаған киҫкен йоғошло сир. Һауа-тамсы юлы менән күсә. Ваҡытында дауаланған осраҡта ла йоктороусыларҙың 30 проценты тирәһе вафат була. Уға ҡаршы тәүге прививканы 1960 йылда Америка врачтары уйлап таба. Вакцинация - әлеге көндә лә унан һаҡланыуҙың берҙән-бер сараһы.

### В гепатиты

Бауырҙы зарарлаған йоғошло сир. Кеше организмы вирусты еңергә һәләтле, әммә ҡайһы бер осраҡта ул хроник сиргә әйләнеүсән. Ауырыу бик оҙаҡ йылдар бауырҙы зарарлап, һиҙелмәй генә дауам итергә мөмкин. Йыл һайын В гепатиты вирусынан барлыҡҡа килгән бауыр ауырыуынан донъяла 600 меңдән ашыу кеше вафат була. Уға ҡаршы көрәштә иң яҡшы сара - вакцинация. Беренсе вакцинаны 1981 йылда уйлап табалар. 1998 йылдан ул прививкаларҙың милли календарына индерелә.

### Ҡотороҡ

Вирус ауырыу йәнлек тешләгәндән һуң күсә. Ул башлыса нервы күҙәнәктәрен зарарлай һәм 20-90 көндән һуң һыуҙан ҡурҡыу, галлюцинация һәм фалиж күҙәтелә, үлем менән тамамлана. 1885 йылда Луи Пастер сирле малайға вакцина һала һәм ул ҡотороҡ ауырыуы менән сирләгән хайуан тешләгәндән һуң прививка ярҙамында иммунитетты нығытыу мөмкинлеген асыҡлай. Был практиканы әле булһа ҡулланалар. Рәсәйҙә ҡотороҡҡа ҡаршы вакцинаны 1886 йылдан алып эшләйҙәр.

***✓ - Амур тиһең инде. Беҙгә тик амурҙар менән генә һуғышырға ҡалғайны! Туҡтатығыҙ ҡан ҡойоштоо! Тәүҙә белешегеҙ: ул амур тигәнегеҙ Хоҙай Тәғәләнең беҙгә ебәрелгән берәр эше түгелме икән?***






Француздарҙың еңеүе Бонапарттың аҡылы, хәрби оҫталығы, һалдат һәм офицерҙарының оҫта һуғышсы булыуы менән генә аңлатылмай. Аустерлиц яуы ике ғәскәрҙең генә түгел, ике тормош ҡоролошоның да һуғышы була. Республика төҙөгән революцион Франция быуаттар буйы һөрһөгән король һәм батша ҡулы аҫтында сереп, тарҡалып бөтөп барған ҡоролош менән дә һуғыша ине. Аустерлицты өс император һуғышы тип тә атанылар. Быныһы ла дөрөҫ ине. Нәҫелендә йүнле тәрбиә лә күрмәгән, тамағы асҡа туймаған, бары тик үҙ тырышлығы менән император булып киткән Бонапарт йөҙәр йылдар буйына балда-майҙа йөҙгән, ниндәй теләйһең, шундай белем алған, донъяның һөҙөгөн генә һемереп йәшәгән король менән батша балаларын - императорҙарҙы ҡыйрата һуҡты.

Аустерлицтағы еңеүҙе Наполеон үҙенсә файҙаланды. Пруссияла өс республика барлыҡҡа килде, уларҙың башына германдар ҡуйыла. Яңы барлыҡҡа килгән королдәргә ҡатын менән ир итеп Наполеондың ҡатынының балалары бирелә. Италия тағы ла киңәйтелә. Неаполь яғы айырым короллеккә әүерелә. Король итеп Бонапарттың өлкәне Жозеф ултыртыла, уға полиция башлығы итеп Наполеон үҙенең йәшлек дуҫы Саличеттиҙы ҡуя. Башҡа вазифаларға шулай уҡ Бонапарттың яҡындары ултыра. Ошо рәүешле Бонапарт төрлө яҡлап Францияның бөйөклөгөн нығыта, ул-был була ҡалһа тип, ҡулы еткән һәммә урынға туғандарын, дуҫ-ишен ҡуя. Былар ауыр мәлдә Наполеонға ҡаршы сыҡмаясаҡ бит инде.

Аустерлиц яуында еңелгән союздаштар менән ни эшләргә һуң? Англия менән бер ваҡытта ла, бер ниндәй шартта ла яҡынайыу булмаясаҡ, ти Бонапарт. Австрияны ул төрлөсә тураҡлай. Ҙур дәүләттән арлы-бирле ярсыҡтар ғына тороп ҡала. Пруссияны ла бүлгеләп бөтөрә Бонапарт. Киләсәктә Францияға ҡаршы төшмәҫлек итергә самалай. Рәсәйгә ҡаршы ла сара күрә ул. Ләкин башҡалар менән сағыштырғанда, сүп кенә. Диңгеҙҙә Рәсәйҙең бер нисә карабын ҡулға алалар, бер аҙ хәрби хеҙмәткәр әсир рәүешендә ҡала. Рәсәйҙең императоры Александр Франция-Рәсәй һөйләшеүҙәрендә Франция менән солох килешеүе төҙөгәндә яҡшы булыр ине, тигән теләк белдерә. Наполеон да шул уҡ теләктә. Ул Рәсәй менән ныҡ һәм оҙаҡҡа китерлек солох төҙөү яҡлы. Аустерлицтан һуң Франция-Пруссия Рәсәй килешеүенән ул күберәк Рәсәй менән кәрәк булыр, тип уйлай. Александр 1806 йылдың башында Парижға Петр Яковлевич Убри етәкселегендә делегация килешеү хаҡында һөйләшергә килә. Француз яғы был башланғысты яҡшы билдә, тип ҡаршылай һәм һөйләшеүҙәр башлана. Оҙаҡ һөйләшәләр улар, бик күп бәхәсле мәсьәләләрҙе сисәләр һәм 20 июлдә килешеүгә ҡул ҡуялар. Хәҙер уны илдәр башлығы тәҫтиҡларға тейеш.

Әммә был хәлгә тиклем император Александр 1 Пруссия менән йәшерен һөйләшеүҙәр алып барған була. 1 һәм 24 июлдә ҡул ҡуйылған йәшерен килешеү буйынса Пруссия менән Рәсәй Францияға ҡаршы һуғышҡа инергә булалар. Август айында Александр 1 Дәүләт советының ябыҡ ултырышын үткәрә һәм унда тикшереүгә 20 июлдә Убри ҡул ҡуйған килешеүҙе тикшереү була. Кутузов, Куракин, Румянцев килешеүҙе раҫларға кәрәк, бының менән беҙ Рәсәйҙе бүтән һуғыштан ҡотҡарабыҙ, тиҙәр. Әммә Будберг һәм башҡа министрҙар ҡаршы сыға. Был кәңәшмә үҙе лә исем өсөн генә уҙғарыла. Пруссия менән төҙөлгән килешеү уның кәрәген ҡалдырмай.

Наполеон Рәсәй менән ҡул ҡуйылған килешеүгә ҙур әһәмиәт бирә һәм Александр 1 уны раҫлар тип көтә. Әммә 3 сентябрҙә Александрҙың раҫлауҙан баш тартыуын ишетә һәм шунда уҡ Пруссияла ҡалдырылған ғәскәрҙе ҡайтарыу тураһындағы фарманды туҡтата. Шул уҡ ваҡытта Франция менән солох тураһында килешеүгә ҡул ҡуйған Пруссия унан баш тарта һәм Пруссия, Англия, Рәсәй һәм Швеция Францияға ҡаршы яңы килешеү төҙөй. 2 октябрҙә Пруссия Францияға ғәскәрен Рейндың теге яғына сығарыуҙы һәм үҙенең ерен француздарҙан таҙартыуҙы талап итә. Юҡһа, ғәскәрҙең юҡ ителәсәге менән янай.

Наполеон быларҙың янауҙан эшкә күсерен көтөп тормай, үҙе тегеләргә ҡаршы китә. Француз ғәскәре сафтарында уның һөжүм башлау тураһындағы фарман иғлан ителгән мәлдә, ул үҙе Бамбергта ҡораллы көстөң башында тора. Бер сәғәт тә ваҡытты һуҙмайынса, ғәскәрҙе дошманға ҡаршы алып та китә.

Прус әрмеһе йөҙ илле мең тирәһе кешенән тороп, ике өлөшкә бүленгән була. Төп көстө король Фридрих үҙе етәкләй, икенсеһен кенәз. 10 октябрҙән башлап ғәскәрҙәр арлы- бирле бәрелешә, ләкин оло яу 14-дә була. Иена ҡалаһы янына Зале йылғаһы буйына Наполеондың ғәскәре томанлы төндә килеп урынлаша. Үҙенең ҡаршыһында прустарҙың төп көсө тупланған икән, тип уйлай Бонапарт. Төнө буйына сафтарҙы ҙур һуғышҡа әҙерләй ул. Ә ҡаршы яҡта прусс кенәзе француздарҙың бәләкәй генә көсө тупланған, тип белә һәм йүнләп һуғышҡа әҙерләнеп тә тормай, аҙ ғына француздыы еңел генә еңеренә ышана. Иртәнсәк томан таралғас, ҡараһа, ҡаршыһында бик ҙур әрме һөжүмгә килә. Французлар прустарҙы армы-тормо итә. Был Иена яуы була.

Ауэрштедт тигән ерҙә прустарҙың төп көсө француз әрмеһенең икенсе өлөшө менән осраша. Француздарҙың яуҙы оҫта ойоштороуы һәм батырлығы арҡаһында үҙҙәренән ике тапҡырға күберәк булған прусс ғәскәрен туҙҙыралар. Шулай итеп, Наполеон бер көндә ике майҙанда прустарҙың маҡталған армияһын юҡ итә, уларҙың ҡырҡ биш мең кешеһе үлеп, йәрәхәтләнеп, әсиргә төшөп ҡала. Ҡалғаны ҡасып, таралып бөтә.

Француз ғәскәре Веймар ҡалаһына инә. Ундағы герцог, үҙенең һанаттары менән ҡаланан сығып ҡаса. Берҙән-бер министр Иоганн Вольфганг Гете ғына өйөндә ҡала. Уның бөйөк шағир икәнен белгән француздар Гетеға һәр төрлө хөрмәт һәм ихтирам билдәһе күрһәтә. Күңеле тулған Гете яугирҙарға рәхмәт әйтә һәм 19 октябрҙә кәләше менән сиркәүгә барып никах үткәрә. Быға са 20 йыл буйына Веймар герцогы уға ошо никахты теркәргә рөхсәт бирмәй килгән була.

Наполеон ғәскәре Веймарҙан һуң тура Берлинға китә. Оло Пруссия ерендә бер генә тапҡыр ҙа йүнле ҡаршылыҡ күрһәтеүсе булмай. Берлин урамдарын да ғәскәр "Марсельеза"ны йырлап, еңеүсе булып уҙа.

Бонапарт Пруссияны тамам тубыҡландырыр өсөн бик ҙур - йөҙ миллион франк күләмендә контрибуция һала. Пруссияның союздаштары алтмыш миллион түләргә тейеш булалар. Берлинда ҡул ҡуйылған Бонапарт декреттары буйынса, Пруссияның союздаштары Англия караптары өсөн бөтөн диңгеҙ порттарын да ябырға тейеш була. Ошо рәүешле ул Англияны бар донъянан ситләтмәксе итә.

Тағы бер мөһим аҙымдарының береһе итеп Наполеон Рәсәй менән килешеү төҙөүҙе һанай. Әммә Александр 1 бындай аҙым яһамай. Пруссияға ярҙамға сыҡҡан йөҙ илле меңлек урыҫ әрмеһе Польша ерендә тора. Наполеон был көстө уның юлында ҡаршылар өсөн Польшаға китә. Һыуыҡ ҡышҡы көн ҡапыл йылынып китә, аҙ ғына булған ҡар иреп бөтә, аяҡ аҫты һаҙға, һауа ҡалтыратыр ыжғырға әйләнә. Шундай көндө Пултуск тигән ерҙә Нарев һыуы буйында урыҫ ғәскәре менән беренсе бәрелеш була. Аяҡ аҫты баҫып торғоһоҙ тайғаҡ, өҫтән ямғыр ҡатыш ҡар яуа. Шул шарттарҙа ике яҡ та бер-береһен аямай һуғыша.

## Төньяҡ амурҙары

– Егеттәр, минең арттан! - тип һөрәнләне лә Буранғол һыбайлыларҙың иң алдында барған көйө, атын ҡапыл борҙо һәм кире сабырға тотондо. Ул нимә эшләй - шуны ҡабатлап өйрәнгән яугирҙар ҙа аттарын бора һалдылар һәм түрә артынан ҡалмаҫҡа тырыштылар. Бер аҙ юрттырып барғас, Буранғол ҡолап китте, һул аяғы өҙәңгенән ысҡынды һәм ат аша һәленеп төштө. Артынан килгән һуғышсылар "аһ" итте: түрә әллә үлде, әллә яраланды инде. Буранғолдың аты теҙгенден бушағанын тойғас, йәйланы. Ике яугир килә һалып, Буранғолдо күтәреп алмаҡсы булғайны ла, был ҡысҡырҙы:

- Теймәгеҙ миңә! Ҡыуығыҙ аттарығыҙҙы, дошман һеҙҙе ҡаса икән тип белһен!

Башҡорт яугирҙарының һәр хәрәкәтен күҙәтеп торған француздарҙың етәксеһе ҡысҡырып әмер бирҙе:

- Арттарынан! Минән ҡалмағыҙ! Дошман беҙҙән ҡурҡып ҡасты, баҫтырып барып кәрәген бирәбеҙ!

Туғайҙа йәшенеп торған француз һыбайлылары быларҙың артынан төштө һәм шарт та шорт мылтыҡтан ата-ата башҡорттарҙы эҙәрлекләргә тотондо. Француз һыбайлылары күп ине, ҡыуып етһәләр, Буранғолдоң егеттәренән һыуын һыҡҡан еп кеүек кенә итеп ҡалдыра инеләр инде. Әммә тиҙ генә тотторманы тегеләр ҙә. Буранғол бер аҙҙан кире турайып эйәргә ултырҙы һәм атын нығыраҡ ҡыуҙы. Бының нимә эшләгәнен ҡыуа килеүселәр аңлап бөтмәне, тик баҫтыра ғына бирҙеләр. Бер нисә саҡрымдай ер киткәс, ҡасып барыусылар ағаслыҡҡа инде лә китте. Урман аралы булһа ла, күмәк һыбайлыны һыйҙырырлыҡ түгел. Алдағылар үҫентеләр араһына ҡасты ла ул, уларҙы эҙәрлекләгән күмәк французға ни эшләргә һуң? Быларҙың аттары үрәпсеп кешнәшә, өҫтөндәгеләр ҡысҡырыша, һүгенә башланы, ҡайһы береһе аттан йығылып төштө. Был ғына ла аҙ, ағас араһынан йәйәү кешеләр килеп сыҡты ла, француздарға терәп тигәндәй, йәйәләрен киреп уҡ атырға тотондо. Уҡтан йығылған кешеләр менән аттар шарылдашырға, кемдәрелер мылтыҡтан, пистолеттан атырға тотондо. Китте мәшхәр, китте үле, яралы әҙәм менән ат бутҡаһы.

Арттан килгән һыбайлы француздар үҙҙәренең ҡапҡанға ҡапҡанын аңлағас, аттарын һәйһәт кенә кире бороп, килгән яғына кире сабырға тотондо. Эштең шулай булырын белгән Буранғол Ҡыуатов менән Айсыуаҡ Үҙебайыв полктары йәшеренеп торған урындарынан атылып килеп сыҡты ла ҡасыусыларҙы эҙәрлекләргә тотондо. Атта сабып барған көйө былар йәйәләрен киреп, ҡасыусыларға уҡ сойорғоторға тотондо. Тәпәшәк кенә аттарға менгән кешеләр бейек тороҡло, яҡшы тәрбиәләнгән аттарҙы һис ҡыуып етерлек түгел ине. Әммә арттағыларға быларҙы баҫтырып тороуҙың хәжәте лә булмай сыҡты. Арттан атылған уҡтар әле француз яугирын, әле улар менгән атты тәгәрәтә барҙы. Бая башҡорттарҙы ҡыуа башлаған ергә кире барып еткәнсе, мылтыҡлы һыбайлыларҙың бик аҙы ғына ҡалғайны.

Наполеон Бонапарт был юлы үҙенең күҙәтеү урынын тап шул Һыбайлылар полкының артына ғына ҡорҙорғайны. Башҡорттарҙың үҙ ғәскәренә табан һөжүмгә килеп тә, бер генә мәртәбә лә атмайынса, боролоп ҡасҡанын, уларҙы француздарҙың ҡыуа төшкәне һәм бына әле аҙ ғына ҡалған француздарҙың бая ҡасып киткән һыбайлыларҙың баҫтырыуында кире килгәнен ҡарап торҙо. Әммә бер ни ҙә аңламаны. Аптырағас, янындағы бер һанатынан һораны:

- Кемдәр былар?

- Белмәйем, тәҡсир. Амурҙарға оҡшаған уҡ менән ян тотҡандар, үҙҙәре кеше үлтерә...

- Амур тиһең инде. Беҙгә тик амурҙар менән генә һуғышырға ҡалғайны! Туҡтатығыҙ ҡан ҡойоштоо! Тәүҙә белешегеҙ: ул амур тигәнегеҙ Хоҙай Тәғәләнең беҙгә ебәрелгән берәр эше түгелме икән?

- Хәҙер белешермен, тәҡсир!

Наполеондың ҡушҡанын ярты көн самаһы уҙғас ҡына үтәй алдылар. Теге һанаты килеп:

- Тәҡсир, амурҙарҙың кем икәнлеген асыҡланыҡ,- тине.

- Кем инде ул?

- Башҡорттар.

- Кем-кем?

**(Дауамы. Башы 31-33-сө һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЫҢҒАЙ ФЕКЕР...

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан экспертар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

■ Ҡайһы бер минералдар һәм кислоталар йоҡоно яҡшырта ала, әммә иң тәүҙә дөрөҫ туҡланырға һәм әүҙем тормош алып барырға кәрәк, ти Америка ғалимдары. Йоҡлар алдынан бер стакан һөт эсеп, бер ус сәтләүек ашаһаң, яҡшы йоҡлайһың икән. Сәтләүектәрҙән бразилия сәтләүегенә өҫтөнлөк бирегеҙ, ул калий менән селенға бай, ә һөттә кальций бар. Насар йоҡлаусылар туҡланыу рационынан майлы ризыҡтарҙы, бигерәк тә, аҡ майҙы һәм сырҙы алып ташларға тейеш.

■ Квисленд һәм Калифорния университеты ғалимдары туберкулез булдырыусы бактериялар үҫешен туҡтатыу ысулын тапҡан. Тикшеренеүселәр төркөмө холестерин берләшмәләренең холестерин бактерияларына йоғонтоһон тикшергән. Холестерин, билдәле булыуынса, бындай микроорганизмдарҙың ауырыу тыуҙырыу һәләтенә тәьҫир итә. Эксперименттар күрһәтеүенсә, әгәр ҙә был бактерияға гены үҙгәртелгән холестерин бирһәң, ул артабан үҫә алмаясаҡ. Әммә әлегә ғалимдар бының сәбәбен асыҡлай алмаған. Һәр хәлдә, был асыш хәүефле инфекция менән көрәшеүҙә ярҙам итәсәк. Туберкулез йоғошло сир, һәр 21 секунд һайын бер кеше туберкулездан үлә.

■ Кишер - бик файҙалы йәшелсә, ти ғалимдар. Уның составындағы каротин хатта бешергәндән һуң да һаҡлана. Каротин сығанағы булыуҙан тыш, ул организмдан артыҡ һыуҙарҙы сығара, һыу-тоҙ әйләнешен яҡшырта. Кишерҙе салаттарға, пудинг, суфлеға өҫтәп ашау файҙалы. Шулай уҡ өлкән кеше өсөн тәүлегенә 200 мл кишер һуты эсеү кәрәк.

■ Быға тиклем күпме йоҡларға, тип бәхәсләшә инек. Бына Британия университеты ғалимдары ҡайҙа йоҡлау яҡшыраҡ икәнен тикшереп ҡараған. Бының өсөн экспертар махсус һораулама төҙөгән һәм шундай һығымтаға килгән. Баҡтиһәң, ял итеү өсөн диванда йә карауаттың һул яҡ өлөшө яҡшыраҡ икән. Һул яҡта йоҡлаусылар үҙҙәрен иртән яҡшыраҡ тойған, көнө буйы юғары кәйефтә йөрөгән.

■ Күпме генә күнекмәләр яһама, мускулдарҙы йәш килеш һаҡлап булмай, тип белдерә Лафборо университеты профессоры Джэми Тиммонс. Уның фекере буйынса, даими күнекмәләр кешегә мускулдарҙың көсһеҙләнеү процесын туҡтатырға мөмкинлек бирмәй, сөнки бының сәбәбе физик әүҙемлек етешмәүҙә түгел. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың 25 процентына физик күнекмәләр бөтөнләй тәьҫир итмәүе асыҡланған. Ғалим әйтеүенсә, ҡайһы берәүҙәргә күберәк йоҡлау һәм дөрөҫ туҡланып, артыҡ калориялар йыймау мускулдарҙы формала тотоуҙың иң яҡы һәм дөрөҫ юлы булып ҡала.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

**Элек беҙҙең өйгә олораҡ кешеләр килһә, сәй артында ниндәйҙер ҡыҙыҡлы ла, серле лә, ғәжәп тә хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләшеп ултырырҙар ине. Һүҙ йәйләүҙәге тормош, ниндәйҙер билдәһеҙ йәнлектәр, күҙгә күренмәгән көслө йән эйәһе, уға: "Беҙ һиңә зыян килтермәйбеҙ, һин дә беҙгә теймә", - тип ялбарыуҙары тураһында барыр ине. Һуңынан: "Донъя - даръя, уның төбө юҡ, осона ла сыға алмаҫһың", - тип фекерҙәрен ослап ҡуйыр булдылар. Ул күҙгә күренмәгән йән эйәһен төрлөсә итеп күҙ алдына килтереп ҡарап, ҡурҡышымдан шым ғына берәйһенең эргәһенә һыйына торғайным. Эйе, донъя ғәжәп матур ҙа, серле ул. Әҙәм балалары берәй ваҡыт уның серҙәренә төшөнөп бөтә алырмы икән? Бөгөн һүҙем "Бәйғәмбәрҙәр тарихы" китабында, Изге Ҡөрьәнебеҙҙә лә телгә алынған йән эйәләре - йыландар, улар тураһында йыйған хәтирәләр хаҡында булыр.**

# ЙЫЛАН ИТЕ АШАҒАН...



*Бөрйән районында йәшәгән һеңлем Ҡотлобаева Көнһылыу Зәки ҡыҙы үҙенең йыландар тураһындағы хәтирәләре, мәрхүмә өләсәһе Хәснитдинова Хәкимә Хәйрулла ҡыҙының иҫтәлектәре менән уртаҡлаша:* 2-3 йәштәр булғандыр. Стенаға һул ҡырымды ҡуйып, урындыҡта уйнап ултырам. Урындыҡ менән стена араһында бураҙна һымаҡ ҡалдырылған урын була торғайны. Балаҫ ҡаплап торғанлыҡтан, эсе күренмәй. Уйнауымдан туҡтамай ғына, нишләптер, шул бураҙнаға ҡулымды тыҡтым. Ә унда ниндәйҙер һалҡын, шыма, йомшаҡ, әммә тығыҙ һәм һығылмалы әйбер ята ине. Бирелеп китеп уйнағанмындыр, сөнки нимә икән, тип ҡарамайым. Ҡулым менән тегене баҫҡылайым, бармаҡтарым еткәнсә ҡыҫып тотам да ебәрәм. Бер мәл теге һалҡын әйбер ҡулым аҫтында шыуа башланы. Нимә икән тип ҡараһам, бураҙнаның буйынан-буйына һуҙылып, йылан шыуыша ине. Әсе тауыш менән "йылан" тип аҡырып, ни арала урындыҡтан һикереп төшкәнмендер, тышта йөрөгән өләсәйем атылып килеп инде .Туҡтап та тормайынса, аштауға йомолоп, ҡатыҡ һөҫөп алды ла мөйөшкә инеп барған йылан артына һипте. "Йылан артынан аҡ һибеп ҡалырға кәрәк", - тигән һүҙен мәрхүм булғанынса доға урынына ҡабатланы.

Беҙ туҙбаш йыландар мыжғып торған урында йәшәнек. Уларҙың үҙ тормошо, беҙҙең үҙебеҙҙеке. Әммә сикте улар ҡуя ине. Ниңәләр беҙҙең аласыҡты, ундағы һыу бағын ныҡ яраттылар. Таң менән, ҡараңғылы-яҡтылы, иң беренсе һыу алыр кәрәк бит инде. Ә унда йыуандан йыуан йылан бер ҡапҡас булып уралып ята. Иң тәүҙә уны шунан төшөрөргә кәрәк, ә ул ашыҡмай. Тәүҙә башын ҡалҡытып, ынтыла биреп телен күрһәтә. Шунан ғына көүҙәһе үҙ айыы менән, бөҫөн төшөрмәй генә, мөйөшкә ҡарай аға башлай.

Икенсе яратҡан урындары ҡашығаяҡ һаҡланған шкаф. Шкафтың ишеген нисек асаларҙыр, әммә уртала өйөлөп ҡуйылған сыняҡтарҙы ҡосаҡлап, тағын береһе ята... Көн эсендә лә аласыҡ һил ҡалдыммы, береһе инеп ята ине. Һарай артындағы өйөлгән тиреҫ - туҙбаштарҙың төп төйәге. Бала-сағаларынан алып йыуандарына тиклем шунда ҡайнаша. Ә шул аласыҡҡа ингәндәре гелән йыуандан йыуандары ине. Был үҙенә күрә өҫтөнлөк инеме икән инде уларҙа?

Өләсәйемдең йыландар артынан ҡатыҡ һибеп ҡалыуының үҙ тарихы бар. Тол ҡатындар колхоздың иң ныҡ тотонолған хеҙмәтселәре булған, шуға ла сәнгелдәктән төшөү менән донъя көтөү әсәйем елкәһенә төшкән. Шулай бер ваҡыт әсәйем һыйыр һауырға инәйем тиһә, һарай ишеген инәләп йыуан йылан аҫылынып торған. Әсәйемдә һанға һуҡмаганмы, торған еренән китмәгән. Ахыры әсәйем ярҙамға күрше малайҙы саҡыра. Уныһы күп уйлап тормай, теге йыланды тукмап үлтерә. Әммә таң атыуға һарай көл-күмергә әйләнгән була. Малдарҙан өйҙәге быҙау менән һарыҡ бәрәстәре генә тороп ҡала. "Һарыҡтарҙың эстәре ярылып ята ине, бысаҡһыҙ үлгәс, ите харам бит инде. Шулай булһа ла ас ғаиләләр шул һарыҡтарҙы алып киттеләр", - тип һөйләне өләсәйем. Был хәл ил хужалары бик иҫкә алғыһы килмәгән 1933-1934 аслыҡ йылында була.

Йыланға бәйле хәтирәләре күп ине өләсәйемдең. Уларҙың олатайым ҡайҙандыр алып ҡайтҡан ҡыҙыл йылан мөгөҙө булған. Ул аҙыҡ-түлек һаҡланған айырым келәттә ятҡан.

Граждандар һуғышы мәлендә аҡтар килһә лә, ҡыҙылдар килһә лә, командирҙарының туҡтау урыны беҙҙең өйҙә булған, сөнки торған еребеҙ ауыл уртаһында, тау битләүендә. Ауылдың ике осо ла күҙ алдында ғына күренеп торған. Ауылдың ҡулдан-ҡулға күскән бер мәлендә ҡыҙылдар төн буйы ауылды ҡотороноп талап сыҡҡан. "Ә ҡыҙылдар аҡтарҙан да әсемәгерәк ине", - тип һөйләр ине өләсәйем. Үҙҙәренә ҡағылһалар, тип, олатай мендәр аҫтына бысаҡ һалып ятҡан. Таңға ҡыҙылдар юҡ булған. Әммә өләсәйемдәрҙең келәтен талап киткәндәр. Шунда теге йылан мөгөҙө лә юҡҡа сыҡҡан. Ул мөгөҙҙө кемебеҙ генә күпме генә эҙләп ҡарамағандыр инде, сөнки өләсәйем шул мөгөҙ менән донъябыҙҙың ҡото-бәрәкәте китте, тип уфтаныр ине.

Йыландар ояһы һәм уларҙың батшаһы аҡ йылан тураһында өләсәйем һөйләгәндәрҙән тағын бер иҫтәлек. Һүҙмәһүҙ бәйән итә алмаһам да, шул саҡта күҙ алдыма килтергәнемде яҙам (кем нимә һөйләһә лә, һәр саҡ шул ваҡиғаны күҙ алдыма килтереп хәтерләй торған һәләтем бар). "Ҡап-ҡара күүүп йыландар уралышып мыжғып яталар. Уртаһында башында тажы булған аҡ йылан сурайып ултырғанын үҙем күрҙем", - тип һөйләне өләсәйем. Ауылдаштар уны туғры, тура, гәзәл кеше тип хөрмәт итте.

Беҙҙең ултырған урын - Аратау бите, ә уның өҫтөндә яҫы түбәһе бар. Һуғышҡа тиклем был тау тоташ урман булған. Түбәнән сылтырап шишмә ағып ятҡан. Ҡыҫҡаһы, йыландар йәшәр өсөн хөрриәт урын инде. Ә олатайым йәйҙәрен таңғы намаҙҙы шул түбәлә уҡыған. Бер намаҙ уҡығанында сәжҙәлә ултырған көйө йоҡо баҫҡан. Шунда нығ ҡына һыу эскеһе килеп киткән. Әсәм тигәнендә генә күҙен аса, алдында ауыҙына инергә әҙер генә торған ҡара йыланды күргән. Олатайым доға уҡый һалып, йыландың үҙен арбап өлгөргән.

Элек сабынлыҡтар етмәй ине, шуға атайым июль аҙағында ҡурсаулыҡтан ялан һорап алыр булды. Шулай итеп, Ҡобағышта бесән эшләйбеҙ. Икенсе класта ғына уҡыйым, шулай ҙа бесән йыйырға алып йөрөйҙәр. Һаҙматыраҡ ер инеме икән, йыландары мыжғып тора, ә үләне хәтәр бейек инде. Бакуйҙары минең бейеклектә була ла ҡуя. Бакуй аҫты тулы теге йыландар ята. Өҫтәренә баҫмаҫ өсөн, йыйылмаған бакуй аша ырғып сығам. Сабынлыҡ алыҫ булғас, бесәндә ятып эшләйбеҙ. Иртәнге һыуһында бесән сабалар, йыя торғанына ысыҡ кипкәс кенә тотонабыҙ, шуға ололар бесән сапҡанда мин ҡыуыштә йоҡлап ҡалам. Бер шулай йоҡомдан кемдер ҡапыл һөйрәп торғоҙҙо.Ҡараһам, Зөһрә апайым. "Саҡ өлгөрҙөм", - ти. Ни йомош менәндер ҡыуышҡа килһә, минең ауыҙ асылған, ә алдымда йылан торған. Ниндәйҙер секундта апайым мине тартып алып өлгөргән.

Тағын бер тарих: ауылдан берәү аҡ йыланды үлтергән. Өләсәйем һөйләүенсә, бындай осраҡта йыландар үс алмай ҡалмай. Ул кешенең урманда дегет ҡайнатыу баҙы булған. Ул шунда ҡыуыш ҡороп ятып, дегет ҡыуған. Ғәжәттә, айыу килмәһен өсөн ҡыуыш алдында кистән үк таңға ҡәҙәр янырлыҡ итеп сей ҡайындан усаҡ эшләйҙәр. Был кеше усаҡ алдында ултырғанда, янына ят һалдат килгән. Күҙ асып йомған арала һалдат атын дегет баҙына тыҡҡан. Ҡото алыныуҙан аҡылдан яҙып, ул кеше аҡыра-аҡыра ауылға ҡайтып кергән. Туғандары ярҙам һорап, олатайымдың атаһына килгән. Ә ул өс йәшенән һуҡыр ҡалған, әммә көслө дини белеме булған суфый, ҡөрьән-хафиз һәм табип булған. Тегe кешене лә дауалап һауыҡтырған. Әммә ирҙең сире ваҡыт-ваҡыт ҡабатланып алған.

*✓ Йондоҙҙарға ҡарап, йылдың нисек килерен билдәләгән, тәбиғәт менән килешеп йәшәгән, һәр ауырыуҙың име бар икәнен белгән, бар белемен быуындан-быуынға тапшыра барған халыҡ наҙан була торғаны бармы инде!*



Беҙ үҙебеҙ күрмәгән донъя барлығын аңлайбыҙ. Әммә күргәненебеҙҙе аңлата алмайбыҙ, мистика тиеүҙән уҙа алмайбыҙ. Бәйән итеүсеһе лә мейеһе шылған, аҡылы теүәл булмағанырак итеп ҡабул ителә. Элек һыуҙы йылғанан ташый инек. Эсергә тигәнен иртә менән, һыу таҙа саҡта алып ҡалабыҙ. Йылға алыҫ ҡына, һыу ҙа күп кәрәк. Эштән йәм табыр өсөнмө, һыуҙы тирә-яҡты байҡай-байҡай, йырлай-йырлай өтә баҫып ташыйым. Аяҡ аҫтына ҡарау бөтөнләй юҡ. Шулай бер китеп барһам, йырым ҡапыл ғына туктаны, ә уң аяғым күтәрелгән ергә төшмәне лә ҡуйҙы. Шул һында торған килеш аяҡ аҫтына ҡараһам, шаҡ ҡаттым. Тапҡыр ғына ҡара йылан үтеп бара ине... Нимә туктатты икән мине, әле булһа ла аңламайым.

Апаруҡ бала-саға Аҫҡарһаҡ йылғаһы Нөгөшкә ҡойған әрәмәлә муйыл йыйа инек. Муйыл башында ултырған күрше малайы ҡапыл "Йылан" тип ҡысҡырып ебәрҙе. Ҡараһаҡ, ул ултырған муйылдың олонона уралып ҡара йылан тора ине. Олораҡтар таяҡтар менән ҡурҡытып, һыҡҡылап, теге йыланды ергә төшөрҙөләр ҙә асыҡ урынға ҡыуып сығарҙылар. Кем башлағандыр инде, күмәкләп уратып алдыҡ та тегене таш менән сәпләргә тотондоҡ. Ул түнәрәк тирәләп сығырға тырышып, унлы ла, һуллы ла борғоланды. Сыға алмаҫын аңлағастыр инде, ҡапыл уртаға күсте. Күҙ менән ҡаш араһында йомарланып төрәлдә, ҡойроғона таянып өҫкә башы менән күтәрелде лә ырғырға ынтылғанында ғына барыбыҙ ҙа кем ҡайҙа һибелдек, табандар ғына ялтыраны. Бына инде, йылан тимә, йылан аҡылы...

***Йылан ите менән дауаланған ауырыу тураһында ла күп ишетергә тура килде.*** Бала сағымда яңаҡтары тишек оло кешеләрҙе күреп, ғәжәпләнеп ҡарап торғанымды хәтерләйем. Яңаҡтары, муйындары тишелеп, шайыҡтары, эрендәре ағып йөрөгән кешеләрҙе халыҡ "ул ыйыҡ йәки ҡылауыр булған", тип әйтер ине. Әсәйем дә үҙенең бер яҡын ғына ағай тейеш кешеһе тураһында: "Ыйыҡ ине ул, ни хәтлем уҡымышлы зат булһа ла, етешһеҙлегенән ныҡ кәмһенеп, үҙенә лайыҡлы ғына кәләш ала алманы, бер һәпрә генә ҡыҙға өйләнде лә ҡуйҙы" , - тип әсенеп һөйләгәненән хәтерләйем. "Ыйыҡ", "ҡылауыр" һүҙҙәрен һүҙлектәрҙән эҙләп ҡараным, ләкин был ауырыуға мәғәнәләре тап килеп кенә торғандарын тапманым. Башҡорт теленең һүҙлегендә "Ыйыҡ - аттың мундаһын, түшен ҡамыт, ыңғырсаҡ, эйәр һуҡҡандан боҙолоп, аҙған шешек" тиелә. Һүҙлектә ҡылауыр - балалар ауырыуы, тип яҙылһа ла, ололар ҙа был ауырыуҙан яфаланған бит. Элек ҡарт өләсәйем Аллабирҙина Нәсиха Хәснитдин ҡыҙының ыйыҡтан кешеләрҙе шәбәйткәнен ишеткәнем булды. Ғәмһеҙлектер инде, нисек тәрбиәләгәнен яҙып алып ҡалыу башҡа ла кермәгән. Хәҙерге заманда медицина көслө, шөкөр, ундай ауырыулы кешеләрҙе күргәнебеҙ юҡ, ләкин донъя - ҡуласа, әйләнә лә бер баҫа, тиҙәр. Аллам һаҡлаһын.

Ниндәйҙер ауырлыҡтарға ҡаршы тороп, ҡыйыу аҙым эшләгән кеше тураһында "Йәне теләгән - йылан ите ашаған", тип әйтеләр ине. Күрәләтә бер кем дә йылан ите ашап ултырмай инде ул. Шулай ҙа кем белә, бәлки, кәрәге тейер, тип элек ҡылауырҙы, ыйыҡты, ауырыу кешенең үҙенә белгертмәй генә, нисек итеп йылан ите ашатып дауалауҙары тураһында оло кешеләрҙән һорашып яҙып алдым.

***Учалы районы Яңы Байрамғол ауылы Иҙелбаева Рауза апай Харрас ҡыҙы һөйләгәндәрҙән:*** Ауылыбыҙҙа оҫта балыҡсы Таип бабай менән бәләкәй генә кәүҙәле, сос ҡына Мәүлиха әбей Лоҡмановтар йәшәне. Әбей ҙә, бабай ҙа бик егәрле, ярҙамсыл, кешелекле заттарҙан булдылар. Мәүлиха әбей бизрә-бизрә талкан эшләр, күп итеп муйыл, көртмәле йыйып, кешеләргә таратыр ине. Ағай-энеләренең улы Йосопов Әсғәт ыйыҡ ауырыуы менән ҡаңғырҙы, муйынынан гел эрен ағып тора торғайны. Үҙе аяуһыҙ эшсән, етеҙ кеше булды Әсғәт. Мәүлиха әбей уға белгертмәй генә йылан тотоп алып, тиреһен һыҙырып, итен бешереп ашатҡан, һурпаһын эсергән. Беҙ Әсғәт шәбәйерме икән, юҡмы икән, тип, ситтән генә шым-шым ғына күҙәтә торғайныҡ. Аллаһҡа шөкөр, арыуланды бит, яра урыны әҙ генә ҡыҙарып торҙо. Шәбәйгәс, кәләш алып бирҙеләр.

***Яңы Байрамғол ауылынан Шаһизатова Ғәкифә апай һөйләгәндәрҙән:*** Сығышым менән Сораман ауылынанмын. Элек әбейҙәр бик шәп ине шул. Атайәсәйҙәребеҙ, ауырып китһәк, бер ҙә икеләнеп тормай, тиҙ генә уларға мөрәжәғәт итә һалырҙар ине. Беҙҙән ике-өс өй аша ғына бәләкәй генә кәүҙәле сатан Әсмә әбей йәшәне. Көндәшле ине. Әсмә әбейҙең дә, көндәшенең дә балалары күп булды. Нисек булһа ла, был ике көндәш ҡатын бик татыу йәшәнеләр. Әсмә әбей беҙҙе, ваҡ балаларҙы әйәртеп, емешкә лә йөрөттө. Үҙе мут ҡына ине.

*- Әсмә сатан, ни һатаң?*

*- Энә менән беҙ һатам.*

*Энә менән беҙ һатмаһам,*

*Түшәмгә төкөрөп тик ятам,* - тип көләп, үҙе тураһында һамаҡлар ине.

Ҡулы бик ипле булды, ҡот ҡоя, йөрәк һылай торғайны. Беҙҙең аранан күрше Һибәтулла ағай ыйыҡ менән яфаланды. Ыйыҡ - күберәк эйәк аҫтына, муйынға сыға торған эренле шешек инде ул. Әсмә әбейҙең улы ла шул ауырыуҙан ыҙа сикте. Әбейебеҙ урманға барып, миңһеҙ (бер ниндәй ҙә биҙәге булмаған ҡара йыланды миңһеҙ йылан тигәндәр) ҡап- ҡара йыланды тотоп алып, тиреһен һыҙырып, бешереп, һиҙҙермәй генә малайҙарға ашатҡан, һурпаһын эсергән. Малайҙарҙың яралары бөтөп, ҡоп-ҡоро булып, урыны әҙ генә ҡыҙарып бирсәйеп ҡалды. Башҡаса муйындарынан эрендәре ағып йөрөмәне.

Күмәк бала-сағалар еләккә барғанбыҙ. Ғабдуллин Нафиҡ ағайҙың аяғын йылан тешләне. Әбейҙәр аяғының тешләнгән еренән юғарыраҡ һығып бәйләнеләр ҙә яраһына ҡатыҡ һөрттөләр. "Шоңҡар" тигән этте саҡырып килтерҙеләр ҙә яраны ялаттылар. Ул эт әле лә күҙ алдымда тора. Ағайыбыҙҙың аяғы шешмәне, бәйен систе лә йөрөнө лә китте.

- Ә бына һеҙҙең яҡтарҙа йылан артынан һөт йәки ҡатыҡ һибеп ҡалыу йолаһы булманымы? - тип һораным Ғәкифә апайҙан.

- Юҡ, йылан осраһа, һин беҙгә дуҫ түгел - дошманһың, тип сыбыҡ йәки үлән булһа ла ырғытып ҡалығыҙ, тип өйрәтерҙәр ине ололар. Әйткәндәй, ныйырҙың ағы ла тылсымға эйә бит ул.

1950 йыл ине. Сораманда ҙур янғын булды, бер ынғайҙан ете өй янды. Һис юғында Фәсих ағайҙың өйө янмаһын, тип, стенаһына йән яҡлап кейеҙҙе ҡатыҡҡа буяп ҡағып ҡуйҙылар. Уның өйө янманы.

*Хоҙайым үҙе һаҡлаһын.*

*Һары йылан саҡһа, саҡһын,*

*Ҡара йылан саҡмаһын,* - тип һамаҡлай торғайны ололар.

Бер сирек, йәки сиректән ашыуыраҡ оҙонлоҡта һары йыландар була. Һуҡһаң, сырт- сырт итеп өҙәләп тора. Уны оса, ағасҡа ҡаҙала ла тишеп инә, өҙгөләнгән кәүҙәһен килеп ялғап алып китә, тип әйтә торғандар ине бабайҙар.

Йылан иҫ киткес ғәжәп тә, серле лә йән эйәһе бит ул. Үҙе үлһә лә, ҡойроғо үлмәй. Ағыуын ҡойроғонда ҡалдыра, үҙем күргәнем бар, һары төҫтә була. Тағы ла йылан мөгөҙөн һалып китә. Кем йылан мөгөҙөн табып ала, шул кешенең донъяһына эркелеп байлыҡ ағылып килә. Фәриҙә еңгә тауыҡ ояһынан йылан мөгөҙөн табып алыуы тураһында һөйләгәйне. "Донъябыҙға бол кереп торҙо. Заемдарым отто, етеш кенә йәшәп киттек. Ҡыҙғаныска ҡаршы, көшөләгәмдән мөгөҙөмдө урланылар. Урлаған кеше лә байып китте", - тине.

***Учалы районы Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол ауылынан Мирсәйетова Нәсимә Хәйретдин ҡыҙының һөйләгәндәренән:*** Мин мулла Мирсәйетов Хәкимйән Мирсәйет улының килене булам. Ул бик кешелекле, изгелексән, ярҙамсыл кеше ине. Ҡайным бер туған һеңлеһенең улын, минең иремде, үҙ балаһылай күреп, матур тәрбиә биреп үҫтергән. Ул иҫ киткес тәрән белемле, көслө мулла ине. Элек ауылдарҙа врачтар булманы бит. Кешеләр һәр ваҡыт ярҙам һорап, ҡайныма килерҙәр ине. Йөклә сағымда ла, былай ваҡытта ла, кеше килһә, ҡайным: "Сарпыу һуғылып ҡуйыр, - тип, мине сығарып ебәрер ине. Ул кешеләрҙе үләндәр менән дауаланы, сынаяҡҡа доғалар яҙып эсерер, бетеү яҙып бирер, үткәрмә ясин аша үткәрер ине.

Бер ваҡыт игеҙәк ҡыҙҙары менән бер ҡатын килде. Ҡыҙҙарҙың берeһенең муйынына ыйыҡ сыҡҡан ине. Муйынынан эрен ағып тора. Ҡайным ҡараны ла: "Был ауырыуҙы йылан ите ашатып ҡына дауалап була. Ҡыҙыңа олатай ҡунаҡҡа саҡырҙы, тип әйтерһең", - тине. Ҡайным урмандан йылан эҙләп килтереп, ҡыҙға итен бешереп ашатты. Ҡыҙ һауығып китте. Игеҙәк ҡыҙҙарҙың тормошо матур булды. Арттарынан матур-матур балалар ҡалдырып, һикһәндә тултырып, мәңгелеккә күстеләр.

Юлай Моратов тигән ир аҫылы ауылыбыҙҙа бөтә яҡҡа йәм биреп, нур сәсеп торған мәсет тәҙөттө. Мәсетебеҙ ҡайнымдың исемен, Хәкимйән мулла исемен йөрөтә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

Үткән гүмер иҫкән ел кеүек кенә, тигән боронғолар. Йәшәйештең ҡануны шулай: һәр быуын кешеләре үҙе йәшәгән дәүергә инеңдә алып китеп тора. Дәүер менән бергә боронғолоҡ, хәтер, тарих китә; заманалар үҙгәреп, аң, донъяға ҡараш үҙгәрә. Ваҡытында игтибар итмәү арҡаһында күпме мөһим әйберҙәр, боронғолар аҡылы онотола бара.

Иҫ китмәле: йыланды эҙләп табырға, тапҡас та тотоп алырға кәрәк бит әле. Арбап саҡырып килтерҙеләрме икән ни, тип аптырайым. Күҙе ауырткан кешеләрҙе лә, йыланды һауытка һалып ҡайнатып, шуның быуына тотоп шәбәйткәндәре тураһында элек яҙғайным. Хәҙерге заманда йыландарҙы арбап килтерә алған кешеләр тураһында ишеткәнем дә, күргәнем дә юҡ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ата-бабаларҙан ҡалған был ғилемде алып ҡала алмағанбыҙ, юғалтҡанбыҙ. Бала саҡта: "Борон башҡорт наҙан булған", - тип, тылҡып, мейегә һеңдерергә тырыштылар. Йондоҙҙарға ҡарап, йылдың нисек килерен билдәләгән, тәбиғәт менән килешеп йәшәгән, һәр ауырыуҙың име бар икәнен белгән, көнсығыш әҙәбиәтен һыу кеүек эскән, бар белемен быуындан-быуынға тапшыра барған халыҡ наҙан була торғаны бармы инде! Ни хәтлем күпте белһәләр ҙә, мин-минләнеп ҡупайып, маҡтанып йөрөмәне шул бабайҙар, инәйҙәр. Улар: "Балам, һиңә сауап эҙләп килдем, бына шул эште эшләп өйрән әле, ошо доғаны отоп алып ҡал әле", - тип әйтерҙәр ине. Ныҡ зирәк, һиҙгер, белемле кешеләр тураһында: "Ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белә", - тигән мәҡәл күпте күргән, күпте белгән, изге күңелле, сабыр холоҡло, итәғәтле инәйҙәребеҙ, бабайҙарыбыҙ хаҡында әйтелгән ул. Ололар аҡылын, халыҡ медицинаһы тураһындағы мәҡәләләрҙе туплап, ҙур йыйынтыҡ итеп баҫтырып сығарғанда ла шәп булыр ине.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы**
**Ҡәйепҡол ауылы.**

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ишектәрҙе асыусы ике күнегеү

**1-се күнегеү**

Беренсеһендә күнегеүҙәрҙе ҡулдарығыҙ менән эшләргә тура киләсәк. Инструкцияны ике тапҡыр уҡып сығығыҙ һәм башлағыҙ.

Тура баҫығыҙ, ҡулдарығыҙҙы алға һуҙығыҙ, улар ус менән иҙәнгә параллель булһын. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Уң яҡ беләгегеҙгә ауыр, көнкүреш тауарҙары, азыҡ-түлек менән тулған сумка аҫылған тип күҙ алдына килтерегеҙ. Ул шул тиклем ауыр, саҡ күтәреп тораһығыҙ. Хәҙер һул яҡ беләгегеҙгә шар бәйләнгән тип күҙ алдына килтерегеҙ, ул һеҙҙе өҫкә тарта. Был уйҙағы картиналарҙы ысынбарлыҡта тип уйлағыҙ. Бер нисә секундтан күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Инструкцияны тағы бер тапҡыр уҡығыҙ. Әҙерһегеҙме? Улайһа, күнегеүҙе тағы бер тапҡыр ҡабатлағыҙ.

Күҙҙәрегеҙҙе йомғанда ҡулдарығыҙ бер кимәлдә ине. Хәҙер уң ҡулығыҙ һулынан түбәнерәккә төшкән. Ни өсөн?

**2-се күнегеү**

Икенсе күнегеүҙе ултырып эшләргә кәрәк. Инструкцияны ике тапҡыр уҡып, уны үтәгеҙ.

Башығыҙҙы мөмкин булған тиклем, артыҡ көс түкмәй генә, бора алғансы тиклем һулға бороғоҙ һәм ҡайҙа тиклем боролғанын иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Күҙегеҙҙе йомоғоҙ һәм башығыҙҙы тағы ла арыраҡ бора алам тип күҙаллағыҙ. Күҙегеҙҙе асығыҙ һәм башығыҙҙы ҡабат һулға бороғоҙ.

Инструкцияны тағы бер ҡат уҡып сығығыҙ. Күнегеүҙе ҡабатлағыҙ.

Башығыҙҙы икенсе тапҡыр борғанда ул тәүгеһенә ҡарағанда артҡараҡ киттеме? Ни өсөн?

Ошо ике "Ни өсөн?"гә яуап - һеҙҙең аңығыҙ тәнегеҙ менән идара итә.

Быныҡ нимә аңлатканын аңлайһығыҙмы?

Яңы кеше өсөн был, үҙегеҙгә насар булһын өсөн бөтә нәмәне лә эшләй алаһығыҙ йәки үҙегеҙгә яҡшы булһын өсөн бөтә нәмәне лә эшләй алаһығыҙ, тигәнде аңлата. Йәғни һәр уйланған эшегеҙҙе тормошҡа ашырыу өсөн һеҙ үҙегеҙҙә тейешле энергияны таба алаһығыҙ. Быға тиклем ышанмаған һәләткә һәм ғәҙәткә эйә була алаһығыҙ.

Киләһе этапта фән беҙҙең аңыбыҙҙың бер-береһе менән бәйләнгәнлеген асыҡлауын белерһегеҙ. Бындай күҙаллау - ысын мәғәнәһендә сифатлы алға һикерeү ул.

Был нимә аңлата, беләһегеҙме?

Ниһайәт, ошо юлдарҙы уҡып, уйҙың ижади энергияны тәшкил итеүен аңларһығыҙ, ә энергия булып торған байлыҡ та уй ярҙамында булдырыла.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**






Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№12 Аванесову Григорию Александровичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"






Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№14 Багаутдиновой Зульфие Альбертовне** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"






Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№7 Рыскильдину Альберту Ахметовичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"

*ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА*

# СЕЙӘ



**Халыҡ имселәре кешенең сейә менән дауаланмаған ағзаһы һәм системаһы юҡ, тип иҫәпләгән борондан. Был исемлектә йөрәк-ҡан тамырҙары, бәүел-енес, үпкә системалары, ашҡаҙан-эсәк юлы, бауыр, бөйөр, ашҡаҙан аҫты биҙе, терәк-хәрәкәт аппараты, аҙ ҡанлылыҡ та бар.**

Сейә үҙәк нервы системаһына ыңғай йоғонто яһай, тынысландырыу һәм көҙән йыйырыуҙы баҫыу сифаттарына эйә. Элек ҡайһы бер табиптар емеш һыуын психик ауырыуҙарҙы һәм быуманы дауалағанда ҡулланған. Һөт менән сейә емешенән эшләнгән дауа артриттарҙан ярҙам итә. Ә бына һөткә һалып бешерелгән йәш япраҡтары төрлө сығанаҡлы һары ауырыуҙарынан яҡшы килешә. Ашҡаҙан язваһы булғанда сейә тамыры төнәтмәһен эсергә кәрәк. Хатта емеш һабаҡтары ла уның файҙалы - мочекислый диатез һәм быуын ауырыуҙарынан дауалай.

**Күрем оҙайлы һәм ауыртып килһә.** Сейәнең 1 ҡалаҡ емеш һабаҡтарына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут еңелсә генә ҡайнатып алырға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашау ваҡытына ҡарамай, көнөнә 3-4 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө йәки ярты стакан миҡдарында эсергә.

**Ашҡаҙан һәм бөйән язваһы.** 2 балғалаҡ сейә тамырына 1 стакан һыу ҡойоп, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм тағы 5 минут утта тоторға. 1 сәғәт төнәткәндән һуң һөҙөргә. Ашарҙан 20-30 минут алда стакандың өстән бер өлөшө, йә бер сирек итеп көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

**Артрит, подагра, матдәләр алмашыныуы боҙолғанда, атеросклероз.** Стакандың өстән бер өлөшө миҡдарында, йә сирек стакан яңы һығылған сейә һутын миҙгел дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

**Һары ауырыуы.** Сейәнең йәш япраҡтарын ваҡларға, 3-4 ҡалағын ҡайнап килгән ярты литр һөткә һалып, 5 минут ҡайнатырға. Шунан 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Дауаланыу мөҙҙәте 2-3 аҙна. Ауырыу бирешергә теләмәһә, дауаланыуҙы ҡабатларға була.

**Иҫкәртеү.** Сейә һөйәгенең орлоғо ағыулы. Өс-биш бөртөк ашағандан бер нәмә лә булмаҫ, ә бына 2-3 тиҫтәнән зыян күреүегеҙ бар. Унан ҡоҫҡо килеп, ныҡ хәл бөтөү менән генә ҡотолһаң яҡшы ла, әммә йөҙ һәм ирендәр күгәреп, көҙән йыйырып, хатта аңды юғалтыу ҡурҡынысы ла бар һәм был осраҡта ашығыс медицина ярҙамы мотлаҡ талап ителә. Сейәнең яңы йыйылған емештәре һәм уны бешергән һыуҙы (тамырҙарынан айырмалы рәүештә) ашҡаҙан һәм бөйән язваһы булғанда, эрозив гастрит көсәйгән саҡта ҡулланырға ярамай. Киҫкен гастроэнтерит һәм эсәктәрҙең киҫкен ҡыҫылыуы ваҡытында сейәне тик һут рәүешендә генә ҡулланырға ярай. Сейә һутын төшлө емештәр - алма, виноград һуттары менән генә ҡатыштырырға кәрәк.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# МИКРОБТАР ҠАЙҘА?



**Микроорганизмдар беҙҙе уратып алған һәм улар беҙгә ҡарағанда ла күп. Әммә уларҙың 1-2 проценты ғына иммунитеты яҡшы кешегә зыян килтерә ала. Тимәк, гигиена ҡағиҙәләрен тотҡанда, микробтар ҡурҡыныс түгел.**

Ғалимдар шулай уҡ ҡайҙа микробтар күберәк икәнен асыҡлаған. Бактериялар аш бүлмәһенең кран аҫтындағы торбаһында, посуда йыуыу өсөн ҡулланылған губкала күп була. Сүп биҙрәһен дә йыш ҡына йыуып торорға кәңәш итә белгестәр. Һыуытҡыс, башҡа көнкүреш техникаһының тотҡаларында ла микробтар күберәк була икән. Кер йыуыу машинаһы ла бактерияларға "бай". Шулай уҡ автомобилдәр ҙә хәүеф төркөмөндә.

Ә бына кеше тәнендә иң күп бактериялар ҡулдан алып терһәккә тиклемге өлөшөндә. Унда яҡынса бактерияларҙың 44 төрө осраған. Тикшеренеү барышында экспериментта ҡатнашыусыларҙың барыһы ла бер үк төрлө һабын менән йыуынған, иң аҙаҡҡы көндә бөтөнләй һабын ҡулланмаған. Һөҙөмтәлә 100-гә яҡын төр микроорганизм табылған. Уларҙың иң күбе беләҙектән терһәккә тиклем "йәшәгән". Ысынлап та, ҡулдарҙы йыуғанда күптәр ҡулдарҙы беләҙеккә тиклем генә йыуа. Ғалимдарҙы тағы ла шул аптыратҡан: ҡоро тирегә ҡарағанда майлы тирелә бактериялар аҙыраҡ булып сыҡҡан. Ә иң таҙа урын - ҡолаҡ арты. Унда 15 төргә яҡын бактерия осраған.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Август (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (14) дүшәмбе | 4:38 | 6:08 | 13:30 | 18:58 | 20:28 | 21:58 |
| 24 (15) шишәмбе | 4:40 | 6:10 | 13:30 | 18:55 | 20:25 | 21:55 |
| 25 (16) шаршамбы | 4:42 | 6:12 | 13:30 | 18:53 | 20:23 | 21:53 |
| 26 (17) кесе йома | 4:43 | 6:13 | 13:30 | 18:51 | 20:21 | 21:51 |
| 27 (18) йома | 4:45 | 6:15 | 13:30 | 18:48 | 20:18 | 21:48 |
| 28 (19) шәмбе | 4:47 | 6:17 | 13:30 | 18:46 | 20:16 | 21:46 |
| 29 (20) йәкшәмбе | 4:49 | 6:19 | 13:30 | 18:43 | 20:13 | 21:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ИРЕКМӘН ЯҘМАҺЫ



# БӨРКӨТ САҢҠЫЛДАЙ -

## ояһы яналыр...

**Тауға менеп еткәс, яттым. Яурынды муксаның сепрәк һабы һыкты. Кейем тирҙән лыс һыу. Кирза итектәрҙе сисеп, ҡанланып ҡырылған бармаҡтарҙы ыуып алдым. Аяҡтар талған. Салкан ятып, күккә ҡараһам, унда төтөн аҡ томан булып һауаны япҡан, ҡояш та саҡ-саҡ ҡыҙарып күренә биреп ҡала. Тын алыуы ауыр, һыу эске килеп кенә тора.**

Төтөн пәрҙәһен йыртып, юлдашым - Сибай егете Илгиз килеп сыкты. Уның арҡаһында һыуы бушаған һыу һиптергес һауыт-тоҡ. Мин уға эсер һыуымды бирҙем дә, үлән буйлап ҡарышлап ҡыҙынап килгән утҡа ҡаршы киттем. Әммә йөкмәп килгән һыуым тиҙ генә бөттө һәм ҡабаттан шишмәгә йүгерҙем. Унда һыуҙы улаҡтан ғына тултырырға була һәм... сират. Ҡыҙҙар һыуҙы фильтр аша үткәреп бирә. Таҙартылмаған һыу һиптергестәребеҙҙе сафтан сығара ла ҡуя. Шул сәбәпле бөтөн ошо шарттарҙы үтәргә мәжбүрбеҙ.

Сираттағы тапҡыр үрмәләгәндән һуң, тауҙы ҡалдырып, төшәргә бойороҡ булды. Бында ут менән көрәшеү урынлыһыҙ ине. Ялпылдап килгән ерән аждаһаға ҡаршы ҡул һиптергестәре менән генә ҡаршы тороу мөмкин түгел. Күнелде көсһеҙлек һәм әсенеү тойғоһо иҙә...

Яңы план өлгөрҙө: утты йырып аша сығармаҫҡа, аргта - ауыл. Күҙ алдында янған һәм уға ярҙам итер өсөн бер нәмә лә эшләп булмаған тауға ҡарап-ҡарап алабыҙ. Шул ваҡыт тауҙың бер яҡ һыртынан ауыл егеттәре килеп сыкты. Улар икенсе яҡтан һүндереп киләләр икән. Беҙҙең ун биш ирекмәндән генә торған отрядҡа йөн инде, беҙ ҙә егеттәргә ярҙамға ташландыҡ. Артыбыҙҙан әс йәш ҡыҙ бала эйәрҙе. Тауға менгәс тә үләндәрҙе һүндереүгә йәбештек, ут ағастарға үрмәләй, уларҙың ҡайһы ягынан буйлап менеп киткәнен дә аңғармай ҡалаһың, дөрләй ҙә башлай. Ағас тоҡанһа, яҡын барып булмай, бит яна, тын алыу ауыр. Арҡалағы һыу ҙа аҙға ғына етә. Һыу артынан йүгереп төшөп килеүгә инде бая беҙ ҡотҡарып маташҡан ағастар ялпылдап яна... Шулай ҙа бирешмәйбеҙ, аҙымлап, ағастан-ағасҡа, утты сигендерәбеҙ. Ниндәйҙер ваҡыттан тауҙы баҫып алабыҙ. Ул арала намаҙ ваҡыты еткән. Хәлбулғандар шунда намаҙға баҫа. Минең ундай көс юҡ, арып ҡолаған еремдә Аллаһҡа ялбарам - ямғыр һорайым.

Артабанғы тау үрендә ут айырыуса ҡотора. Өҫтә бөркөт саңҡылдай. Күрәһең, ояһы шундалыр. Унда ярҙам итә алмаҫыбыҙҙы аңлайбыҙ һәм әсенешеп ҡарап ҡына торабыҙ. "Эх, бында самолет кәрәк ине", ти егеттәр. Һәм, ысынлап та, төтөн араһынан бер вертолет килеп сыға ла, шул тирәлә өйөрөлгәс, китеп олаға. Моғайын, берәй министр йә чиновник булғандыр...

Кискә беҙҙе алыштырыуға ике-өс кенә кеше килде. Уларҙа тик көрәктәр генә ине. Үҙемдең тәүге көнгө хәлемдә иҫләп, береһенә һыу һиптергесемде бирҙем. Тау араһында көрәк менән таш түкмап йөрөү эш түгел.

Базаға (Урыҫбай ауылы) килгәс, ашап, йыуынып алдыҡ. Унда төп көстәрҙең күрше ауыл янындағы янғынға ебәрелгәнен белдек. Беҙҙең отрядта 20-30-ар кешенән торған төркөмдәр булһа ла, улар төрлө ерҙәрҙә йөрөгәс, утты ҡамап һүндереү форсаты булманы. Төндә тегe тауҙарҙа ҡабаттан ут тоҡанды...

Ирекмәндәр Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәрен әрләй. Эштәренә яуапһыҙ ҡарайҙар, бурыстарын үтәмәйҙәр, тиҙәр. Минеңсә, ул бахырҙар бөтөнләй арығайны. Йөҙҙәренә ҡараным: усалдар, йонсоғандар... Шулай ҙа кейемдәре беҙҙекенә ҡарағанда күпкә таҙараҡ...

Янғында ирекмән булып йөрөп, төрлө халыҡты күрҙем. Күптәр ойошмаларҙан килгән. Кемдәрҙер ярһып йөрөп утҡа ҡаршы көрәшә, йөрәге сыҙамай. Кемдәрҙер ҡыуып алып килгәндәр, кемдәрҙер фотоға төшөү һәм интернетка отчет һалыу өсөн генә йөрөй. Кемдәрҙер ошо бәлә өҫтөндә "герой" булыу кәрәк, етәкселәргә "халыҡ яҡлы" икәнен күрһәтеү мөһим. Шәхсән үҙем тыуған яғым алдындағы бурысымды үтәү өсөн килдем. Бөтөнләй был яҡтарҙан булмаһам да.

Минең менән янғында йөрөгәндәрҙең барыһына ла оло рәхмәтемде еткерәм. Беҙҙе ашатҡан, эсергән халыҡҡа ла рәхмәт. Ошо урында тарихты яҡшы белгән уҡытыусымдың һүҙҙәрен ҡабатлағым килә: Мәскәү ярҙам итмәҫ, үҙебеҙ, тик үҙебеҙ еңеп сығайыҡ был бәләләрҙе. Был беҙҙең тыуған яҡ!

**Фаил ВӘЛИЕВ.**
**Мишкә районы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯМАН ҠАТЫН АЛҒАНСЫ...

## буйҙаҡ йөрө ҡанғансы

Яман атҡа менгәнсе, йәйәү йөрө талғансы. Яман ҡатын алғансы, буйҙаҡ йөрө ҡанғансы.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәшлектә нисек булһа, ҡартлыҡта шулай була. Йәшлектә үҙләштергән матур ғәҙәттәр ҡартлыҡ гүмерендә еңеләйтер, насар ғәҙәттәр - ауырлаштырыр.

**(Дмитрий Лихачев).**

Биш йәшендә "ярай" һәм "ярамай" тигәндең айырмаһын белмәгән бала уны үҫкәс тә белмәйәсәк.

**(Илья Шевелев).**

Баландан кумир яһама, үҫкәс, ҡорбан талап итер.

**(Пьер Буаст).**

Дошманың ас булһа - ашат. Сарсаған булһа - эсер. Ошоларҙы эшләһән, уның башына яныусы күҙ һалырһың.

**(Апостол Павел).**

Һәр гений - бер аҙ ғына бала, һәр бала - бер аҙ ғына гений.

**(Артур Шопенгауэр).**

Йөрәк менән баш көрәшенең аҙағында ... ашҡаҙан еңә.

**(Станислав Ежи Лец).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер батша һарайы алдында бейек тирәк үҫкән. Бер саҡ шул тирәккә оя ҡорған ике сәүкә салына батша күҙенә. Батшаға был ҡоштарҙың ҡылығы ҡыҙыҡ тойола һәм ул уларҙы күҙәтә башлай: ата сәүкә көн дә ояһынан ҡайҙалыр алыҫҡа осоп китә һәм бер аҙҙан инә сәүкәгә һәм ҡошсоҡтарына аҙыҡ килтереп ашата. Әммә бер көндә ата сәүкә киткәс, был ояға сит ата сәүкә осоп килә һәм инә сәүкәне әүрәтеп, үҙе менән осороп алып китә. Ата сәүкә әйләнеп ҡайта, ҡошсоҡтарын ашата һәм башҡа көндәрҙә ул бер ҡайҙа ла осмай, ҡошсоҡтарын һаҡларға ояһында ҡала.**

**Бер нисә көн үтә. Ояла бер ниндәй ҙә йәнлелек һиҙелмәгәс, батша үҙенең бер хеҙмәтсеһен ағас башына мендереп ебәрә. Хеҙмәтсеһе уға ояларғы ата сәүкәнең дә, ҡошсоҡтарҙың да астан үлеүен хәбәр итә. Батшаға был хәл шул тиклем ныҡ тәьҫир итә. Инә сәүкәнең хыянаты бөтөн донъяһын әйләндереп ташлағандай була. Батша тәхетенән, ҡатынынан, балаларынан баш тартып, монастырға китә.**

**Әммә батшаның ҡатыны, балалары астан үлгәндә лә, иренә тоғро ҡала. Бер аҙҙан ҡайғыһына түҙмәй, үҙе донъя ҡуя. Шулай итеп, батшаның бар тоҡомо ҡорой. Ҡоштар һәм кешеләр һәр береһе үҙ законы менән йәшәй икәнен белмәгән була шул батша..."**

ТӨРЛӨ-ТӨРЛӨҺӨ

# ИҪТӘЛЕК ҺАҠЛАНА

**Өфөлә Зәки Вәлиди урамындағы Башҡорт дәүләт медицина университеты бинаһында тантаналы рәүештә Өфөлә тыуып үҫкән легендар шәхес, Арктиканы өйрәнеүсе һәм ҡотопсо Валериан Альбановҡа иҫтәлекле таҡтаташ асылды.**

Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты, был күренекле яҡташыбыҙ иҫтәлеген мәңгеләштереүҙә сираттағы аҙым, тип билдәләне ул. "Япраҡ ҡына беҙ Өфөлә Арктиканы өйрәнеүселәргә арналған ҡотопсолар музейын асҡайныҡ. Ошо мәсьәләне тәрәнерәк өйрәнә башлағас, Арктиканы һәм Антарктиданы тикшереү эшендә республикабыҙҙан күпме сағыу һәм арҙаҡлы шәхестәрҙең ҡатнашыуы тураһында белдек. Үҫеп килгән быуын геройҙарыбыҙҙы белергә тейеш. Рус география йәмғиәте бурыстарының береһе - тарихыбыҙҙың быға тиклем билдәһеҙ булған биттәрен асыу", -тине Радий Хәбиров. Рус география йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе етәксеһе, Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Салауат Сәғитов билдәләүенсә, штурман Альбанов хаҡында мемориаль таҡтаташтың медицина университеты бинаһына ҡуйылыуы осраҡлы түгел. Элек бында ир-егеттәр гимназияһы булған, Арктиканы өйрәнгән яҡташыбыҙ бер нисә йыл шунда уҡыған.

# СИЛӘБЕГӘ БАРАМ ӘЛЕ...

**20-31 августа Нефтекама дәүләт филармонияһынан Башҡортостандың халыҡ артисы Раян Алтыншин етәкселегендәге "Ҡәрҙәштәр" башҡорт эстрада төркөмө Силәбе өлкәһенә гастролдәргә юлланa. Төркөм "Өмөт, хыял һәм йыр менән" тигән концерт программаһы менән сығыш яһай.**

Силәбелә башҡорттар төбәктең төп аҫаба халҡы, Урал аръяғы башҡорттары этник төркөмөнә ҡарай. Ғалимдар әйтеүенсә, уларҙың формалашыу нигеҙендә башҡорттарҙың төньяҡ-көнсығыш этнографик төркөмө ырыуҙары тора: ҡатай ырыу-ҡәбилә берләшмәһе: бәкәтин, ҡалмаҡ, ҡатай, һалйот, һеңрән һәм терһәк; табын ырыу-ҡәбилә берләшмәһе: ҡыуаҡан, һырҙы һәм табын; әйле ырыу-ҡәбилә берләшмәһе: әйле һәм һыҙғы. Уларҙың һөйләшеү теле башҡорт теленең көнсығыш (ҡыуаҡан) диалектына ҡарай. Ул бер нисә һөйләшкә бүленә: арғаяш, әй, мейәс, һалйот һәм ҡыҙыл.

Силәбе башҡорттары фән һәм мәҙәниәт үҫешенә тос өлөш индергән күренекле яҡташтары менән ғорурлана. Ошо төбәктең данлы улдары араһында башҡорт халҡына, тотош илгә билдәле исемдәр байтаҡ. Ғалим, яҙыусы Әбделҡадир Инан, Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренең һәм Уложенная комиссияһына һайланған башҡорт депутаттарының (1767-1769) береһе Баҙарғол Юнаев, Советтар Союзы Геройҙары - осоусы Ғаяз Баймырҙин, пулеметсы Барый Солтанов, ғалимдар - этнограф Наил Бикбулатов, философ, культуролог Дамир Вәлиев, шағир һәм публицист Ғәлимов Сәләм, драматург, яҙыусы һәм шағир Ҡадир Даян, шағирә Кәтибә Кинйәбулатова, спортсы Эльбрус Нигмәтуллин, профессиональ боксёрҙар Хәбир һәм Сабир Сөләймәновтар, Денис Шафиҡов, көрәш буйынса РСФСР-ҙың беренсе чемпионы Харис Йосопов һәм башҡалар.

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирләр:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башкортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
20 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3250
Заказ - 951

1 582218 911006 21034